ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 октябрь (карасай) 2019
№42 (876)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Башлығы" һүҙе... ҡайҙан килеп сыҡҡан? 3



Телде һаҡлау - көндәлек эш 7



Закон телен... дөрөҫ аңлайыҡ һәм аңлатайыҡ! 8-9



Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән... 10



ТВ-программа 14

*Мөхтәрәм йәмәғәт! Арзанға яҙылып ҡалығыҙ!*
*Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 20 октябргә тиклем 2020 йылдың беренсе яртыһына ПР905 индексы "Киске Өфө"гә - 611 һум 70 тингә яҙыла алаһығыҙ.*
*Был мәғлүмәтте йәнәшәләге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине.*
*МӨХӘРРИРИӘТ.*

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# ТЕ ЯҠҠАМЫ? БЫ ЯҠҠАМЫ?




**Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең бөтә ижадында уның үҙ совет дәүере уҙаманы, үҙ Рәсәй Ватаны гражданины һәм үҙенең туған башҡорт халҡының улы булыуы күренә: илгә дошман яуы ябырылғас, ат атланып яуға киткән яҡташтарын күтәрмәләп-әйҙәп яусыл оран ташлай; илде тергеҙгән дәүерҙә Рәсәйҙе һәм ватансыллыҡ рухын данлай; балалар әҙәбиәтен үҫтереү өсөн шиғырҙары, повестары илгә тарала; театр сәхнәләрен шаулатыр драматургия әҫәрҙәре яңы офоҡтар аса; социалистик ҡоролош йөй-ситенән һүтелә башлағас, йәшәү асылы һәм ҡанундары хаҡында фәлсәфәүи ҡараштары әҫәрҙәренә күсеп, халыҡҡа барып етә... Былай ынтыматлы һәм емешле ижад Хоҙайҙан бирелгән егәрле һәләттә, йәшәү менән үлем сигендә йөрөп, теге һәм был донъяларҙың тынын тойған кешелә генә булыуы мөмкин.**

(Дауамы 12-13-сө биттәрҙә).

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

**Ҡарап торһаң, тәбиғәттә барыһы ла ғәжәп гармониялы ҡоролған. Тик тормошобоҙға ҡарап, тәбиғәт ҡанундарына ярашлы йәшәйбеҙ, тип әйтеүе ауырыраҡ. Ирекһеҙҙән шундай һорау тыуа: "Ниңә берәүҙәр икенселәрҙең холҡонда булған яҡшы сифаттарҙы юҡҡа сығарып, уларҙың шәхес аңын тигеҙләп, бары тик "ҡулланыусылар", дөрөҫөрәге аң кимәле түбән булған "төҫһөҙ масса"ға әйләндереп хакимлыҡ ҡылырға тырыша?"**

# МАТУР СИФАТТАРЫБЫҘ...

## баҫылып ҡалмаһын

Һүҙемде ҡеүәтләп, шунан башлар инем: мәктәп балаларын уҡытыу системаһында, бигерәк тә өлкән синыфтарҙа, Берҙәм дәүләт имтиханы биреү өсөн генә әҙерлек бара кеүек. Төп көс уйлау ҡеүәһен, фекер йөрөтөү кимәлен үҫтереүгә түгел, нисек булһа ла күберәк балл йыйып, имтихандарҙан имен-аман ҡотолоуға ғына сарыф ителә төҫлө. Борон беҙгә "Русса белмәһәң, кеше була алмайһың", - тип әйтәләр ине, бөгөн беҙ балаларҙы "Берҙәм дәүләт имтиханын бирәлмәһәң..." - тип ҡурҡытабыҙ. Әгәр ҙә йәш быуынға йәмғиәттә үҙ урынын табыу өсөн ошо юл дөрөҫ тибеҙ икән, мин уларҙы балалар баҡсаһынан уҡ "өркөтә" башларға тәҡдим итер инем.

(Дауамы 2-се биттә).

*АФАРИН!*

# БАШҠОРТ АТТАРЫНА...

## майҙан бирегеҙ!

**Башҡортостан автономияһына 100 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән төрлө саралар араһында халыҡтың иғтибарын айырыуса йәлеп иткәне, моғайын да, "Терра Башҡортостан" ат-спорт турниры булғандыр. Республиканың һәр районынан бәйгеселәр ҡатнашыуын маҡсат итеп, быйылғы йылдың апрель айында Өфөләге "Аҡбуҙат" ипподромында старт алған масштаблы сара, ниһайәт, 11 октябрҙә еңеүселәрен билдәләне. Бәйге һөҙөмтәләре буйынса Күгәрсен районынан Динис Ҡорбанаев төп еңеүсе тип табылды.**

(Дауамы 6-сы биттә).



12+

***✓ Башҡортостан демографик күрһәткестәр буйынса илдең иң ҙур төбәктәре иҫәбендә. Даими халыҡ һаны буйынса ул 7-се урында тора. Уның муниципаль-территориаль бүленеше лә тармаҡлы, ҡатмарлы.***



*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

# МАТУР СИФАТТАРЫБЫҘ...

## баҫылып ҡалмаһын

**(Башы 1-се биттә).**

Хәҙер инде урамға сығайыҡ. Һеҙ унда үҙегеҙҙе нисек тояһығыҙ? Бына мин дә шулай! Рәхим итегеҙ: аяҡ аҫтыңа ҡарап йөрөмәһәң, ниндәй генә сүп-сар, ҡалдыҡтар, бүлендектәр юҡ та, ҡолағыңды томаламаһаң - ҡатлы-ҡатлы "мат". Мәктәп уҡыусылары - ҡыҙҙары, малайҙары ла бер кемдән дә тартынмай, аралашыу өсөн шундай һүҙлек ҡуллана. Алдыңды-артыңды ҡарап, самалап йөрөмәһәң, "үҙеңдең кем икәнлегеңде" бөтәһе алдында аңлатырға ла күп һорамайҙар. Әлбиттә, быларҙы тыйыусы закондар ҡабул ителгәндер, тик үтәүселәре ҡайҙа? Әле күптән түгел Грозный ҡалаһында гастролдә булғанда шуға шаһит булдым: уларҙың төҙөлөш барған урындары ла беҙҙең урамдарға ҡарағанда таҙараҡ. Ғөмүмән, ҡала урамдары таҙа, тәмәке тартыусылар юҡ. Бында традицияларҙы тотоу, эске һәм тышҡы мәҙәнилелек, өлкәндәргә хөрмәт - тәбиғи күренеш. Өлкәндәре лә быға лайыҡлы, күрәһең. Бәлки улар барыһы ла Берҙәм дәүләт имтихандарын яҡшы биргәндер?..

Медицина фәне үҫешкән һайын сирҙәр ҙә ҡалышмай, ауырыусылар һаны арта. Ни өсөн? Кемдәрҙер фатирҙарына миллиардтар тыңҡыслағанда, үҙәк телеканалдар ауырыу балаларға, башҡа мохтаждарға әлеге "төҫһөҙ масса"нан ярҙам һорап аҡса йыя, хатта уларҙы намыҫлылыҡҡа өндәй. Һаулыҡ һаҡлау системаһына яңылыҡтар һәм ҡырҡа үҙгәрештәр керетергә ваҡыт етмәнеме икән? Аҡсаһын ҡайҙа тотонорға белмәй шашынған бай ҡатламдың финанстарын ошо сығымдар өсөн ҡулланып булмай микән? Фейк булмаһа, шундай яңылыҡ ишеттем: пенсия йәшенә етә яҙып мәрхүм булғандарҙы Рәсәй илһөйәрҙәренә тиңләп, ерләү сығымдарын хөкүмәт ҡапларға тейеш, имеш. "Киткәндәргә" пенсия түләнмәй - илгә экономия. Илһөйәрлекте абсурд дәрәжәһенә еткереү түгелме был? Казармалар емерелеп, һалдаттарыбыҙ ғәрипләнеп, боеприпас складтары шартлаған фонда был нисегерәк яңғырай? Урман уртаһында ултырып өй яңыртырға йүнле ағас ала алмаған ерҙәштәребеҙ хаҡында ла, Рәсәй урмандарының эшелондар менән сик артына сығарылыуын да ишетеп торабыҙ. Нефть хужаларының, газ һәм башҡа ер аҫты байлыҡтарын үҙ мәнфәғәтендә тотоноусыларҙың илһөйәрлек хәлдәре нисек икән? Улар Искәндәр Македонскийҙың: "Ерләгәндә минең тырпайған ҡулымды сығарып ҡалдырығыҙ, ярты донъяны яуланым, әммә бер нәмәһеҙ, буп-буш ҡул менән китәм!" - тигән риүәйәтен белмәй тиһегеҙме, беләләр! Илһөйәрлеккә өндәүселәрҙең күбеһе сит илдәрҙә күсемһеҙ милек алып, шунда ял итеп, дауаланып, балалары, ейәндәрен дә шунда уҡыталар. Ә беҙ бында илһөйәрлекте Берҙәм дәүләт имтиханы биреп, аэропорттарға шәхестәр исемен ҡушып тәрбиәләргә булдыҡ...

Беҙ тәү сиратта үҙебеҙҙең тарихты белергә, бала саҡтан уҡ уны өйрәнеп үҫергә тейешбеҙҙер, тип уйлайым. Тарих трактовкаға еңел бирелә торған фән, мәғлүмәтте төрлө күҙлектән сығып биреү мөмкинлеге ҙур. Мәҫәлән, Алексей (Ҡотломөхәмәт) Тевкилев, Иван Кирилов, Әхмәтзәки Вәлиди, Шәкирйән Мөхәмәтйәновтарҙың кемлеген беҙҙең быуын белә, ә Человек-паук, Базлайтер, Гарри Поттер, Питер Пэн һәм башҡаларҙы яҡшы белгән беҙҙең балалар үрҙәрәк әйтелгән тирандар һәм шәхестәр хаҡында күпмегә мәғлүмәтле икән? Ә хаҡһыҙ рәүештә онотолған, йә тейешле дәрәжәлә тарихыбыҙҙа уҙ урынын алмаған шәхестәр хаҡында беҙ нимә беләбеҙ һуң? Әйтәйек, Башҡортостандың иң беренсе летчигы, беҙҙең аэроклубтарҙа 14 Советтар Союзы Геройы тәрбиәләгән (Муса Гәрәев тә шул иҫәптә), штурвал артында һәләкәткә дусар ителгән майор Ғәли Мөхәммәтйән улы Ишмырҙин хаҡында бөгөн халыҡ нимә белә һуң? Былары яңы тарих, ә төпкәрәк төшһәк...

Һүҙемде йомғаҡлап, шуны әйтер инем. Йома намаҙҙарында мәсеттәрҙә, ғәҙәттә, халыҡ күп була. Намаҙҙан һуң мәсеттән сыҡҡан ваҡытта аяҡ кейемемде кейәйем тигәндә күп тапҡырҙар таныш булмаған кешеләргә иҫкәртеүһеҙ тотонорға тура килгәне булды. Һиңә яуап итеп ярҙам ҡулы һуҙыла, уға рәхмәтеңде йылмайыу менән ҡайтараһың. Ул көтөлмәгәндә алған сауабынан һиңә лә яҡты йөҙ менән баш ҡаға. Берәү ҙә: "Миңә тотонма..." - тип, минең ипһеҙлегемә һуҡрана башламай. Башыбыҙҙы Рәсәй киңлектәренән юғарыраҡ күтәреп ҡараһаҡ, бындай мөнәсәбәттәр алға киткән күп илдәрҙә, мәсеттә түгел, йәмғиәттә лә шулай икән. Бар халыҡтарға ла тәбиғәттән кешегә игелек итеү, изгелек күрһәтеү, таҙалыҡ һәм гүзәллеккә ынтылыу сифаттары һалынған. Тик, ниңәлер, беҙ үҙебеҙ ошондай сифаттарыбыҙҙы баҫтырабыҙ. "Кеше ғүмере" тигән моңло музыкаға дөрөҫ гармониялар ҡуйғанда тормошобоҙҙоң матурлығы ла, мәғәнәһе лә, ҡәҙере лә бермә-бер артыр ине бит. Милләттәштәремде ошондай гармонияға өлгәшеүгә саҡырам.

**Илдар ҒҮМӘРОВ,**
**Башҡортостандың халыҡ артисы.**

*ЙЫЛ ВАҠИҒАҺЫ*

**Әлегә әҙерлек һәм кирегә иҫәп башланды. Баштарыбыҙҙы һанарға бер йылдан саҡ ҡына әҙерәк ваҡыт ҡалды. Рәсәй тарихында 12-се тапҡыр үткәреләсәк халыҡ иҫәбен алыу 2019-2020 йылдарҙа халыҡ һәм торлаҡ фонды иҫәбен алыуҙың Бөтә донъя программаһының бер өлөшө булып тора. БМО мәғлүмәттәре буйынса, ошо осорҙа был сара донъяның 80 илендә төрлө формала уҙасаҡ. Ә инде илебеҙҙең алыҫ ятҡан һәм барып етеүе ауыр булған төбәктәрендә иҫәп алыу 1 апрелдән 20 декабргә тиклем үткәреләсәк.**

# БАШЛАНДЫ!

Бынан алдағы иҫәп алыу 2010 йылда үтһә, унан һуңғы йылдарҙа илдә 40 миллион демографик хәл-ваҡиға (тыуым, үлем, никахтар һәм айырылышыуҙар, яңы йәшәү урынына күсенеү) була. Яңы иҫәп иһә, ошо барлыҡ үҙгәрештәрҙең масштабын баһаларға ярҙам итеү менән бер рәттән, Рәсәй йәмғиәте структураһы тураһындағы белемдең ҡиммәтле сығанағы буласаҡ.

Барлыҡ әҙерлек һәм төп сара тотош ил буйынса берҙәм план һәм методология буйынса үткәрелә. Шул уҡ ваҡытта һәр субъекттың үҙенең иҫәп алыуҙы үткәреүгә ҡағылышлы үҙенсәлеге бар. Башҡортостан демографик күрһәткестәр буйынса илдең иң ҙур төбәктәре иҫәбендә. Даими халыҡ һаны буйынса ул 7-се урында тора. Уның муниципаль-территориаль бүленеше лә тармаҡлы, ҡатмарлы. Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында иң күп муниципаль берәмеккә эйә (54); 8 ҡала округы бар, шул иҫәптән миллионлы бер ҡала округы; ауыл биләмәләре һаны буйынса икенсе урында тора (818 берәмек). Республиканың тағы бер үҙенсәлеге - күп милләтлелек һәм уларҙың төрлө дингә ҡарауы. Шуға күрә, халыҡҡа киң мәғлүмәт саралары аша аңлатыу эштәре 2010 йылда башҡорт, рус, татар, сыуаш, мари, удмурт һ.б. телдәрҙә алып барыла.

Халыҡты бөгөнгө тыныс булмаған заманда иҫәп алыусыны мутлашыусыларҙан нисек айырырға, тигән һорау ҙа борсойҙор, моғайын. Иҫәп алыусылар махсус кейемдә буласаҡ һәм уларға иҫәп алыу ваҡытына таныҡлыҡ биреләсәк. Таныҡлыҡта фото булмағанлыҡтан, ул паспорт күрһәткәндә генә ғәмәлдә тип иҫәпләнә. Шулай уҡ иҫәп алыусыны йортона индерергә теләмәүселәр өсөн махсус иҫәп алыу участкалары эшләйәсәк.

**Иҫәп алыуҙа ҡатнашыу - ирекле. Унан баш тартыу өсөн бер ниндәй яза ла, штраф та юҡ. Бөтөн мәғлүмәт яуап биреүсенең һүҙе нигеҙендә тултырыла. Шул уҡ ваҡытта кеше ниндәйҙер һорауға яуап биреүҙән баш тартырға ла хоҡуҡлы.**

Иҫәп алыуҙа өс төрлө бланк файҙаланыла: "Л" формаһы төп бланк булып тора һәм уға социаль-демографик характеристика (йәш, енес), гражданлыҡ, милләт, телдәр белеү һәм уларҙы ҡулланыу, йәшәү шарттары, миграция, белем, мәшғүллек һәм йәшәү сығанаҡтары тураһында 23 һорау индерелгән. Ул Рәсәй территорияһында даими йәшәгән һәр кешегә (бәләкәй балаларға ла) айырым тултырыла. "П" формаһы торлаҡ һәм санитар-гигиена шарттары тураһында мәғлүмәт йыйһа, "В" формаһы илдә ваҡытлыса булыусылар өсөн тултырыла.

Һорауҙарға күсер алдынан иҫәп алыусы 1 октябрҙә төнгө ун икелә йортта даими йәшәгән йәки ваҡытлыса булыусыларҙың барыһын да атауҙы һораясаҡ. Әммә иҫәп ҡағыҙына уларҙың номеры ғына индерелә. Исемлек кемделер ике тапҡыр иҫәпкә алмау йәки кемделер төшөрөп ҡалдырмау өсөн генә кәрәк.

Мәғлүмәттәрҙе анализлау һәм үҙгәрештәрҙе күҙәтеү өсөн элекке иҫәп алыу анкеталарындағы һорауҙарҙың күсеп йөрөүе лә мөһим. Шуға күрә традицион һорауҙар (енес, тыуыу датаһы, гражданлыҡ, туған тел, милләт һ.б.) үҙгәрмәй. Әммә заман менән бергә атлау өсөн заманса мәғлүмәткә ихтыяж яңылыҡтар индереүҙе лә талап итә. Мәҫәлән, халыҡтың мәшғүллеге тураһында тулы, ентекле картинаны күҙ алдына баҫтырыу һәм социаль-демографик сәйәсәтте камиллаштырыу өсөн йәшәү сығанаҡтары саралары тураһындағы һорауға "эш хаҡы", "эшҡыуарлыҡ килеме, үҙмәшғүллек", "шәхси ҡулланыу өсөн тауар етештереү" кеүек ярҙамсы аңлатмалар өҫтәлгән.

Мәшғүллек һәм эшһеҙлек буйынса ла һорауҙар блогы яңыртылған. Хеҙмәт миграцияһын өйрәнеү маҡсатында "Төп эш урынығыҙ ҡайҙа урынлашҡан?" тигән һорау аныҡлаштырылған. Бынан тыш, элек йәшәгән урын тураһында һорау индерелгән, ул һуңғы ваҡытта ғына түгел, һуңғы 10 йылдағы миграцияны иҫәпкә алырға ярҙам итәсәк.

**Иҫәп алыу ваҡытында рус теле йәки башҡа телдәрҙе белеүегеҙ менән генә ҡыҙыҡһынып ҡалмаясаҡтар, уларҙы көндәлек тормошта нисек ҡулланыуығыҙҙы ла асыҡлаясаҡтар.**

Ҡануниәткә индерелгән үҙгәрештәр арҡаһында мәғариф тураһындағы һорауҙар ҙа үҙгәрә. Мәҫәлән, "мәктәпкәсә белем биреү" графаһы өҫтәлгән, ә "урта һөнәри белем" графаһы ике подпунктҡа бүленгән - "квалификациялы хеҙмәткәр, хеҙмәткәр" һәм "урта звено белгесе".

Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың тәүге һөҙөмтәләре - 2020 йылдың декабрендә, яҡынса йомғаҡ - 2021 йылдың февралендә, аныҡ һөҙөмтә 2021-2022 йылдар дауамында билдәле буласаҡ.

**Башҡортостанстат**
**мәғлүмәттәренән.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала "Нефтекама" индустриаль паркы булдырыу тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Сәнәғәт йүнәлешендәге яңы индустриаль парк Нефтекамала йылдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһендә булдырыла. Майҙансыҡтың идара итеүсе компанияһы - Башҡортостандың Үҫеш корпорацияһы.

✓Александр Бутенко Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Республика Башлығы Радий Хәбиров 15 октябрҙә указға ҡул ҡуйҙы. Бынан алда Александр Бутенко Мәскәү өлкәһе Красногорск ҡалаһы хакимиәте башлығының халыҡ хәүефһеҙлеге буйынса урынбаҫары вазифаһын биләне.

✓ Рәсәйҙең Һанлы үҫеш, элемтә һәм киң коммуникациялар министры урынбаҫары Алексей Волин Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары, Рәсәйҙең төбәк телерадиокомпаниялары вәкилдәре менән осрашыуҙа Башҡортостандың һанлы тапшырыуға күсеүен, шулай уҡ ошо мәсьәләләрҙе тиҙ хәл итеү өсөн махсус ойошторолған урындағы "ҡыҙыу бәйләнеш"тең эшен юғары баһаланы.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин берҙәм тауыш биреү көнөндә һайланып ҡуйылған 19 төбәк башлығы менән осрашты. Осрашыуҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров та ҡатнашты. Владимир Путин төбәк башлыҡтарын вазифаға һайланыуҙары менән ҡотланы һәм халыҡҡа иғтибарлы булыуҙарын теләне.

✓Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Башҡортостандың 47 күп балалы ҡатын-ҡыҙына "Әсәлек даны" миҙалы һәм аҡсалата премия тапшырҙы. Уның билдәләүенсә, республикала 46 мең күп балалы ғаилә иҫәпләнә, уларҙа 160 мең самаһы бала тәрбиәләнә. Парламент спикеры тантанала ҡатнашыусыларға балалар тәрбиәләүҙәге еңел булмаған хеҙмәт өсөн рәхмәт белдерҙе.

✓11 октябрҙә Канада ваҡыты буйынса киске сәғәт 10-да (Өфөлә 12 октябрҙә иртәнге 7-лә) Ниагара шарлауығының Канада өлөшө Башҡортостандың дәүләт флагы - зәңгәр, аҡ һәм йәшел төҫтәргә инде. Байрам акцияһы барышында Канада күгендә салют яңғыраны, ә майҙансыҡта милли кейемдәге яҡташтарыбыҙ башҡортса йырланы һәм баянда халыҡ көйҙәрен уйнаны.

**✓ Эсте иң ныҡ бошорғаны - Конституциябыҙҙа республиканың иң юғары вазифаһын биләүсенең башҡорт дәүләт телендәге вазифа атамаһының хаталы яҙылған көйө бирелеүе.**



*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# "БАШЛЫГЫ" ҺҮҘЕ...

## ҡайҙан килеп сыҡҡан?

**Бер заман интернет селтәрҙәрендә блогерҙар Башлыгы ла Башлыгы, тип яҙып, шау-гөр килешеп, хәбәр сурыта башланы. Конституцияла шулай яҙылмыш икән. Ышанманым. Тәү мәлдә. Башҡорт тотоп-нитеп ҡарамаһа, ышанмай бит. Улай итеп булмаһа, уҡып та ышанырға була. Тап шулай иттем. Ышандым, Конституцияның конституцияһында шулай яҙылғас, нисек ышанмай ти ул. Миңә ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ. Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының 82-се статьяһында урыҫса тап ошолай яҙылған: "Наименование должности высшего должностного лица Республики Башкортостан на государственных языках Республики Башкортостан Глава Республики Башкортостан и Башкортостан Республикаһы Башлыгы равнозначны".**



Минең ни, тәүге һөнәрем башланғыс кластар уҡытыусыһы булғас, күҙҙәрем шундуҡ аҡрайып күренеп торған хаталарға абынды. Тегеләй ҙә уҡып ҡарайым, былай ҙа: нисә тапҡыр уҡыһаң да, хата барыбер хаталығын юғалтмай инде. Уҡытыусыбыҙ һөйләмдең эйәһе менән хәбәре булыуын 1-се класта уҡ аңлатҡайны, уларҙы бер-береһе менән гел килештереп яҙыу кәрәк. Рус теле бит ул ябай түгел, бөйөк тел, тип өйрәттеләр. Ә 82-се статьяла, ҡәһәрең, "Наименование ... равнозначны", тип яҙылған. Эйәһе - берлектә, хәбәре - күплектә. Үәт әй, шулай ҙа була икән. Әлбиттә, иң юғары пост биләгән кеше берәү генә була, ул биләгән вазифа ла - берҙән-бер генә, әммә был положениела һүҙ ошо вазифаның рус һәм башҡорт телдәрендәге атамалары хаҡында бара бит. Тимәк, "наименование" урынына "наименования" тип, күплектә яҙыу мотлаҡ ул. Сахаяҡуттар үҙҙәренең конституцияһында тап шулай яҙған да инде: күрәһең, яҡут депутаттары урыҫса беҙҙәкеләрҙән яҡшыраҡ белә.

Әйткәс, әйтәйем инде, эсемде тырнап торған тағы бер хата бар бында, уныһы тырнаҡтар тураһында. Атаҡ-атаҡ, тиерһегеҙ, ул тағы ниндәй тырнаҡтар һуң? Юҡ-юҡ, ҡул-аяҡтарҙағы тырнаҡтар түгел, ә һөйләмдә ҡулланыла торған махсус билдә-тырнаҡтар хаҡында һүҙем. Әлеге статьяла республикала иң юғары вазифа биләгән конкрет кеше тураһында түгел, ә уның ике дәүләт телендәге вазифа атамаларының ни рәүешле яҙылыуы (әйтелеүе) хаҡында һүҙ бара, һәм улар бер һөйләмдә бер-бер артлы атап кителә, шуға күрә ошо атамаларҙың тырнаҡ эсенә алыныуы фарыз.

Былары ғына бер нәмә, эсте иң ныҡ бошорғаны - Конституциябыҙҙа республиканың иң юғары вазифаһын биләүсенең башҡорт дәүләт телендәге вазифа атамаһының хаталы яҙылған көйө бирелеүе.

**"Башҡортостан" урынына "Башҡортостан", "Башлығы" урынына "Башлыгы" тип, татарсалап яҙып ҡуйылған. Ошо хаҡта уйланһаң, аптырамаған ерҙән аптырарлыҡ: әллә шул законды ҡарағанда башҡорт парламентында башҡортса белгән депутаттар булмағанмы ла, әллә инде улар йомшаҡ урындыҡтарында йоҡлап ултырып ҡалғанмы?**

Аптырағас-йөҙәгәс, тигәндәй, конституциябыҙҙың башҡортсаға тәржемәһенән ошо уҡ 82-се статьяны табып уҡыным. БР Конституция Судының сайтында бар был тәржемә. Унда бына нисек яҙылған: "Башҡортостан Республикаһының иң юғары вазифалы кешеһенең вазифа атамаһы Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрендә Башҡортостан Республикаһы Башлығы һәм Глава Республики Башкортостан тиң мәғәнәлә." Әлеге лә баяғы, башҡортса "вазифа атамаһы ... тиң мәғәнәле", тип яҙыу үҙе мәғәнәһеҙерәк яңғырай түгелме һуң? Нөсхәлә "Глава Республики Башкортостан" атамаһы уның башҡортса вариантынан алда бирелгән, тәржемәлә - киреһенсә. Ғөмүмән, һөйләм төҙөлөшө лә дөрөҫ түгел. Ярай әле, иң юғары вазифа биләүсенең башҡорт телендәге атамаһы был юлы дөрөҫ яҙылған.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, тәҡдимем шул: Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайына ошо хаталарҙы төҙәтеү фарыз. Минеңсә, БР Конституцияһының 82-се статьяһы рус һәм башҡорт телдәрендә бына нисек яҙылырға тейеш:

"Наименования должности высшего должностного лица Республики Башкортостан на государственных языках Республики Башкортостан "Глава Республики Башкортостан" и "Башҡортостан Республикаһы Башлығы" равнозначны".

"Башҡортостан Республикаһының иң юғары вазифалы кешеһенең Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрендәге вазифа атамалары "Глава Республики Башкортостан" һәм "Башҡортостан Республикаһы Башлығы" тиң мәғәнәле".

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЯҠШЫ АБРУЙ ҺАҠЛАЙЫҠ!

***Айгиз ҠУНАФИН, "Башҡортостан лидерҙары" финалисы, IT-белгес:*** Мәғариф өлкәһенә ҡағылған бик күп мәсьәләләр борсой. Бигерәк тә милләттәштәрҙең Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырып, юғары уҡыу йортона инеүҙе генә маҡсат итеп ҡуйып, туған телебеҙҙә уҡыуға битараф ҡалыуы әсендерә. Был мәсьәләне тиҙ арала ғына хәл итеп булмайҙыр, әммә балаларға туған телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы өйрәтеүҙән үҙ телеге менән баш тартмаһын ине милләттәштәр. Ә йәштәр, эш юҡ, тип зарланмаһындар, мәктәп йылдарында уҡ ваҡыттарын бушҡа уҙғармай, сит телдәрҙе өйрәнһендәр, белем алһындар. Киләсәктә ниндәй эште автоматлаштырып була - барыһы ла автоматлаштырыласаҡ, кешеләр урынына машиналар, роботтар эшләйәсәк. Шуға ла ошондай заман ҡуйған талаптарҙан артта ҡалмаҫ, йәмғиәткә файҙаһыҙ кеше булмаҫ өсөн һөнәр һайлағанда айырыуса иғтибарлы булырға кәрәк. Юғары белем алһам булды, тип, БДИ һөҙөмтәләре мөмкинлек биргән һөнәрҙе түгел, ә киләсәктә файҙалы булғандайын үҙләштереү мөһим. Сөнки, бөгөн ҡуәтләгәнсә, алған һөнәрең буйынса эш таба алмаһаң, "Макдоналдс"ҡа эшкә төшөү йә таксила эшләү кеүек "икенсе вариант" булмаясаҡ. Тиҙҙән былдай һөнәрҙәр юҡҡа сығасаҡ, робототехника һәм IT-технологиялар өлкәһендәге өр-яңы һөнәрҙәр барлыҡҡа киләсәк.

**Шулай ҙа аралашыуға ҡоролған һөнәрҙәр һәр ваҡыт беренсе урында буласаҡ, минеңсә. Мәҫәлән, психологтар, телселәр һәм башҡа гуманитарийҙар эшһеҙ ҡалмаясаҡ. Сөнки техника, интернет селтәрҙәре үҫешкән һайын кешеләр дуҫтар таба алмай, башҡалар менән аралаша белмәй аптырана, психик ауырыуҙар һаны арта. Ғөмүмән, һөнәр һайлағанда интернет селтәрендәге төрлө мәғлүмәттәрҙе уҡып, киләсәккә аныҡ маҡсат ҡуйып эшләргә кәңәш итәм.**

Шулай ҙа ниндәйҙер һөнәр алып, бөгөн эш урыны таба алмайһың икән, икенсе-өсөнсө һөнәр үҙләштереүҙән ҡурҡып, ҡаушап ҡалмау кәрәк. Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр. Инженер булып эшләй алмайһың икән, әлеге көндә күп ерҙә талап ителгән эшсе һөнәрҙәрен үҙләштереп, юғары оҫталыҡҡа ирешергә була. Совет осоронда иң ҙур эш хаҡы алып эшләгән инженерҙар илдәге үҙгәрештәрҙән һуң иң ярлы йәшәгән ҡатлам булып ҡалды бит. Шуға "Ни өсөн был һөнәр кешеһе кәрәкле, ә ни өсөн был оҫтаға аҡсаны аҙ түләйҙәр?" тигән һорауға ла яуап эҙләргә тырышыу файҙалы булыр.

Ғөмүмән, бөгөн балаларға ҡайҙа, ниндәй шарттарҙа йәшәгәндә лә тормошта үҙ урыныңды үҙ көсөң менән табырға өйрәтеү мөһимдер. Был йәһәттән бигерәк тә кеше араһында үҙен дөрөҫ тотоу, телмәр оҫталығын үҫтереү, кәрәк урында үҙеңде яҡшы яҡтан күрһәтә белергә өйрәтеү кәрәк. "Кейемде яңылай, намыҫыңды йәшләй һаҡла", тигәндә гел хәтерҙә тотоу шарт. Ни тиһәң дә, бөгөн беҙ уйламайынса эшләгән бәләкәй генә шуҡлыҡ, дыуамал аҙым киләсәгебеҙ өсөн кәртә булып тороуы бар. Милләттәштәр бигерәк тә бына ошо хаҡта уйланһын һәм балалар, йәштәр тәрбиәһенә иғтибар итеп, яҡшы абруй һаҡлап йәшәһендәр ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандан алты проект "Йыл маршруты" Бөтә Рәсәй туристик премияһы финалсыһы булды: "Башҡортостандың солоҡ умарталығына бер көнлөк тур", "Геолог менән ял көндәре. Янғантау геопаркы","Европа - Азия велоһуҡмағы" проекттары, "Нарыҫтау" тарихи-этнографик һәм гастрономик маршруты, "Евразия индеецтары һуҡмағы буйлап" мажаралар туры һәм "Башҡортостандың ете мөғжизәһе". Финалсыларҙы бүләкләү сараһы 27-28 октябрҙә Ижевскиҙа ойошторола.

✓Башҡортостан ғалимдарының ҡош тиҙәгенән органик ашламалар етештереү тураһындағы китабы "Алтын көҙ-2019" агросәнәғәт күргәҙмәһенең бронза миҙалын алды. Китап "Инком-Союз" компанияһының һәм Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтының берлектәге проекты булып тора. Технология Благовар районы хужалыҡтарында уңышлы һыналған.

✓Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының VIII отчет-һайлау съезы уҙҙы. Уның эшендә республиканың барлыҡ райондарынан һәм ҡалаларынан 152 вәкил ҡатнашты. Көн тәртибендә төп мәсьәлә Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесен һайлау ине. Съезд күпселек тауыш менән мөфтөй вазифаһына Айнур Биргәлинды һайланы. Съезд эшендә Рәсәй Федерацияһы мосолмандары Диниә назараты рәйесе, мөфтөй-шәйех Рәүил Гәйнетдин ҡатнашты.

✓Республика хөкүмәте ҡарары менән Башҡортостандың шәхси мәктәпкәсә ойошмаларында урын алыу өсөн сертификаттар биреү тәртибе раҫланды. Тәртипте һынау Стәрлетамаҡта башланды. Уның буйынса шәхси балалар баҡсаларына республика һәм урындағы бюджеттарҙан һәр балаға ай һайын 6 мең һум бүленә. Проект уңышлы ғәмәлгә ашырылған осраҡта, 2020 йылдың 1 сентябренән шәхси балалар баҡсаларына сертификаттар тапшырыу тәжрибәһе Башҡортостандың бөтә ҡалаларына һәм райондарына таратыла.

✓Журналистика өлкәһендәге иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияның быйылғы лауреаттарының исемдәре билдәле булды. Улар: "Башҡортостан" гәзите журналисы Лариса Абдуллина, Башҡортостан юлдаш телеканалының мәғлүмәт хеҙмәте хәбәрсеһе Рафиҡ Әхмәтшин, "Кызыл тан" гәзите редакцияһы журналисы Фәнүз Хәбибуллин һәм "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының махсус хәбәрсеһе Азат Ғиззәтуллин.

ҠАЛА СОВЕТЫНДА

**Өфө ҡалаһы ни өсөн матур, тип һораһаң, күптәр, моғайын, йыр һүҙҙәре менән яуап бирер. Әммә матурлыҡ төрлөсә була. Юҡҡа ғына күҙгә күренгән тышҡы һәм бик күптәр күрмәгән эске матурлыҡты билдәләмәйҙәр. Ҡалалар ҙа, кешеләр кеүек үк, эске һәм тышҡы матурлыҡ сифаттарына эйә.**

# ӨФӨ ҠАЛАҺЫ...

## данлыҡлы ла!

Мәҫәлән, республикабыҙҙың баш ҡалаһы булған Өфө Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Көньяҡ Уралдың иң ҙур индустриаль үҙәктәренең беренһенә әүерелә. Бында дошман ҡулы аҫтында ҡалған территорияларҙан 40 сәнәғәт предприятиеһы эвакуацияланa. Улар барыһы ла бында килеп урынлашҡас, фронт өсөн эшләй башлай. Нефть эшкәртеү заводтары хәрби техника өсөн яғыулыҡ сығара, еңел сәнәғәт предприятиелары яугирҙар өсөн кейем-һалым тегә, авиация сәнәғәте фанера етештерә, поход кухнялары, патрондар һала торған сумкалар... Һанай китһәң - осона сығырлыҡ түгел. Өфө паровоздар ремонтлау заводы локомотивтарҙы хеҙмәтләндереүгә һәм боеприпас эшләүгә күсә. "Өфө", "Салауат Юлаев", "Александр Невский", "Полководец Суворов" бронепоездары тап Өфөлә төҙөлә лә инде. Һәр өсөнсө хәрби самолетҡа бында эшләнгән двигатель ҡуйыла. Өфө нефть эшкәртеү заводы фронтҡа 1 миллион тоннанан ашыу яғыулыҡ һәм башҡа кәрәкле продукция оҙата.

"Барыһы ла фронт өсөн, барыһы ла Еңеү өсөн!" тигән лозунгыны тормошҡа ашырып, күптәр үҙҙәренең туплаған ыҡсым болон армия ихтыяжына ебәрә. Халыҡтан йыйылған аҡсаға "Башҡорт истребителе", "Башҡортостан нефтсеһе" самолеттары, "Башҡортостан элемтәсеһе", "Башҡортостан пионеры" танк колонналары төҙөлә һәм яуға оҙатыла.

Матур өлгөләрме? Был хаҡта тағы бер тапҡыр хәтергә төшөрҙө ҡала Советының сираттағы ултырышында ҡала Советы башлығы Валерий Трофимов. Һәм һис ерлекһеҙ түгел: тап ошо сарала депутаттар Өфөгә "Хеҙмәт ҡаһарманлығы һәм дан ҡалаһы" исемен биреү инициативаһын хупланы. Бындай инициатива менән Өфө ҡалаһының Һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары советы, Башҡортостан Республикаһының Профсоюздар федерацияһы сығыш яһай. Өфөнөң Йәмәғәт палатаһы һәм махсус ойошторолған эш төркөмө граждандарҙың фекерен өйрәнә. Башҡарылған эштәрҙән һуң положениеға ярашлы тейешле юллама эшләнә һәм ул тиҙҙән маҡтаулы исем биреү буйынса халыҡ-ара ойоштороу комитетына ебәреләсәк.

"Хеҙмәт ҡаһарманлығы һам дан ҡалаһы" исеме халҡы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фашизмға ҡаршы көрәштә хеҙмәт ҡаһарманлығы һәм батырлығы күрһәткән ҡалаларға бирелә. Әлеге ваҡытта был исемде Рәсәйҙәң 24, шул иҫәптән Ишембай ҡалаһы йөрөтә.

Земфира ХӘБИРОВА.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӘРТИП БУЛДЫРЫУ ЙЫЛЫ

**Илдә лә, Башҡортостанда ла ниндәйҙер өлкә, тармаҡҡа иғтибар йүнәлтеү маҡсаты менән һәр яңы тыуған йыл атама-тема менән нарыҡлана. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо арала 2020 йыл өсөн тема тәҡдим итте.**

"Семинар барышында муниципалитет башлыҡтары менән кәңәшләшкәндән һуң йылды ниндәйҙер абстракциялар менән атамаҫҡа, ә уны халыҡтың мәнфәғәттәренә яуап биргән аныҡ, анлайышлы эштәргә арнарға, тигән фекергә килдек. Граждандарҙы борсоған мәрәжәғәттәрҙе тикшерҙек. Тирә-яҡты төҙөкләндереү, ҡалаларҙа, ауылдарҙа уңайлы мөхит булдырыу бик мөһим бөгөн. Шуға күрә "Тораҡ пункттар эстетикаһы йылы" тип атарға тигән тәҡдим бар. Тышҡы күренеш ҙур әһәмиәткә эйә, был тәртип булған ерҙә йәшәүебеҙгә ышаныс тыуҙыра", - тине республика Башлыһы һәм Хөкүмәткә указ һәм йөкләмә әҙерләргә ҡушты, унда аныҡ параметрҙар һәм һандар булырға тейешлеген билдәләне. "Ошо йылдан халыҡтан әүҙемерәк башланғыстар көтәм. Әүҙем кире бәйләнеш күҙәтелгән муниципалитеттарға финанслауҙы арттырабыҙ. Иң мөһиме, "Йәшел Башҡортостан" акцияһындағы кеүек үк, халыҡтың инициативаһы кәрәк", - тип иҫкә төшөрҙө Радий Хәбиров.

# АТАЙ-ӘСӘЙ ЯУАПЛЫ

**Рәсәйҙә балиғ булмаған балалары тәмәке тартҡан өсөн ата-әсәләргә штраф һала башлауҙары ихтимал. Хөкүмәттә шундай закон әҙерләйҙәр. Ул тәмәке тартҡан үсмерҙәрҙең ата-әсәләренән тыш, башҡа законлы вәкилдәренә лә ҡағыла.**

Әлеге тәҡдимде Эске эштәр министрлығы индергән. Рәсәй Федерацияһының Эске эштәр министрлығы сайтында хоҡуҡ боҙоуҙарҙы иҫкәртеү буйынса хөкүмәт комиссияһы ултырышы протоколы материалдары ошо хаҡта һөйләй, тип хәбәр итә РИА Новости. Тәмәке тартҡан балаларҙың ата-әсәләренә ниндәй штраф һалыныуы мөмкин икәне аныҡланмаған. Бынан алда 1 октябрҙән Рәсәйҙә янғын хәүефһеҙлегенең яңы ҡағиҙәләре ғәмәлгә индерелеүе хәбәр ителгәйне. Уларға ярашлы, хәҙер балкондарҙа һәм лоджияларҙа, ятаҡтар һәм ҡунаҡханалар бүлмәләрендә асыҡ ут ҡулланыу тыйыла. Закон боҙоусыларға иҫкәртеү йәки өс мең һумға тиклем штраф янай. Ҡағиҙәләрҙе боҙоу арҡаһында янғын сыҡһа, биш мең һумғаса штраф һалыныуы мөмкин.

# КҮП БАЛАЛЫЛАРҒА...

**Башҡортостанда 600 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата түләү алырға хоҡуҡлы күп балалы ғаиләләр исемлеге киңәйтелә. Дәүләт Йыйылышы депутаттары киләһе пленар ултырышта "Башҡортостанда күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында"ғы республика законына төҙәтмәләр ҡабул итә.**

"Әлеге ваҡытта һигеҙ һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ғаиләләрҙең ошондай дәүләт ярҙамына хоҡуғы бар. Беҙ ошо түләүҙе алыу хоҡуғын 23 йәшкәсә һигеҙ һәм унан күберәк балаһы булған ғаиләләргә лә таратырға тәҡдим итәбеҙ. Йәштәр, ҡағиҙә буларaҡ, мәктәптә тамамлағандан һуң юғары уҡыу йорттарында, колледждарҙа уҡый һәм ата-әсәһе ҡарамағында ҡала. Күптәре тап 23 йәшкә һөнәр үҙләштереп, үҙҙәрен тәьмин итә башлай. Шуға күрә ишле, шул иҫәптән 18-ҙән 23 йәшкәсә "балалар" тәрбиәләгән ғаиләләр ҙә социаль ярҙамға мохтаж", - тип белдерҙе республика парламенты спикеры. Уның һүҙҙәренсә, күп балалы ғаиләләргә ярҙам суммаһы даими индексациялана, тәүҙә туғыҙ һәм унан күберәк балаһы булған ғаиләләргә ярҙам күрһәтелә. "Уҙған йылдың көҙөндә депутаттар аҡса алырға хоҡуҡлы күп балалы ғаиләләр категорияһын киңәйтеп, законға үҙгәрештәр индерҙе - балалар һанына талап туғыҙҙан һигеҙгә тиклем кәметелде. Хәҙер беҙ сираттағы бер тапҡыр ярҙам алыусылар даирәһен киңәйтергә тәҡдим итәбеҙ", - тине Константин Толкачев.

# ИҢ МАТУР АУЫЛ...

**Башҡортостанда "Башҡортостан Республикаһының иң матур ауылы" конкурсы тамамланды. Конкурс еңеүселәре, призерҙары һәм номинанттары Башҡортостан юлдаш телеканалының тура эфирында иғлан ителде.**



"Башҡортостан Республикаһының иң матур ауылы" конкурсы икенсе йыл рәттән үткәрелеп килә. Уның ойоштороусылары - "Башҡортостан" ДТРК ДУП һәм "Башҡортостан Республикаһының муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы. Конкурс республиканың тораҡ пункттарында урындағы үҙидараны үҫтереү, халыҡтың үҙ биләмәләрендә урындағы әһәмиәткә эйә мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә ҡатнашыуын әүҙемләштереү, ауыл ерендә йәшәү шарттарын яҡшыртыу һәм уның абруйын күтәреү, тыуған илгә, ауылға һөйөү тәрбиәләү, ауылда йәшәү рәүешен популярлаштырыу маҡсатында уҙғарыла.

Быйыл конкурс өс этапта үткәрелде. Конкурстың өсөнсө этабында иң юғары баһа алған еңеүселәр билдәләнде. Бүләк фонды - 1 миллион һум. Беренсе урын өсөн - 500 мең һум, икенсегә - 300 мең, өсөнсөгә - 200 мең һум. Шулай итеп, Учалы районының Наурыҙ ауылы - 1-се урынға, Ишембай районының Маҡар ауылы - 2-се урынға, Шаран районының Дүртөйлө ауылы 3-сө урынға лайыҡ булды. Бынан тыш, Күгәрсен районының Тәүәкән, Стәрлетамаҡ районының Талаҫ, Стәрлебаш районының Ямғырсы, Салауат районының Әлкә, Ҡариҙел районының Яугилде, Өфө районының Лекаревка, Аҫҡын районының Ҡышлауйылға, Бөрйән районының Ғәҙелгәрәй, Ейәнсура районының Байдәүләт, Саҡмағош районының Иҫке Бәшир, Янауыл районының Киҫәкҡайын, Мишкә районының Сосновка ауылдары ла конкурс дипломдары һәм аҡсалата приз менән бүләкләнде.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Инвестор - "Нефтепродуктсервис" компанияһы Өфөлә яһалма япмалы ябыҡ футбол манеждары төҙөргә ниәтләй. Проектты 2020-2021 йылдарҙа бойомға ашырыу күҙаллана. Ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин, дөйөм алғанда, ошо проектты хупланы һәм футбол манеждарының беренһен мотлаҡ Шаҡша биҫтәһендә төҙөү кәрәклеген билдәләне.

✓Өфө ҡала Советының 46-сы ултырышында депутаттар баш ҡаланың яңы урам исемдәре тураһында ҡарар ҡабул итте. Әйтәйек, Совет районында яңы урамдарҙың беренһе башҡорт яҙыусыһы Ғәли Ибраһимовтың исеме менән аталасаҡ. Октябрь районының Нуғай ауылында Изгелекле, Европа, Славян, Һырғанаҡ, Почетлы, Умарталыҡ һәм башҡа урамдар барлыҡҡа киләсәк. Киров районында Кузнецов затоны биҫтәһендәге урам Симферополь тип аталасаҡ. Калинин районының Максимовка биҫтәһендә Йондоҙло ямғыр тигән урам буласаҡ.

✓"Өфө - мегаполистарҙың донъяуи киңлегендә" - рус һәм инглиз телдәрендә баҫылып сыҡҡан яңы йыйынтыҡ шулай тип атала ("Ufa Amidst World's Cosmopolitan Centers"). "Китап ҡаланың һәм республиканың ыңғай имиджын формалаштырыуға, инвестиция йәлеп итеүҙе арттырыуға, тышҡы иҡтисади һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе үҫтереүгә йүгонто яһар", - тип иҫәпләйҙәр "Башҡорт матбуғаты" нәшриәтендә.

✓Билдәле башҡорт яҙыусыһы Гүзәл Ситдиҡова Сербияла Үҙәк һәм Көнсығыш Европа Викимедиаһы ирекмәндәренен халыҡ-ара конференцияһында ҡатнашып ҡайтты. Башҡортостан вәкилдәренең сығыштарына лингвист, башҡорт телен өйрәнеү методикаһы авторы Вячеслав Чернев аңлатма бирҙе.

✓Өфөнән спортсы-паралимпиясы һаулыҡ мөмкинлектәре сикле кешеләр араһында XVII "Сочи-2019" халыҡ-ара спорт фестивалендә шахматта еңеү яуланы. "Толпар" клубы вәкиле Әмир Ғәзиев, туғыҙ партияның туғыҙын еңеп, фестивалдең абсолют еңеүсеһе исемен алды. Шашкала Әмир "бронза" призеры булды.

✓Башҡортостанда синоптиктар көндәрҙең һалҡынайтыуын фаразлай. 19 октябрҙә төндә ямғыр, урыны менән ҡар ҡатыш, көндөҙ айырым райондарҙа ямғыр. Төндә һәм иртән юлдарҙың айырым участкаларында боҙлауыҡ. Ел төньяҡ-көнсығыштан, көнсығыштан талғын. Һауа температураһы төндә -8-гә тиклем, көндөҙ +1,+6 градус.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

✓ *Беҙ саҡ ҡына уңайһыҙлыҡ тыуһа, шунда уҡ ғәйепләне эҙләй башлайбыҙ, шау-шыу ҡуптарабыҙ, ә мәсьәлә үҙебеҙгә килеп терәлһә - өнөбөҙ сыҡмай. Техника хужалары беҙҙең ихаталарыбыҙға машинаһын ултыртып ҡалдырмағандыр бит.*

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Донъя - ҡуласа, тип юҡҡа әйтмәйҙәр инде. Ул бер түңәрәк буйынса әйләнеп тик йөрөй. Шуға ла ҡала округы хакимиәтенең оператив кәңәшмәһендә ҡаралған мәсьәләләр темаһы бик йыш ҡабатланып тора. Был аҙнала үткән сарала ла Өфө халҡын транспорт менән хеҙмәтләндереү проблемаһы күтәрелде. Был тармаҡтағы хәл-торош менән Транспорт һәм бәйләнеш идаралығы начальнигы Илдар Юланов таныштырҙы.**

# АҠЫЛЛЫ ҠАЛА, АҠЫЛЛЫ ЮЛДАР...

Уның сығышынан мәғлүм булыуынса, ҡала хакимиәте 2019-2023 йылдарға даими муниципаль маршруттарҙы планлаштырыу буйынса транспорт хеҙмәтләндереүе моделен оптималләштереүҙе күҙаллаған документ раҫлаған. Уға ярашлы, яңы 9 маршрут асыласаҡ; башҡа маршруттарҙы ҡабатлаған 29 маршрут ябыласаҡ; 29 маршруттың хәрәкәт схемаһы үҙгәрәсәк; 31 маршрут буйынса көйләнелмәгән тариф көйләнелгәнгә үҙгәртеләсәк; ҙур автобустар һаны артыу иҫәбенә дөйөм транспорт һаны кәмейәсәк; автомобиль транспорты паркы яңыртыласаҡ; ҡулаҡсаһыҙ түләү формаһы индереләсәк.

Бөгөн баш ҡала халҡына 126 маршрутта 12 предприятие һәм шәхси эшҡыуар транспорт хеҙмәте күрһәтә. Дәүләт ташыусыһы урта һәм ҙур класлы 63 автобус алған, йыл һуңына тиклем тағы ла 96 ҙур автобус килеүе көтөлә. Дәүләткә ҡарамаған ташыусылар урта класлы 63 автобус алған һәм йыл һуңына тиклем бәләкәй класлы 240 автобусты урта класлыһына алыштырыу планлаштырыла.

1 июлдән республика территорияһында БР Хөкүмәте ҡарары менән "Алға" берҙәм транспорт картаһы индерелгәйне. 1 октябрҙән карта менән иҫәпләшеүселәр бер сәғәт эсендә "Башавтотранс" ДУП-ы автобустарының береһенән икенсеһенә, муниципаль электр транспортына, Дим-Шаҡша станцияһы араһында йөрөгән ҡала яны поезында бер билет менән йөрөй ала.

Шулай уҡ муниципаль маршруттар буйынса туҡталыштар исемлеге лә алып барыла һәм ул хакимиәттең рәсми сайтында урынлаштырылған. Бөгөнгә ҡалала барлығы 1215 туҡталыш бар. Ҡала транспорты хәрәкәтен аныҡ ваҡытта электрон карта аша күҙәтергә, ниндәй транспорттың ҡасан килеү ваҡытын белергә була. Электрон карта "Яндекс. Транспорт", "CityBus" ҡушымталарына индерелгән. Был система шулай уҡ "Аҡыллы туҡталыштар"ға ла ҡуйыласаҡ. Ҡалала барлығы 106 шундай туҡталыш ҡуйыу планлаштырылһа, әле 41-е ҡуйылған да инде.

Көн тәртибенең икенсе төп темаһы булып урамдарҙы яҡтыртыу һәм светофорҙарҙы модернизациялау мәсьәләһе торҙо. Хәҙер инде көндәрҙең ҡыҫҡарыуы ла ныҡлап һиҙелә - ҡараңғы төшкәс кенә ҡайтып инәһең. Төрлө түңәрәктәргә йөрөгән йәки икенсе сменала уҡыған балалар өсөн дә хәүефле ул урамдарҙа яҡтылыҡ булмауы. Ярай ҙа урамда уттар янһа... Хакимиәттең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов үҙенең сығышында яҡтыртыуҙы яҡшыртыу буйынса үткәрелгән саралар һөҙөмтәһендә 102 мәктәп, 230 балалар баҡсаһы һәм уларға илткән юлдарҙа эштәр башҡарылғанын белдерҙе. Билдәләнеүенсә, бөгөнгә барлыҡ мәктәптәр һәм балалар баҡсалары территорияһы тулыһынса яҡтыртыла.

Баш ҡалала яңы 5 светофор ҡуйылған, "Светофор объекттарын модернизациялау" программаһын тормошҡа ашырыу барышында 46 транспорт светофоры, 18 - йәйәүлеләр өсөн, йәйәүлеләрҙе оҙатыуҙың 18 тауышлы ҡоролмаһы, 4 юл контроллеры ҡуйылған. Ә инде иң үҙенсәлекле яңылыҡ - 2 октябрҙән светофорҙың төп сигналын ҡабатлаған тәжрибә һыҙаттары ҡуйыла башлаған. Был сара юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген күтәреүгә һәм водителдәрҙе светофорҙың ниндәй төҫө яныуын алдан иҫкәртеүгә йүнәлтелә. Әле светодиод һыҙаты Өфө-Аэропорт юлындағы "Металлобаза" туҡталышы эргәһенә ҡуйылған. Быйыл тағы ла шундай 6 объектты сафҡа индереү планлаштырыла.

Ирекһеҙҙән, ялҡаулыҡ - прогресс двигателе, тигән хәҡиҡәт иҫкә төшә. Артыҡ хәрәкәтләнмәҫ, башын артыҡ көсәндермәҫ өсөн кеше үҙенә ниндәй генә заманса техника уйлап сығармай. Хәҙер инде юлда ла аҡыллы һыҙаттар барлыҡҡа килһә, халыҡ бөтөнләй иғтибарһыҙға, ялҡауға әйләнмәҫме? Аҡыллы ҡала, аҡыллы юлдар... Ҡасан кешеләр үҙҙәре аҡылға ултырыр икән...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# ЗАКОН ЯҠЛАЙ,
## үҙебеҙ ҙә яҡлайыҡ!

**Баш ҡала округы хакимиәтендә Өфө ҡала башҡорттары ҡоролтайының мәғариф буйынса комиссияһы ултырышы уҙғарылды.**

Киңәйтелгән ултырыш "Мәғариф сәғәте" тип аталды һәм ҡала башҡорт мәктәптәренең законға ярашлы юридик статусы хаҡында фекер алышыуға арналды. Баш ҡалабыҙҙың милли мәғарифы өсөн мөһим булған мәғлүмәт һәм кәңәш ҡоронда БР Мәғариф министрлығының яңы ойошторолған Милли мәғариф идаралығы начальнигы Булат Зинуров, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы депутаты Зәки Әлибаев, Бөтөн донъя башҡорттары, Өфө башҡорттары ҡоролтайҙары башҡарма комитеттары ағзалары, мәғариф идаралыҡтарының туған телдәр буйынса методистары, республикабыҙҙың һәм баш ҡалабыҙҙың ата-әсәләр комитеттары ағзалары, башҡорт гимназиялары һәм лицейҙары директорҙары ҡатнашты.

Баш ҡалалағы милли белем биреү ойошмалары эшмәкәрлегенең юридик яҡтан нигеҙле һәм яҡлаулы булыуы, уларға мәктәп йәшендәге балаларҙы ҡабул итеү һәм башҡорт телендә уҡытыуҙың баш ҡала башҡорттарының мәғариф өлкәһенә ҡараған конституцион хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашырыу маҡсатында башҡарылыуы фекер алышыу барышында һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Шулай уҡ баш ҡала мөхитендә яңы башҡорт мәктәптәрен һәм балалар баҡсаларын, башҡорт класталарын һәм төркөмдәрен асыу буйынса тәҡдимдәр тикшерелде. Ултырыш һөҙөмтәләре буйынса резолюция ҡабул ителде, ул тейешле власть даирәләре ҡарамағына ебәреләсәк.

*БАШ ҠАЛАМ*



# ТАШЛАНДЫҠМЫ?

**Санаңды йәй әҙерлә, тигәндәй, көҙ етһә, ҡышты уйлап тағы ла баш вата башлайһың. Юҡ, ҡар яуыуҙан зарланғандан түгел, ямғыры ла, ҡары ла кәрәк. Халыҡ үҙе аптырата бит.**

Бына нисәмә йыл инде йорт ихаталарын алдан иғлан итеп, график буйынса комплекслы таҙартыуҙарына ҡарамаҫтан, йыл һайын берәй әтнәкәһе сыға ла тора. Бигерәк тә халыҡ телендә "умырзаялар" тип йөрөтөлгән автотранспорт аптырата. "Умырзаялар" - нисәмә йылдар инде ихаталарҙа урын биләп ултыра, ҡышын улар тулыһынса ҡарға күмелеп ҡала, яҙ етһә, яйлап ҡына ҡарҙан асылып, күренә башлай. Әммә тап улар ихаталарҙы комплекслы таҙартыуға ныҡ ҡамасаулай ҙа инде. Эйе, беҙ саҡ ҡына уңайһыҙлыҡ тыуһа, шунда уҡ ғәйепләне эҙләй башлайбыҙ, шау-шыу ҡуптарабыҙ, ә мәсьәлә үҙебеҙгә килеп терәлһә - өнөбөҙ сыҡмай. Ошо техника хужалары ла әллә ҡайҙан килеп, беҙҙең ихаталарыбыҙға машинаһын ултыртып ҡалдырмағандыр бит. Улар, моғайын, йә ошонда йәшәүселәрҙең иҫке машинаһы, йә булмаһа, кемдеңдер туғаныныҡы. Бәлки, ҡайһы берҙәрен күптән металл һынығы итеп тапшырырға ла ваҡыттыр, әммә Плюшкин кеүек, бөтә иҫке нәмәне йыйыу ҡанға һеңгәнгәме, уныһын да сереп бөткәнсе һаҡлай ҡайһылар. Әммә ҡыш етеп, ҡар яуып, ихаталарҙы тағы ла комплекслы таҙарта башлаһалар, ошо "умырзаялар" арҡаһында эштең еренә еткерелеп эшләнмәүенә үҙебеҙ үк ризаһыҙлыҡ белдерә башлаясаҡбыҙ. Хатта ул техниканы суд ҡарары булмайынса, икенсе ергә күсерергә лә ярамай имеш, тиҙәр.

Әйткәндәй, сентябрҙән башлап баш ҡалала махсус ойошторолған комиссия йорт ихаталарында ташландыҡ, хужаһыҙ, тулы комплектта булмаған транспорт сараларын тикшерә. Рейд барышында мотлаҡ уларҙы фотоға төшөрә һәм автомобилдә 10 көн эсендә хужаһы үҙе һаҡлау урынына алып барырға тейешлеге тураһында иҫкәрмә ҡалдыра. Ошо ваҡыт эсендә хужа тарафынан бер ниндәй ҙә сара күрелмәһә, Өфө ҡала хакимиәтенең рәсми сайтында тағы бер тапҡыр мәғлүмәт ҡуйыла һәм техниканы мәжбүри күсереү тураһында иҫкәртелә. 15 көн дауамында бер ниндәй ғәмәл ҡылынмаһа, комиссия ҡабаттан тикшереү үткәрә һәм ҡала хакимиәте транспорт սараһын мәжбүри күсереү тураһында ҡарар сығара. Был мәғлүмәт хакимиәттең рәсми сайтына ҡуйыла, "Вечерняя Уфа" гәзитендә баҫыла. Һуңынан транспорт сараһы махсус һаҡлау урынына алып барыла. Дим, Октябрь, Совет райондарында шундай тикшереүҙәр үткәрелгән дә инде. Һөҙөмтәлә 116 транспортҡа иҫкәртеүсе мәғлүмәт ҡалдырылған. Талаптар үтәлмәгәндә ҡала хеҙмәттәре техниканы махсус һаҡлау урынына алып барасаҡ, ә инде һаҡлау өсөн милек хужаһынан уны килеп алғанға тиклем, ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы, хаҡ алынасаҡ.

Әгәр рәсми сайттағы исемлектә үҙегеҙҙең транспорт сараһын күрһәгеҙ, Өфө ҡалаһы, Ибраһимов бульвары, 84, 308-се бүлмәгә мөрәжәғәт итә, йәки 273-12-62 телефоны буйынса шылтыратып, белешә алаһығыҙ.

**Камил РӘХМӘТОВ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Яурын һәм башҡаурын һыҙлаһа

❖ Шырпы тубырсыҡтарын ҡайнар һыуҙа бешекләргә (файҙаһы күберәк була), һыҙлаған урынды майлы крем менән майларға һәм бешекләнгән тубырсыҡтар менән массаж яһарға, бөтә тәнең буйлап йөрөтөү нәтижәлерәк.

## Сөйәлдәр яфалаһа

❖ Бер бәләкәйерәк һауытҡа тәүҙә һуған ҡабығы, унын өҫтөнә спирт йә араҡы ҡойорға, ҡапҡасын ябып, 10 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. Әлеге төнәтмәне аҙна дауамында сөйәлдәргә һөртөгөҙ. Сөйәлде бөтөрөү юлын өләсәйем Ғилмивафа Ризван ҡыҙы ла өйрәтә ине. Аяҙ төндә тулы айға ҡулдарҙы күтәртә лә: "Ай, бына минең тәтәйем, ҡайҙа һинең тәтәйең? Булмаһа, тотошлай ал минекен!" - тип ҡысҡырта ине. Аяҡта булһа, аяҡты яланғас көйө күрһәтә инек. Был халыҡ дауаһы ауылда киң таралғайны, оҡшай ине.

## Аяҡ табаны тупаҫланһа (йә ярыла, йә ҡалыная һ.б.)

❖ 2 литр ҡайнар һыуға 1 балғалаҡ сода, 1 балғалаҡ иҙелгән кер һабыны һалырға һәм көн һайын аяҡтарҙы шул һыуға 20-30 минут тығып ултырырға. Аҙаҡ аяҡ табандарына майлы крем һөртөргә.

## Тире ауырыуҙары булһа

❖ Тәнгә һыулы бетсәләр сыҡһа, мейестә 3 әстерхан сәтләүеген ҡараһыуҙан төҫкә ингәнсе бешерергә, ҡабығын әрсергә, сәтләүекте яҡшылап иҙергә, 1 балғалаҡ балыҡ майы ҡушып болғатырға һәм бетсәле урынға көнөнә бер нисә тапҡыр һөртөргә.

## Күкрәк шешһә йә ауырыһа

❖ Ҡоро табаға 3 ҡалаҡ тары һалып, болғата-болғата ҡыҙҙырырға. Ҡыҙғас, 150 миллилитр яңы ҡайнап сыҡҡан һыу өҫтәп, һыу парға әйләнгәнсе бешерергә. Шул бутҡаны тигеҙ итеп дүрткә бүлергә һәм көн буйына ашарға. 10 көн дауаланырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

3

# Туған телем!

19-25 октябрь (ҡарасай)

2019 йыл

№42 (876)

БАЛАЛАР ДОНЪЯҺЫ

**Уҡытыусы төрлө уйҙарға сумып, мәктәптән ҡайтып бара. Ул балаларға башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән белем бирә. Тик бына башҡорт теле дәрестәре йылдан-йыл ҡыҫҡартыла, башҡорт ауылдарында ла тик урыҫса ғына һөйләшкән, аралашҡан балалар күбәйә. Был хәлдең сәбәбе ниҙә? Беҙ, өлкәндәр, илебеҙҙең, телебеҙҙең киләсәгенә алһыу күҙлек аша ҡарамайбыҙмы икән? Өлкәндәр күп осраҡта тураһын әйтергә ҡыйынһына, барыһын да шымартып һөйләргә тырыша. Уйланған уйҙарына яуап табыр өсөн Уҡытыусы уҡыусы балаларынан инша яҙҙырырға булды.**

## ТЕЛДЕ ҺАҠЛАУ - КӨНДӘЛЕК ЭШ

"Башҡорт теленең киләсәге бармы? Республика етәксеһе булһам, башҡорт телен һаҡлар өсөн ниҙәр эшләр инем?" тигән тема алды ул. Нисек кенә булмаһын, балалар күңеле, уйы таҙа, нимә уйлайҙар, шуны яҙасаҡтарына ышана Уҡытыусы.

Ул балаларҙың инша яҙғанын һиҙҙермәй генә күҙәтте. Кемелер елкәһен тырнап уйлай, кемдер ручка кимерә, уйланалар, бер-береһенә ҡарап алалар, үҙ-ара бәхәсләшеп тә китәләр, әйтерһең дә, етди хөкүмәт ҡарары сығаралар. Уйлап ҡараһаң, йәштәрҙең дә әйтер һүҙе бар бит. Юҡҡа ғына "Бер олоно, бер кесене тыңла", тип әйтмәгән халыҡ.

Инша яҙырға бирелгән ваҡыт тиҙ генә үтеп киткәндәй тойолдо. Балалар ҙур ҡәнәғәтлек менән яҙған эштәрен өҫтәлгә килтереп һалды. Уҡытыусы иншаларҙы сумкаһына һалып, өйҙә тикшерер өсөн алып ҡайтып китте. "Йә, нимә тураһында яҙғандар икән минең уҡыусыларым?" - тип, тулҡынланып, беренсе иншаны ҡулына алды Уҡытыусы.

"Аҡса юҡ, тип һылтаналар, башҡорт телендә открыткалар, календарҙар, туйҙарға, байрамдарға саҡырыу ҡағыҙҙары баҫтырып сығарып булмаймы икән ни? Өләсәйемде тыуған көнөндә башҡортса яҙылған открытка менән ҡотлағы килде, таба алманыҡ. Татарса, русса открыткалар тулып ята, үҙебеҙҙеке юҡ. Әгәр республика етәксеһе булһам, типографияларға, матбуғат йорттарына етерлек кимәлдә башҡортса открыткалар, календарҙар, төрлө милли ҡулланмалар сығарыу тураһында бойороҡ бирер инем..." "Ҡалай төплө фекер йөрөтә Динислам", - тип, башҡа иншаларға күсте Уҡытыусы.

"Мин аптырайым, ни өсөн башҡа милләт балаларын башҡортса уҡытып маташырға? Үҙебеҙҙең башҡорт балалары үҙ туған телен белмәй бит! Иғтибар үҙ милләтеңә нығыраҡ булырға тейеш! Аҡсаны ошо маҡсатҡа, туған телдәге дәрестәрҙе, төрлө түңәрәктәрҙе күбәйтеүгә тотонорға кәрәк. Ә башҡа милләт балаларына үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙы, йолаларыбыҙҙы, исмаһам, башҡортса күрешергә, хушлашырға өйрәтһәк тә еткән", - тип тамамлай әйтер һүҙен Айгөл.

"Телде ғаилә генә һаҡлап ҡаласаҡ, ти ҙә һөйләйҙәр. Был фекер бик дөрөҫтән түгел. Ни өсөн тигәндә, мәҫәлән, беҙҙең синыфта 20 уҡыусының яртыһынан күберәгенең аталары Себер яҡтарында эшләй. Әсәйҙәре яңғыҙ донья көтә, былай саба, тегеләй саба, балаларын тәрбиәләргә ваҡыты бик аҙ ҡала уның, ә атай кеше тәрбиәлә бөтөнләй ҡатнашмай. Атайым: "Себерҙә беҙҙең




яҡташтар шул ҡәҙәре күп, осрашҡанда, һеҙ ҡайһы райондан, тип кенә күрешәбеҙ хатта", - ти.

**Республика етәксеһе булһам, ошо мәсьәләгә нығыраҡ иғтибар итер инем. Ситтә йөрөгән ир-егеттәрҙе ҡайтарып, уларға эш урындары булдырыу, халыҡҡа лайыҡлы эш хаҡы түләүҙе хәстәрләр инем", - тип тамамлай яҙма эшен Сания.**

"Телде һаҡлап ҡалайыҡ, тиһәк, яңыса эшләргә кәрәк, - тип яҙа Алмаз. - Әйтәйек, матур, фәһемле итеп эшләнгән йәнһүрәттәр ярҙамында ғына балаларға башҡорт телен өйрәтергә була. Минең һылыуым шул йәнһүрәттәр ҡарап, уйнап ҡына ултырып русса һөйләшергә өйрәнде лә ҡуйҙы. Ул йәнһүрәттәрҙәге геройҙар балаларға һорауҙар бирә, төҫтәрҙе, предметтарҙы, хәрәкәттәрҙе ҡабатлата.

**Беҙҙең тел ғалимдарыбыҙ, уҡытыусыларыбыҙ ошо йүнәлештә ныҡ эшләргә тейеш. Төрлө-төрлө программаларҙы, уйындарҙы башҡорт теленә тәржемә итеп, уҡытыу эшендә ҡулланырға кәрәк. Мин Башҡортостан Башлығы булһам, Мәғариф министрлығына, ғалимдарға, яҙыусыларға ошо йүнәлештә ныҡлы эшләргә ҡушыр инем".**

"Башҡортостаныбыҙҙың яңы етәксеһе эшен бик яҡшы оран менән башлап ебәрҙе: "Алға, беҙ яҡшыраҡ булдырабыҙ!" - тип яҙа Варис. - Әлбиттә, килешәбеҙ ошо һүҙҙәр менән. Телде һаҡлап ҡалыу мәсьәләһенә килгәндә лә беҙ яҡшыраҡ эшләргә тейешбеҙ. Онотҡанда бер йыйылып үткәрелгән сараларҙың файҙаһы юҡ. Телде һаҡлау - көндәлек эш. Телевидение, радио аша тәүлек әйләнәһенә башҡорт телендә программалар яңғырап торорға тейеш. Бигерәк тә кескәйҙәр өсөн мауыҡтырғыс, файҙалы программалар, әкиәттәр, йәнһүрәттәр кәрәк. Был телде һаҡлап ҡалыу өсөн иң ябай һәм иң дөрөҫ юл. Ни өсөн башҡорт балалары урыҫҡа әйләнеүе тураһында ололар уйлап ҡарағаны булдымы икән? Бөтә бәлә ошо рус телендәге мәғлүмәти һөжүмдә бит. Әгәр үҙебеҙҙең Башҡортостан телевидениеһы тәүлек әйләнәһенә башҡорт телендә һөйләп торһа, республикалағы бар халыҡ белер ине башҡорт телен.

**Бер туҡтауһыҙ тамып торған һыу тамсыһының ташты тишкәнен беләбеҙ бит. Ә йөҙәрләгән урыҫ телендәге программаларҙың тәүлек әйләнәһенә шул эште башҡарғанын аңлай алмайбыҙ. Республика етәксеһе булһам, милләтте һаҡлап ҡалыр өсөн ошо проблема буйынса аныҡ эштәр башҡарыр инем..."**

Үҙенең иншаһын Дамир ошо юлдар менән башлаған: "Беҙ - заман балалары, һәр беребеҙҙә кесә телефоны. Ҡулға телефон тотоп, йоҡонан торабыҙ, кискә ҡәҙәр ҡулдан телефон төшмәй, дуҫтарыбыҙ, туғандарыбыҙ менән аралашабыҙ. Көнө-төнө ватсап аша русса йырҙар, ҡотлауҙар, шаян клиптар менән алышабыҙ. Улар башҡорт телендә юҡ тиерлек. Үҙебеҙҙең йырҙарҙы, шиғырҙарҙы, матур шаян клиптарҙы башҡортса ла халҡыбыҙға еткереп була бит. Мин республика етәксеһе булһам, Мәҙәниәт министрлығына, халыҡ ижады үҙәктәренә ижади коллективтар туплап, ошо йүнәлештә лә эшләргә ҡушыр инем..."

Уҡыусыларҙың иншаларын уҡып, Уҡытыусы бик ҡәнәғәт ҡалды. Тимәк, Башҡортостаныбыҙ киләсәге тураһында уйлаған, аҡыллы фекер йөрөткән улдарыбыҙ, ҡыҙҙарыбыҙ бар, тик уларҙың һүҙҙәрен дә ишетһендәр генә.

**Урал МӨХӘМӘТШИН.**
**Мәләүез районы**
**Иштуған ауылы.**

УЛЫМ, ҺИҢӘ ӘЙТӘМ...

## БАШҠОРТЛОҠ ҺАЛ!

**"Балаға нисек башҡортлоҡ тойғоho һалырға?" - тигән һорау менән мөрәжәғәт итәләр йәштәр. Быңдай һорау үҙе үк шатландыра. Сөнки, ысынлап та, башҡорт булыу - ул башҡортса һөйләшеү генә түгел, ә башҡортлоғоңдо тойоу.**

Башҡортлоҡ тойғоhо һалыуҙа ир кешенең - буласаҡ атайҙың аҡыл менән эш итеүе иң төп шарт. Уның аҡыл менән эш итеүе ниҙән ғибәрәт, тип һорарһығыҙ. Балаға бар тойғолар ҙа әсә һөтө аша килә. Бала әсә ҡарынында уҡ тәрбиәләнә башлай - ошо хәҡиҡәтте яҡшы аңларға тейеш атай буласаҡ кеше. Тимәк, буласаҡ атай балаһына башҡортлоҡ тойғоhо һалыуҙы маҡсат итеп ҡуя икән, ул мотлаҡ башҡорт ҡыҙына өйләнергә тейеш. Минең өсөн иң мөһиме - мөхәббәт, мин кемгә өйләнһәм дә, уны башҡортса һөйләштерәсәкмен, мин баланы барыбер башҡорт итәм, тигән фекер төптә дөрөҫ түгел.

Беренсенән, ни өсөн башҡа милләт вәкилен яфалап, ҡанына һалынмағанды булдырып маташырға.

Икенсенән, йәштәр өсөн иң мөһиме - ғашиҡлыҡты мөхәббәт менән бутарға ярамай. Ысын мөхәббәт емеше - ул шәжәрәңде һинең рухыңда дауам итерлек бала. Тәбиғи ҡанун буйынса һинең яртың үҙ милләтеңдә. Бер йән эйәһе лә үҙ нәҫелен башҡа төр йән эйәһе менән дауам итмәй. Бөтөн тереклектең, үҫемлек донъяһының йәшәйешен дауам итеүҙә төп шарт булған был ҡанун кешелек донъяһына ла ҡағыла. Был донъяға Юғары көс - Хоҙай тарафынан милләттәр бар ителгән икән, эске тартым, тойғо берлегендә улар бер бөтөн булып уҡмашҡан икән, шулай дауам итергә тейештер. Шулай булмаһа, милли тойғоhон юғалтмаған, әммә нәҫелен дауам итә алмаған кешегә аҙаҡ үкенеү, зар илау тигән тойғолар ҙа килмәҫ ине. Аҙмы егеттәребеҙ араһында ғашиҡлыҡты мөхәббәт менән бутап, ейәненең бары тик "картатайка" йәки "улатайка" тип әйтеүенән генә йыуаныс табып, үкенеүҙән ер тырнап иларҙай булып йөрөүсе атайҙар.

Өсөнсөнән, тойғо теле - аҙаҡ өйрәнеп һөйләшкән тел түгел. Тойғо теле - ул ҡанға һалынған, нәҫелдән-нәҫелгә күсә килгән тел - тәүге ауаз теле, өндәр теле, моң теле, туған тел. Баланың рухи донъяһына нигеҙ булырлыҡ ҡиммәттәр фәҡәт тойғо теле аша күсә лә инде.

Артабан. Ярай, аңлы егеттәребеҙ был мәсьәләне тәбиғәт ҡанундарына ярашлы рәүештә дөрөҫ хәл итте һәм саф башҡорт ғаиләһе барлыҡҡа килде, ти. Хәҙер инде тәбиғи башҡортлоҡ тойғоһон үҫтереү бурысы килеп баҫты алдыбыҙға. Ниҙән башларға? Балаға мотлаҡ башҡорт өнлө башҡорт исеме ҡушырға кәрәк. Ул үҙен иркәләгән саҡта башҡорт өнө, башҡортса тел моңо ишетергә тейеш. Әйтәйек, балаһына сит ил исеме ҡушҡан әсә был исемгә туған тел ялғауы ҡушып иркәләй алмай. Мәҫәлән, Анжеликаны - Анжеликаҡайым, тимәй, ә Анжелка, Анжелочка тип ебәрә. Роберҡайым тимәй, Робертик, ти. Бына шулай итеп сабый күңеленә әсә наҙы, әсә һөйөүе аша ят өндәр урынлаша. Ә үҙ милләтен ситен күргән, ят иткән, йәғни яратмаған, һис юғы, битараф булған кеше сит телгә ылығырға ғына тора. Балаға сит милләт исеме ҡушыу - үҙ милли мәҙәниәтеңә битараф булыуҙың, хатта яратмауҙың бер сағылышы. Билдәле, рухи байлығыңа битарафлыҡ балаға ят исемдәр ҡушыуҙа айырыуса ныҡ сағыла. Халыҡтың рухи ҡаҡшауы йәки, киреһенсә, милли мәҙәниәтенең сәскә атыу йылдары исемдәрҙә ныҡ сағыла. Исемдәр донъяһын өйрәнеүселәр йәки шәжәрә тикшереүселәрҙең фекеренсә, исемдәр аша халыҡтың рухи донъяһының нисек үҙгәреүен асыҡ күреп була. Әллә ҡайҙарға алыҫ китергә түгел, уҙған быуаттың туҡһанынсы йылдарынан башланған рухи асылға ҡайтыу исемдәрҙә ныҡ сағылыш тапты. Башҡорт балалары Буранбай, Арыҫлан, Илдархан, Сурағол, Таймаҫ, Юрматы, Тамъян, Мортаза, Мөйтән, Бөрйән, Сәлимә, Зөлхизә, Зәлифә, Ғилмияза, Зарифа кеүек боронғо исемдәрҙе йөрөтәләр хәҙер.

Артабан. Матур ҙа, заманса яңғырашлы ла, шул уҡ ваҡытта башҡортса ла исем ҡушылды балабыҙға. Хәҙер инде тәрбиә ҡанға һалынған моң мөхитендә дауам итергә тейеш. Үкенес, һуңғы йылдарҙа балаға сәңгелдәк йыры йырлау түгел, ябай ғына башҡортса көйләү ҙә онотола бара. Ә бала туған моң солғанышында үҫергә тейеш.

Әйткәндәй, Мәсетле районынан Ейәнбирҙин тигән бер ир һөйләгәйне. Ҡатыным ауырлы саҡтан башлап өйҙә ҡурай моңо, йыр тынманы. Һәр ваҡыт "Илсе Ғайса"ны уйнаным. Ҡатыным үҙе лә ярата ине был йырҙы, үҙе лә һәр саҡ көйләп йөрөнө. Бала тыуғас та йыр моңо дауам итте. Ул ҡурай моңона, йыр көйөнә йоҡланы. Малай үҫә барҙы. Икенсеһе лә моң солғанышында үҫте. Тәүге малайға биш йәштәр самаһы ине икенсеһе тыуғанда. Бер ваҡыт ҙурына бәләкәйен бәүетә торорға ҡушып, ишек алдына сығып киттем. Инеп киләм, ҡолаҡҡа моң сағыла: биш йәшлек ҙур улым "Илсе Ғайса"ны көйләй-көйләй сәңгелдәк бәүетә. Сәңгелдәктә ятҡан биш айлыҡ бала ағаһының көйөнә ҡушылып, ҡәҙимге ыңғайлатып, ығылдап ята. Иҫ китте, ҡыуаныстан күҙҙәрҙән йәш атылып сыҡты!..

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

***✓ Һәр Рәсәй гражданының тормошта үҙ телен ҡуллана алыуы, тәрбиә, белем биреү телен ирекле рәүештә һайлай алыуы кешенең төп хоҡуҡтарының береһе булып тора, һәм ул Рәсәй Конституцияһының 26-сы статьяһында теркәлгән.***

*БӘХӘС ҠОРО*

# ҠАҒИҘӘ ТЕЛ ҺЫНДЫРАМЫ?

**Башҡорт әҙәби теленең хәҙерге алфавиты һәм орфографияһы Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумының ҡарары менән 1981 йылдың 22 октябрендә раҫланған. Орфографик ҡағиҙәләр башҡорт теле ҡанундарына ярашлы итеп төҙөлөп, барсабыҙҙан да уларҙы теүәл үтәүҙе талап итә. Бындай мөһим документтар, барыһы өсөн дә мотлаҡ булғас, уларҙың объективлығына, тап шулай булырына инанғанбыҙ. Ни тиһәң дә, орфография ҡағиҙәләре абруйлы ғалим-ғөләмә тарафынан әҙерләнә бит. Ғәмәлдә беҙ, аҙмы-күпме зыялы заттар, хатаһыҙ яҙырға тырышабыҙ. Әҙәби телдә хатаһыҙ яҙыу ғына түгел, хатаһыҙ һөйләү ҙә фарыз.**

Аралашҡанда, радио һәм телевидение тапшырыуҙарын тыңлаған саҡта, бына нимәгә иғтибар иткәнем бар: байтаҡ ҡына милләттәштәребеҙ Вәли, ваҡыт, вәзир, вәкәләт кеүегерәк һүҙҙәрҙе "Үәли, уаҡыт, үәзир, үәкәләт" тип уҡымай, әлеге лә баяғы, рус һүҙҙәрендәге кеүек, "в" өнө менән әйтә. Һис арттырмайым, килешһеҙ, хатта тупаҫ булып ишетелә ошолай һөйләү. Күрәһең, беҙ нисек яҙыла, шулай уҡырға ла, һөйләргә лә күнегеп киткәнбеҙ. Ә орфография ҡанундарын ҡабул иткәндә, бындай һүҙҙәрҙе у - ү хәрефтәре менән яҙыу ҡаралған хәлдә, ошондай боҙоҡ һөйләш булмаҫ ине.

Унығына ғына түҙергә лә мөмкин булыр ине. Әммә рус теленән ингән һәм үҙгәртелгән орфографик ҡағиҙәләргә ярашлы яҙылған бәғзе бер һүҙҙәрҙе уҡығанда, образлы итеп әйтһәк, тел һынғандай була. Буш һүҙ түгел был. Йә әле, уҡып ҡарағыҙ ошо һүҙбәйләнеште: өлкә комитет секретары. Һуңғы һүҙгә иғтибар итегеҙ - секретары һүҙенең аҙаҡҡы ижеге ҡалын итеп уҡыла, ә башҡорт телендә бер нисек тә улай әйтелмәй был һүҙ (рус телендә секретар һүҙе юҡ). Элекке ҡағиҙәләр буйынса секретаре, тип яҙылып, һуңғы ижек нәҙек итеп уҡыла ине. Ә хәҙер яңы ҡағиҙә: ҡаты яҙабыҙ ҙа йомшаҡ әйтәбеҙ!

Ғөмүмән, орфорграфия ҡағиҙәләре буйынса рус әҙәби теленән ингән, аҙаҡҡы өндәре -рь, -сь, -чь, шулай уҡ -сть менән тамамланған һүҙҙәргә ҡалын ялғау ҡушылып яҙылыуы үҙе бер мәрәкә - был рус теленән ингән һүҙҙәрҙе боҙоп уҡырға өйрәтә. Мин шул уҡ секретары һүҙен бер нисә башҡорт балаһынан уҡытып ҡарағаным булды, барыһы ла ҡап-ҡалын итеп әйтә ошо һүҙҙе.

Рус телендәге "ч" өнө һәр саҡ нәҙек әйтелә, ә беҙ, башҡортсалатып, "Керчҡа киттем", тип яҙып-уҡып йөрөргә мәжбүрбеҙ. Элекке орфография буйынса Керчкә рәүешендә яҙылып (был дөрөҫ!), йомшаҡ итеп әйтә торғайныҡ, хәҙер автоматик рәүештә "Кершҡа" тип, ауыҙ тултырып һөйләйбеҙ. Юғиһә, башҡаса уҡып булмай, йә иһә Керчь өлөшөн айырым, бүлеп әйтеп, уға ҡалын -ҡа ялғауын ҡушып әйтергә була - әллә һүҙ, әллә тел һындырыла.

Етмәһә, ғалимдарыбыҙ, күҙ йомоп, тигәндәй, әле һүҙ барған документҡа аҙағы -шь хәрефтәренә (һәм бер "ш" өнөнә, ул һәр осраҡта ла ҡалын тартынҡы) бөткән һүҙҙәрҙе йомшаҡ тартынҡыға бөткән (!) һүҙҙәр төркөмөнә индергән. Эйе, ниндәй генә вазифа-дәрәжә биләгән хәлдә лә яңылыш яҙыу хилафтыр ул.

Һуҙынҡы өнгә бөткән рус һүҙҙәрен ҡулланған һәр осраҡта ла ҡалын ялғау ҡушып яҙыу талабы ошондай һүҙҙәрҙе уҡыған саҡта тел һындырыу әкәметен хасил итә. Үҙегеҙ яҙып, уҡып ҡарағыҙ әле, мәҫәлән, училище һүҙенә ҡалын ялғауҙар ҡушып! "Училище-һында" килеп сыға бит. Был рус һүҙенең беренсе ижегенән башҡалары нәҙек әйтелә, ә "щ" өнө һәр саҡта ла йомшаҡ яңғырай. Заманында (ул осорҙа ла орфография ҡанундарын башҡорт ғалимдары төҙөп биргән бит!) "училищеһендә", тип яҙа инек, һәм был дөрөҫ булған. Тора килеп, нигеҙендә нәҙек ижектәр булған һүҙгә ҡалын ялғау ҡушырға ҡушылды. Был шул уҡ башҡорт сингармонизмы ҡанунын күрәләтә боҙоу түгелме һуң? Башҡорт лингвистары, ғалим-филологтарыбыҙ ошо хаҡта уйланһа икән. Заманалар менән телдәр ҙә үҙгәреш кисерә, тик ошондай үҙгәрештәрҙе ҡанунлаштырыу ашығыс эш булмаһын ине.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

# ЗАКОН

## дөрөҫ аңлайыҡ

**Туған телебеҙ - башҡорт теле һәм, ғөмүмән, туған телдәр, уларҙы һаҡлау, үҫтереү хаҡында һуңғы йылдарҙа күп яҙылды, ғилми конференциялар уҙғарылды, телевизион тапшырыуҙар күрһәтелде, төрлө конкурстар, байрамдар ойошторолдо, закондар яңыртылды, хатта ки мәктәптәрҙә прокуратура тикшереүҙәре булып алды. Милли республикаларҙың дәүләт телдәрен уҡытыу арҡаһында, йәнәһе, рус телле уҡыусыларҙың хоҡуҡтары боҙола, тип яҙылған шикәйәттәр Мәскәү тарафтарына махсус рәүештә ебәрелә торҙо. Һөҙөмтәлә Рәсәйҙең мәғариф буйынса ҡануниәтенә үҙгәрештәр индерелеп, республикаларҙың дәүләт телдәрен генә түгел, барса халыҡтарҙың туған телдәрен дә ихтыяри рәүештә уҡытыу хаҡында яңы хоҡуҡи положениелар ҡабул ителде.**

Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, туған телдәрҙе уҡытыу буйынса индерелгән яңы хоҡуҡи талаптар уларҙы һаҡлау йәиһә үҫтереүгә булышлыҡ итеү урынына билдәле бер ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы. Сығарылыш уҡыусыларының белем кимәлен һәм сифатын аттестациялау маҡсатында уҙғарылған Берҙәм дәүләт имтихандары (БДИ) һәм Төп дәүләт имтихандары (ТДИ) тик рус телендә генә башҡарылғанлыҡтан, милләттәре рус булмаған ата-әсәләрҙең бер өлөшө үҙ балаларына уҡыу планындағы туған тел предметы итеп рус телен һайлауҙары хаҡында ғариза яҙҙы. Ә ҡала мәктәптәрендә башҡорт телен һайлаған балалар һаны бик аҙ булған хәлдә улар өсөн айырым рәүештә башҡорт теле уҡытылмаясаҡ, һәм улар ҙа автоматик рәүештә туған рус теле дәрестәренә йөрөйәсәк. Һушың китерлек, әлбиттә: мәктәптә башҡорт балаһына рус теле уның туған теле тип уҡытылһынсәле! Бындай хәлдең батша Рәсәйендә лә, совет осоронда ла булғаны юҡ ине, әммә был бөгөнгө ысынбарлыҡ.

Әммә закон, ул ниндәй генә булмаһын, закон булып ҡала, һәм ул үтәлергә тейеш. Шул уҡ закондар нигеҙендә, бер ни тиклем объектив һәм субъектив ауырлыҡтар булыуына ҡарамаҫтан, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ та, туған тел сифатында ла уҡытыуҙы ойоштороу өсөн мөмкинлектәр бар. Рус телен генә түгел, закон телен дә яҡшы белеү фарыз: уны дөрөҫ аңлап, башҡаларға ла аңлата белергә кәрәк. Юғиһә, ата-әсәләр, бәғзе бер мәғариф хеҙмәткәрҙәре, хатта ки ҡайһы бер закон әһелдәре "Рәсәй Федерацияһындағы мәғариф тураһында", тип аталған законға индерелгән яңы положениеларҙы тик үҙҙәренсә аңлатып, башҡаларға ла шул объектив булмаған фекерҙәрен һеңдерергә тырыша.

Йәнәһе, яңыртылған законға ярашлы, башҡорт милләтенән булмаған һәр бер ата-әсә ошо башҡорт мәктәбенә балаһын уҡытырға биреп, ошо уҡ мәктәптә балаларына үҙ туған телдәрен уҡытыуҙы талап итергә хоҡуҡлы. Йәнәһе, яңыртылған законда милли мәктәптәр эшмәкәрлеге ҡаралмаған, шулай булғас, элегерәк асылған милли (башҡорт, татар, сыуаш һ.б.) мәктәптәр барса милләт балаларын да уҡытырға алып, уларҙың ата-әсәләренең ихтыярына ярашлы, башҡа милли телдәрҙе лә туған тел булараҡ уҡыта башларға тейеш. Бына шулай!

Ысынында мәғариф ҡануниәтен юғарыла күрһәтелгәнсә тәғбир итеү (интерпретациялау) бер ниндәй ҡалыпҡа ла һыймай, быны әле һүҙ барған закондың хоҡуҡи нормаларын тупаҫ боҙоуға саҡырыу итеп ҡабул итергә мөмкин. Әгәр ошо фекер дөрөҫ икән, быны яңыртылған закон асылына ярашлы дәлилләү зарур. Юғиһә, тап рус халҡы әйткәнсә, закон сана тәртәһенә әйләнәсәк: уны ҡайһы яҡҡа борһаң, санаң да шул яҡҡа бороласаҡ. Ә беҙҙә санабыҙҙы ғына түгел, туған телебеҙҙе һаҡлай алырлыҡ самабыҙҙы ла тиҫкәре яҡҡа борорға самалаусылыр бар шул әле.

Конституцияла декларацияланған кеше һәм граждан хоҡуҡтары тейелгеһеҙ, әммә улар билдәле бер йәмғиәт һәм дәүләтселек мөхитендә дәүләт тарафынан ҡабул ителгән закондар, ошо закондарға ҡаршы килмәгән норматив-хоҡуҡи акттар ярҙамында ғәмәлгә ашырыла. Тимәк, кеше хоҡуҡтарын да абсолютлаштырырға ярамай, сөнки һәр бер кешенең хоҡуғы йәмғиәттә һәм дәүләттә башҡа бер кешеләрҙең шундай уҡ хоҡуҡтарына ҡаршы килергә тейеш түгел. Ябайыраҡ итеп әйткәндә, кеше хоҡуғының билдәле бер ҡулланылыу сиктәре бар, һәм улар ҙа закон тарафынан билдәләнә һәм көйләнә. Был беҙҙең мәғариф өлкәһенә ҡараған хоҡуҡтарыбыҙға ла берҙәй ҡағыла.

Һәр Рәсәй гражданының тормошта үҙ телен ҡуллана алыуы, аралашыу, тәрбиә һәм белем биреү, ижад итеү телен ирекле рәүештә һайлай алыуы кешенең төп хоҡуҡтарының береһе булып тора, һәм ул Рәсәй Конституцияһының 26-сы статьяһында теркәлгән. Кешегә тәрбиә һәм белем алыу телен ирекле һайлау мөмкинлеген тәьмин итеүсе төп хоҡуҡи документ - 2012 йылдың 29 декабрендә ҡабул ителгән 273-сө һанлы "Рәсәй Федерацияһындағы мәғариф тураһында", тип аталған Федераль закон, ул хәҙер 2019 йылдың 26 июнендә раҫланған редакцияла бирелә. Әйҙәгеҙ, төрлө милләтле Рәсәй граждандары өсөн үтә мөһим булған ошо хоҡуҡтың закон тарафынан нисегерәк көйләнеүен асыҡлап китәйек.

Ошо закондың 14-се статьяһы "Белем биреү теле" тип атала һәм унда беҙҙе ҡыҙыҡһындырған норматив положениелар бәйән ителә. Ошо хоҡуҡи положениеларҙы ҡарап сығып, уларҙың юридик асылын аныҡлау урынлы булыр.

**1.** Күрһәтелгән статьяның беренсе өлөшө илебеҙҙә иң элгәре Рәсәй Федерацияһының дәүләт телендә, йәғни, рус телендә белем алыуҙың гарантияланыуы хаҡындағы положение менән асыла. Был барыбыҙға ла күптән билдәле факт, ул совет осоронан бирле ғәмәлгә ашырыла. **Әммә артабан, өтөр билдәһенән һуң, тәрбиә һәм уҡытыу телен һайлай алыуҙың да гарантияланыуы иғлан ителә. Тимәк, бөгөн дә, тап совет осорондағы һымаҡ, тәрбиә һәм уҡытыу теле сифатында Рәсәй халыҡтары телдәренең береһе һайланған милли мәктәптәрҙең булыуы мөмкин. Бына шунан һуң әйт инде, Рәсәйҙең мәғариф буйынса ҡануниәтендә милли мәктәптәр эшмәкәрлеге ҡаралмаған, тип!**

Минеңсә, ошондай фекерҙе ата-әсәләр, педагогик коллективтар алдында ысынбарлыҡ итеп һөйләп йөрөүсе ҡайһы бер мәғариф чиновниктарының закондарҙы белә һәм дөрөҫ аңлай алыуын асыҡлау маҡсатында унан мотлаҡ махсус имтихан алыу зарурҙыр. Әгәр закондарҙы белмәй икән, ундайҙарға мәғариф системаһы менән идара итеү органында урын булмаҫҡа тейеш!

Ҡыҙғаныսҡа күрә, илебеҙҙә белем һәм тәрбиә биреү телен һайлау хоҡуғы абсолют түгел: ул "белем биреү системаһы биргән мөмкинлектәр сиктәрендә" генә ғәмәлгә ашырыла. Ни эшләйһең, гарантия, әммә сикләнгән гарантия! **Шуға ҡарамаҫтан, милләттәштәребеҙ ҙә, Башҡортостанда йәшәгән башҡа халыҡтар ҙа власть органдарынан ошо хоҡуҡты тормошобоҙҙа ҡуллана алыу мөмкинлектәрен булдырыуҙы, йәғни мәғариф системаһында милли телдәрҙә уҡыта алыусы яңы мәктәптәр астырыуҙы талап итә ала, сөнки был граждандарҙың конституцион хоҡуғы.**

**2.** Әле тикшерелгән статьяның икенсе өлөшөндә белем биреү ойошмаларында уҡытыу (белем биреү) Рәсәй Федерацияһының дәүләт телендә ойоштороla, **әгәр ҙә ошо статья башҡаны билдәләмәһә,** тиелә. Эйе, ысынбарлыҡта Рәсәй мәктәптәрендә бөгөн белем биреү, башлыса, рус телендә башҡарыла. Әммә был положение, күреүегеҙсә, башҡа бер хоҡуҡи норманың, йәғни уҡытыуҙың башҡа бер телдә ойоштороla алыуын һис инҡар итмәй. Әгәр кемдер, ошо статьялағы положениеның беренсе яртыһын күреп, икенсеһен иғтибарға алмай икән - быны юридик күрәшлек, тип кенә атарға кәрәктер.

**3.** 14-се статьяның өсөнсө өлөшөндә Рәсәй Федерацияһының милли республикалары территорияһындағы белем биреү ойошмаларында ошо республикаларҙың дәүләт телдәрен уҡытыу һәм өйрәнеү хаҡындағы норма асыҡлана. Ошо норма сиктәрендә күрһәтелгән берҙән-бер шарт - республикаларҙың дәүләт телдәрен уҡытыу Рәсәй Федерацияһының дәүләт телен уҡытыу һәм өйрәнеүгә зыян килтермәҫлек булырға тейеш. Ваҡытында Рәсәй Конституцион Суды ҡабул иткән билдәләмәлә лә шундай уҡ иҫкәрмә бар ине.

Илебеҙҙә милли дәүләт телдәрен уҡытыуҙың, бигүк оҙайлы булмаһа ла, үҙ тарихы бар. Бөгөн һис бер икеләнеүһеҙ әйтергә була: ошо йылдарҙа милли республикалар мәктәптәрендә уларҙың дәүләт телдәрен өйрәнгән уҡыусылар ниндәйҙер нигеҙле факттар менән дәлилләнгән зыян күрмәне. Киреһенсә, ошо республикалар мәктәптәренең сығарылыш синыфтары уҡыусыларының рус теле буйынса Берҙәм дәүләт имтихандарында алған уртаса баһала-

✓ *Башҡорт мәктәптәрен бөтөрөү юлында сабыусыларға кәңәш бер генәлер - үҙҙәренең балаларына уңайлы булған яңы мәктәптәр төҙөтөү хоҡуғынан уларҙы бер кем дә мәхрүм итмәгән, әйҙә, власть органдарынан ошоно талап итһендәр.*

# ТЕЛЕН...

## һәм аңлатайыҡ!

ры (балдары), Рәсәйҙең башҡа субъекттары менән сағыштырғанда, һис кәм булманы, хатта ки уларҙа рус телен сифатлыраҡ үҙләштереү факттары күҙгә ташланып торған осраҡтар йыш булды. Нисек шулай булмаһын ти: полилингвизмдың (күп теллелектең) баланың баш мейеһе эшмәкәрлегенә, тимәк, уның интеллектуаль ҡеүәһе үҫешенә ыңғай йоғонто яһауы хаҡындағы һығымта донъя психологияһында күптән билдәле бит инде.

**4.** Ошо статьяның дүртенсе өлөшө милли мәктәптәр өсөн үтә мөһим булған юридик көскә эйә. **Бында Рәсәй граждандарының мәктәпкәсә йәштә, башланғыс һәм төп дөйөм белемде үҙ туған телендә алыу хоҡуғы, шулай уҡ Рәсәй халыҡтары телдәре иҫәбенә ингән туған телдәрен (ошо иҫәптән, рус телен дә туған тел булараҡ) өйрәнә алыу хоҡуғы теркәлгән.** Алдараҡ әйтелгәнсә, ошо хоҡуҡтар илебеҙҙең мәғариф системаһы бирә алған мөмкинлектәр сиктәрендә ғәмәлгә ашырыла. Бында ниндәй мөмкинлектәр хаҡында һүҙ бара һуң? Улар ошо законда бик аныҡ рәүештә, асыҡтан-асыҡ әйтелгән: **"Күрһәтелгән хоҡуҡтарҙы бойомға ашырыу ошоға ярашлы белем биреү ойошмаларын, кластарын, төркөмдәрен кәрәкле кимәлдә булдырыу, шулай уҡ улар өсөн эшмәкәрлек итеү шарттарын тыуҙырыу аша тәьмин ителә". Бында милли телдәрҙә белем бирә алыусы балалар баҡсалары, мәктәптәр, милли телдәрҙе уҡытып булырлыҡ айырым кластар һәм төркөмдәр тураһында һүҙ бара.** Тап ошондай маҡсаттар менән төҙөлгән һәм асылған башҡорт, татар, сыуаш, удмурт, мари һәм башҡа Рәсәй халыҡтары мәктәптәре илебеҙҙең милли мәғарифы нигеҙен бар иткән, һәм улар дәүләтебеҙҙең закондарҙа ҡаралған ярҙамына, һәр төрлө булышлығына мохтаж.

Йәнә нимәне айырып әйтергә кәрәк: милли мәктәптәр Рәсәй халыҡтарының юғарыла күрһәтелгән хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашырыу маҡсатында, тап улар мәнфәғәтендә асыла. Тап шуның өсөн башҡорт мәктәбе башҡорт балалары өсөн, татар мәктәбе татар балалары өсөн, башҡа милли мәктәптәр үҙҙәренең уставтарында, локаль акттарында теркәлгән белем биреү теленә ярашлы, үҙ туған телдәрендә уҡый, әсә телдәрен өйрәнә алһын өсөн асылған. Ысынбарлыҡта улар - махсус мәктәптәр, уларҙың статусын бер ни тиклем кимәлдә махсус музыка, художество йәки спорт мәктәптәре менән сағыштырып була. Бында ниндәйҙер башҡа бер милләт балалары хоҡуғына хилафлыҡ ҡылыу һис юҡтыр, бындай мәктәптәр эшмәкәрлеге халыҡтарыбыҙҙың конституцион хоҡуғына ярашлы башҡарыла. Юғарыла әйтелгәндәр нигеҙендә, милли мәктәпкә яҡын йәшәгәне өсөн генә (һүҙ микрорайон ата-әсәләре хаҡында), башҡорт телен йәиһә башҡа милли телде уҡытыуға ҡырҡа ҡаршы тороп, балаларын ошо милли мәктәптә уҡыта алыу хоҡуғын даулашып йөрөүселәрҙең дәғүәләрен бер нисек тә законлы, тип әйтеп булмай. **Ә ҡала милли мәктәптәрен микрорайон территорияһына беркетеү законға ярашлы түгел - был алдараҡ телгә алынған норматив положениеларға ҡаршы килә. Башлыса, башҡорт телле ҡала мәктәптәренә уҡыусылар тик яҡындағы микрорайондан ғына түгел, хатта башҡа районларҙан да йөрөп уҡый - бындай мәктәптәр 180 меңләп башҡорт йәшәгән баш ҡалабыҙҙа ла иҫәпле генә бит.** Мәҫәлән, былтырғы уҡыу йылында баш ҡалабыҙҙың 8 башҡорт мәктәбенең 1-се класына 564 бала уҡырға төшкән, ә ҡалала теркәлгән 16 384 баланың 19 проценты ғына ошо башҡорт телле мәктәптәрҙә уҡыған. Ә Өфөлә барлығы 129 мәктәп, шуларҙың 8-е генә - башҡорт мәктәбе. Шулай булғас, нисек итеп, ниндәйерәк йөҙ менән ҡалабыҙҙың башҡорт мәктәптәренә дәғүә белдереп, низағлашып йөрөү мөмкин икән? Даулашып йөрөүселәр ҙә артыҡ күп түгел ул, әммә улар яҙмаған ерҙә дау сығарырға оҫтарып алған шул. Башҡорт мәктәптәрен бөтөрөү юлында сабыусыларға кәңәш бер генәлер - үҙҙәренең балаларына уңайлы булған яңы мәктәптәр төҙөтөү хоҡуғынан уларҙы бер кем дә мәхрүм итмәгән бит, әйҙә, власть органдарынан ошоно талап итһендәр.

**5.** Яңыртылған мәғариф законына ярашлы, мәктәптәрҙә белем биреү теле/телдәре уларҙың локаль норматив акттары тарафынан билдәләнә. Әлбиттә, был документты ҡабул иткәндә ата-әсәләрҙең теләге иҫәпкә алына. **Башҡорт мәктәптәренең ошондай документтарында ике белем биреү теле - башҡорт һәм рус телдәре күрһәтелгән. Әйтергә кәрәк, бындай норматив документ, башлыса, милли телле мәктәп асылған саҡта уҡ ҡабул ителә. Тимәк, үҙ теләге менән (ғариза яҙып) ошо мәктәптәргә балаларын уҡырға биреүсе граждандар, мәктәптә башҡорт телен уҡытыу менән бер рәттән, уҡытыуҙың һәм тәрбиә биреүҙең дә башҡорт телендә алып барылыуына дәғүә белдерә алмай.** Әлбиттә, башҡорт телле мәктәптә башҡорт ата-әсәләренән балаларына башҡорт телен предмет булараҡ уҡытыуға ҡарата ризалығын белдергән ғаризалар талап итеү - сәйерерәк күренеш, әммә был осраҡта ла закон хәрефенән тайпылмау талап ителә.

**6.** Туған телдәрҙе, республикаларҙың милли дәүләт телдәрен уҡытыу Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы алып барыла, шулай уҡ ошо уҡыу предметтары буйынса Рәсәй мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған уҡыу әсбаптарының булыуы мотлаҡ. Ғөмүмән, туған телдәрҙе, республиканың дәүләт телен уҡытыуҙа яңыса дидактик технологияларға күсеү проблемаһы ла хәл ителеп бөтмәгән әле. Был проблема буйынса беҙ республикабыҙҙың мәғариф етәкселеге тейешле саралар күрер, тип ышанабыҙ. Әммә ҡала мөхитендә башҡорт телен һаҡлап ҡала алыу ата-әсәләребеҙҙең, башҡорт мәктәптәре етәкселәренең әүҙемлеге менән бермә-бер бәйле: башҡорт телле мәктәптәребеҙ йәшәһен, үҫһен, тиһәк, уларҙың йыл һайын тулыланып, башҡа белем биреү ойошмаларына өлгө булып тороуы фарыз.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәғариф өлкәһендәге хоҡуҡи нормаларҙың асылын белмәмешкә-күрмәмешкә һалышып ҡына Рәсәй милли мәғарифын юҡҡа сығарып булмаясаҡ. Үтә боронғо китаптарҙың береһендә әйтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү һис тә яҙыҡ булмаҫ: "Күҙҙәре бар икән - күрерҙәр; ҡолаҡтары бар икән - ишетерҙәр". Күрһендәр ҙә, ишетһендәр ҙә - күп милләтле Рәсәй милли мәктәптәрһеҙ ҡалмаҫ, сөнки туғандарса, ысын татыулыҡта йәшәү рәүешенең башҡаса булыуын белмәйбеҙ беҙ...**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

---

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# РУССА ҠЫҪТЫРҘЫҢ БИТ...

**Әҙәм заты бөгөнгө тормошта бәхетле йәшәүгә өлгәшеү, киләсәк быуынға лайыҡлы йәшәү шарттары тыуҙырыу менән бер рәттән, үткәндәренә баһа биреп, фәһем алып, холҡон төҙәтә торған урынға, тарихын төҙәтеп, ҡиәфәтен үҙгәртеп, һәйбәт булып күренергә маташа.**

Кемде алдайҙыр? Сәйәсәт, көнкүрешендәге мөнәсәбәттәрен яңынан ҡороп, камиллаштырһа - бер хәл, аптыраған өйрәк арты менән һыуға сума, тигәндәй, теле, мәҙәниәте, йола, ғөрөф-ғәҙәттәре менән тәжрибәләр үткәреүҙән дә тартынмай.

Һөйләү телебеҙҙе генә алайыҡ. Халыҡты "халҡ", ҡатын-ҡыҙҙы "хатын-ҡыҙ", тип тә баш ҡатырҙылар заманында әрһеҙ алдан йүгереүселәр. Үткән быуаттың 50-се йылдарҙағы матбуғатын ҡараһаң, һөйләмдең яртыһы урыҫса һүҙҙәрҙән тора. Тимәк, шул мәлдә үк ике телде дөйөмләштереү башланған. Заманында "арҙаҡлы" тел белгестәре, әҙәбиәтселәр ҙә был "алдынғы үҙгәрештәр"ҙең иң алғы сафында барғандыр инде. Шул уңай менән файҙаланып, әллә кемдәр, әллә күпме "фәнни" бейеклектәр, бөйөклөктәр яулағандыр, шунһыҙ булмағандыр, ай-һай... Шуның һөҙөмтәһендә хәҙер күптәребеҙ русса уйлай, фекер йөрөтә, әгәр башҡортса һөйләргә тура килһә, руссанан башҡортсаға тәржемә итеп һөйләйбеҙ. Һөйләгәндә рус һүҙенең тәржемәһе ҡапыл иҫкә килмәһә, мейебеҙҙе артыҡ ыҙалатмай, русса әйтәбеҙ ҙә ҡуябыҙ. Хәҙерге буталсыҡ, күп осраҡта мәғәнәһеҙ, айышһыҙ һаҡау телебеҙ шулай барлыҡҡа килгән дә инде. Әгәр тыумыштан бирелгән әсә телендә уйлап һөйләшһәк, йәнебеҙҙе, аңыбыҙҙы йәберләп, көсләп ыҙалатмаҫ инек, сөнки күңелдәге телдән һүҙҙәр үҙенән-үҙе ағыла. Хаталар өҫтөндә эшләйбеҙ, тип, комиссиялар ойоштороп ҡараныҡ. Ләкин бөтә изге уйҙарҙы, әлеге лә баяғы, эшкә еңел-елпе ҡарау касафаты юҡҡа сығара ла ҡуя! Хәбәрҙе мул һөйләйбеҙ, вәғәҙәләр бирәбеҙ ҙә, вәссәләм! Еңел генә әйтелгән һүҙҙәрҙең, бирелгән вәғәҙәләрҙең хаҡы билдәле инде...

**Урал МОСТАФИН.**



✓ *Һуҡырлығыбыҙ менән телмәребеҙҙе, телебеҙҙе бысратабыҙ. Улай ғына ла түгел, быуабыҙ. Һүгенеү быуар йыландан яман. Һүгенгән йәмғиәт утопик йәмғиәткә тиң.*



ӘЙҘӘГЕҘ...

## ҺҮГЕНМӘЙЕК!

**Юҡ. Һүгенеүҙең насар ғәҙәт икәнен һаман танымайбыҙ. Һаман да тирә-яғыбыҙҙағы кешеләрҙең ауыҙын япмай, уларҙың һүгенеүен тыңларға ризабыҙ. Алама һүҙҙәрһеҙ булмай, йәнәһе. Телмәребеҙ "ярлылана", имеш. Насар һүҙҙәрһеҙ һөйләшһәк, ҡот оскос хәлгә юлығабыҙ: ыҡ-мыҡ итәбеҙ, элекке һүгенеү һүҙҙәре урынына һүҙ таба алмайбыҙ, йәнәһе. Шуға ла, әйҙә, нисек һөйләшкәндәр - шулай һөйләшһендәр, кешене яратҡан шөғөлөнән мәхрүм итмәйек, тип уйлайбыҙ. Әр һүҙҙәрен тыңлағандан берәү ҙә дауаханаға барып эләкмәгән, яҙмышы боҙолмаған бит...**

Яңылышабыҙ шул. Һуҡырлығыбыҙ менән телмәребеҙҙе, телебеҙҙе бысратабыҙ. Улай ғына ла түгел, быуабыҙ. Һүгенеү быуар йыландан яман. Һүгенгән йәмғиәт утопик йәмғиәткә тиң. Бер алама һүҙгә ялғауҙар өҫтәп, ниндәй генә һүҙ төркөмө төҙөмәҫһең дә, ниндәй генә һөйләм киҫәге урынында ҡулланмаҫһың. Быны өсөн шәп тел белгесе булыу ҙа кәрәкмәй.

Тел белгесе тигәндән, тағы бер борсоулы хәл көндәлек ҡыра. Беҙ уҡыған заманда БДУ-лағы филология факультеты урынлашҡан ҡатта элекке парталар ултырып ҡалған бер аудитория бар ине. Хәҙерге парталарға ҡарағанда, уларға яҙыуы еңелерәк. Нимә генә яҙылмағайны унда! Береһенән-береһе оятһыҙырак хәшәрәт һүгенеү һүҙҙәре. Уҡыу йылы башында таҙартып ҡуйһалар ҙа, студенттар килеү менән ул парталар яңынан "биҙәлә". Ғәҙәти күренеш, тип артыҡ ғәжәпләнмәҫ тә инем, әгәр шул парталар артында буласаҡ тел белгестәре, әсә теле, әҙәбиәт уҡытыусылары ултырмаһа.

Хәҙер иһә, һүгенеүҙе ғилми тикшереү сигендә лә өйрәнә башланыҡ. Шул парталарҙы уҡып ҡына ла диплом эше, йәғни ғилми диссертация яҙларға була. Тел яҙмышына битараф булмаҫҡа, уны иң матур тел буларак үҫтерергә бурыслы студенттарҙың, журналистарҙың һәм буласаҡ тел белгестәренең ошо "шедеврын" уҡып, уйға ҡала инем: ә киләсәктә уларҙың уҡыусылары ни тип яҙыр? Әгәр ҙә тел яҙмышына етди ҡарарға тейешле ҡатлам ошо һүҙҙәрҙең авторы икән, телгә битараф ҡарағандарға ни ҡала?

Нисек кенә булмаһын, телебеҙҙе ошо суп-сарҙан таҙартып була, тип уйлайым. Дөрөҫ, телгә төрлө яҡтан бысраҡ һөжүм эшләнә. Телевидениела ла, матбуғат баҫмаларында ла әр һүҙҙәре зиһенде телә, йырсылар туҙға яҙмаған һүҙҙәрҙе ҡатыштырып йырҙар йырлай. Ә инде интернет һүгенеүселәрҙең кадрҙар мәктәбенә әйләнеп бара. Шуға ҡарамаҫтан, "Хәлдәр нисек?" тигән һорауға ҡайһы бер тәрбиәһеҙҙәр һүгенеп яуап бирһә лә, беҙ әле һаулыҡты әҙәмсә һорашабыҙ.

Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзите биттәрендә был темаға һүҙ ҡуҙғатылып тора. Әле яңы ғына, 40-сы һанда, Әлиә Сәйғәфәрова мәҡәләһендә лә "Һүгенмәйек!" тигән саҡырыу ташлана. Әйҙәгеҙ, һүгенеү кеүек йәмһеҙ күренешкә ҡарата битараф булмайыҡ, ошо хаҡта фекер алышайыҡ әле.

**Сәлим БАТТАЛОВ.**

ТЕЛ ХИКМӘТТӘРЕ

# УЙЛАМАЙ ҺӨЙЛӘГӘН - АУЫРЫМАЙ ҮЛГӘН...



**Гәзитебеҙҙең "Аҡыл-ҡаҙна" рубрикаһында ҡыҫҡа ғына бер хикәйәт сыҡҡайны. Уның эстәлеге яҡынса ошолай. Батша төш күргән һәм юраусы уға: "Тиҙҙән һин яҡындарыңдың барыһын да юғалтасаҡһың", - тигән. Батшаға был, әлбиттә, оҡшамаған. Ул төш юраусыны хатта зинданға ябып ҡуйған, имеш... Ә икенсе төш юраусы шул уҡ төштө былай тип юраған: "Батшам, һин тирә-йүнеңдәге бар кешеләргә ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәйәсәкһең". Быныһын инде батша йомарт бүләкләгән. Батша хеҙмәтселәре был төш юраусынан былай тип һораған: "Һеҙ бит хакимға тәүге төш юраусы менән бер үк хәбәрҙе еткерҙегеҙ, ни өсөн ул хөкөм ителде, ә һин бүләкләндең?" "Эйе, беҙ был төштө бер төрлө юраныҡ. Ләкин хәбәрҙең ниндәй булыуы мөһим түгел, уны нисек еткереү мөһим бит", - тип яуап ҡайтарған төш юраусы...**

Ысынлап та, төптәнерәк уйлап ҡараһаң, һөйләшкәндә йә иһә ниҙер яҙғанда ниндәйерәк һүҙҙәр һайлауың бик мөһим роль уйнай. Мин бала саҡтан уҡ, нишләптер, шундай-бындай ваҡ төйәккә иғтибар итә инем. Мәҫәлән, кемдер берәүҙән: "Фәлән нәмәне ҡайҙан табырға була?" - тип һорайһың. "Мин уны ҡайҙан беләйем?" - тип, һорауына һорау менән яуап бирһәләр, уны үҙемә ҡарап екереү һымаҡ ҡабул итәм. Әгәр шул уҡ яуап "Әлләсе, мин белмәйем", - тип яңғыраһа, был мине ҡәнәғәтләндерә. Ә инде "Әлләсе, ана шул-шул кешенән һорап ҡара әле", - тигән кәңәш тә биреп ебәрһәләр, был бөтөнләйгә күңелгә бәлзәм булып ята. Бына шулай, эстәлеге бер иш булыуына ҡарамаҫтан, төрлөсә әйтелгән бер үк хәбәрҙе әҙәм балаһы ифрат төрлөсә ҡабул итә. "Ҡайҙан беләйем", тип яуаплаған кешегә тағы ниндәйҙер башҡа һорауҙар менән мөрәжәғәт итке лә килмәй...

Бер-беребеҙ менән аралашҡанда һүҙҙәрҙе уйлап, һайлап һөйләү ҙур ғына әһәмиәткә эйә, минеңсә. Сөнки һинең ауыҙҙан дөрөҫлөккә тап килмәгән, йә иһә, дөрөҫ булһа ла, килбәтһеҙерәк, тупаҫыраҡ берәй һүҙ ысҡынһа китте икән, аҙаҡтан, нисек кенә үкенһәң дә, уны ҡабаттан тотоп алып булмай. "Әйткән һүҙ - атҡан уҡ", тиҙәр халыҡта. "Әйткән һүҙ - ҡырҡылып ауған имән", тигән варианты ла бар был мәҡәлдең. "Уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән", тип тә әйтәләр.

Бәғзе берәүҙәр башҡаларҙың һүҙ айышына төшөнөп етмәгән көйө тура бәрҙерергә яратыусан. Беҙҙең яҡта ошондай лаҡап йөрөй. Танһыҡбикә исемле йәш килен, тары бутҡаһы бешереп, ашъяулыҡҡа алып килеп ултыртҡан, имеш. Ә был килендең ҡайныһы алсаҡ, телдәр кеше булған, күрәһең. "Танһыҡҡа тары бутҡаһы ла ярай ул", - тип, ихласлап ашарға керешкән. Һәр нәмәгә яуапты "кесәһендә генә алып йөрөгән" кешеләр ҙә була бит. Ул генә ла ла түгел, һәр бер һүҙҙе "ҡырын һапларға" әҙер булғандар бар. Йәш кенә булыуына ҡарамаҫтан, был килен дә тап ана шундайҙарҙан булып сыҡҡан. Әлеге ҡайныһы әйткән әйтемдә ғүмерендә лә ишетмәгән һәм уның мәғәнәһен аңлап етмәгән, күрәһең: "Ярпылдап ултырған Ярулла ҡартҡа ла бата ул тары бутҡаһы", - тип һалдырған, имеш... Бында икеһе лә килешкән. Ҡайныһы ла, килене лә. Килененең исемен яҡшы белгән Ярулла ҡарт әйтемде ҡулланмайыраҡ, түҙеп ултырһа ла булыр ине. Икенсенән, йәш килен булараҡ, Танһыҡбикә лә бер аҙ уйлабыраҡ һөйләргә тейеш ине. Әммә улар ауыҙынан сыҡҡан һүҙҙе тотоп ала алмаусыларҙан булғандыр инде...

Уйламай һөйләүҙәргә ҡағылышлы тағы бер миҫал. Ауырыу кешенең хәлен белешеү - бик сауаплы ғәмәл. Был хаҡта оло кешеләр яҡшы белә. Беҙҙең яҡта бер бабай ҡаты сирләп ятҡан. Ундай кеше тураһында, ғәҙәттә, күршетирә араһында "Бына-бына донъялыҡты ташлап китер ул", тигән хәбәрҙәр ҙә йөрөй. Шулай, бер әбей әлеге ауылдашының хәлен белешергә ингән. Ҡолағы ишеткән, күҙҙәре күргән, аҡылы ла теүәл булған был бабай менән бер аҙ һөйләшеп ултырғандан һуң: "Ярай, Фәлән күрше, һау булып тор, ауыр тупрағың еңел булһын", - тип хушлашып сығып киткән әбейебеҙ... Йәшәргә, ысынлап та, бер нисә көн генә ҡалған был ҡарт уның һүҙҙәрен нисек ҡабул иткәндер инде. Һәр хәлдә, уға былдай "изге теләктән" әллә ни еңел булмағандыр. Ғәҙәттә, кеше үлгәндән һуң әйтелә торған был һүҙҙәрҙе әбейен уйламайыраҡ ысҡындырған шул. "Ошо арала үлеп китһән-маҙар, ауыр тупрағың еңел булһын", тигән һымағыраҡ килеп сыҡҡан...

Һәр ауылда ла шуның һымаҡ хәлдәр аҙ түгелдер. Тиҫтәнән ашыу йылдар элек беҙҙең күрше ауылда булған тағы бер ваҡиғаны хәҙер көлкө итеп һөйләйҙәр. Әммә ул саҡта кемдер өсөн әллә ни күңелле булмағандыр, тип уйлайым. Етмеш йәштәр тирәһендәге бер ағай яман шеш менән сирләп өйөндә ятҡан. Бөтә ауыл кешеһе был хаҡта белгән, әлбиттә. Бер мәл ауылдың хакимиәт башлығы үҙ йомошо менән район үҙәгенә китеп барышлай әлеге ағайҙарҙың өйө тапҡырында машиналар йыйылып ултырғанын күреп ҡалған. Иғтибарлы был хужа, автомобилен туҡтатып, үтеп барыусы берәүҙән: "Нишләп унда машиналар йыйылып киткән икән?" - тип һораған. Ә теге үтеп барыусы ауылдашы: "Эй, Фәлән ағай ауыр хәлдә ята ине, моғайын, үлгәндер. Туғандары уны ерләргә килгән бугай..." - тип әйткән. "Шулай икән..." - тигән дә, ҡабат-ҡабат йөрөмәҫ өсөн гәзит редакцияһына инеп, бер ыңғай некролог биреп сығырға ҡарар иткән хакимиәт башлығы. Баймаҡта үҙенең төп йомошон йомошлап бөтөп, ҡайтып килешләй тағы бер ауылдашын осратҡан. Хәл-әхүәл һорашҡас: "Баймаҡтан ҡайтып киләм әле. Фәлән ағай хаҡында некрологка заказ да бирҙем..." "Фәлән ағай?.. Мин бит әле генә уның янына инеп хәлен белешеп сыҡтым, һөйләшеп ята ул!" - тигән тегеһе. "Нисек? Ә өйҙәренең ҡапҡаһы алдында ниндәй машиналар йыйылғайны һуң?" "Эй, күршеләре ҡунаҡ саҡырған бугай..." Ҡабаланырға яратҡан башлыҡ, машинаһын кире бора һалып, ҡабаттан район үҙәгенә елдергән. "Туғандарҙың ҡайғыһын уртаҡлашыу" хаҡындағы мәғлүмәтте инде типографияға биреп өлгөргән мөхәррирҙе нисек етте шулай өгөтләп, әлеге некрологты көскә "тотоп" алып ҡалып өлгөргән. Ә теге ағай шул ваҡиғанан һуң тағы бер ай тирәһе ваҡыт үткәс кенә донъя ҡуйған... Үҙе хаҡында некрологты уҡыған хәлдә, әлбиттә, уға ла әллә ни еңел булмаҫ ине...

Халҡыбыҙҙың "Ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫ", тигән мәҡәле тик тегенсе, йә иһә башҡа һөнәр кешеләренә генә ҡағылмай, ә "ауыҙыңды үлсәп ас", тип әйтеүгә лә ишара булыуын аңлау кәрәк. "Кеше һүҙе кеше үлтерә", тигән әйтем дә бар бит әле. Күрше ауылыбыҙҙағы бер ағай табиптарға барып тикшерелгәндән һуң ниндәйҙер ағзаһында яман шеш табыуҙары хаҡында белгәс, йөрәк инфарктынан кинәт кенә вафат булыуы хаҡында һөйләгәйнеләр элегерәк. Шуға күрә үҙеңдең һәр һүҙеңде контролдә тотоу талап ителә, айырыуса, табип халҡынан. "Табип этикаһы", "Табип сере" (врачебная тайна) тигән термин ҡулланыла медицинала. Дөрөҫ дауаламау арҡаһында ғына түгел, ә һаҡһыҙ ниҙер әйткән табип һүҙе лә кешене сиргә һабыштырыуы мөмкин. Табип сәбәпсе булған былдай ауырыуҙарҙы "ятрогенное заболевание" тип тә атайҙар.

Уйламай әйтелгән бәғзе бер хәбәрҙәрҙе халҡыбыҙҙа мәҙәк итеп һөйләргә лә әҙерҙәр. Бер туған Юлай ағайым менән бер йылда медицина институтына уҡырға ингәйнек. Мин хәрби табип булырға ҡарар иттем, ә ул гражданкала ҡалды. Оҙаҡ йылдар суд-медицина эксперты булып Сибай ҡалаһында эшләй. Уның эше, тураһын әйткәндә, моргта, ҡала күләмендә көн һайын булып торған һәр төрлө бәләҡазаларҙан донъя ҡуйған кешеләрҙе ҡарап, уларға дөрөҫ диагноз ҡуйып, үлем сәбәбен асыҡлауҙан ғибәрәт. Шулай бер табында ултырғанда ағайымдың бер таныш: "Эй, Юлай, һин врач бит. Һиңә бер киләм әле, бына шул-шул ерем ауырта..." - тип әйтә башлаған икән, һүҙгә йор ағайым: "Юҡ, һин миңә килмәҫкә тырыш!.." - тип яуап биргәс, һүҙҙең ҡайҙа барғанын төшөнгән ҡунаҡтар гөү килеп көлөшөп алған. Шулай, ҡәҙерле туғандар, һәр һүҙебеҙҙе уйлап һөйләйек.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

***✓ Муса үҙен-үҙе иҫләгәндән бирле, ятһа ла, торһа ла, күргәне ярлылыҡ булды: ишле ғаиләлә берҙән-бер ат, туйыр-туймаҫ тамаҡ, ябылыр-ябылмаҫ өҫ-баш. Өҫтәүенә, бер тумалаҡ һыйырҙың ағына ҡарап торалар.***




...Коридорҙа ваҡыттың туҡтауһыҙ икәнен иҫкәртеп, надзирателдәрҙең аяҡ тауышы берсә алыҫая, берсә яҡыная: тап-топ, тап-топ.

Һорау, һорау... Ул артабан нисегерәк дауам итә? Аръяғына социаль сығыш, белем тураһында төпсөрҙәр, моғайын. Социаль хәл тигәндән, кем ул ярлы башҡорт крәҫтиәне, тип һораһалар, комбриг һис икеләнмәйенсә: "Ул - минең атайым, Көсөк ауылынан Лут Мортазин", - тип әйтә ала.

Әйтһә лә ғәжәп түгел инде, сөнки Муса үҙен-үҙе иҫләгәндән бирле, ятһа ла, торһа ла, күргәне ярлылыҡ булды: ишле ғаиләлә берҙән-бер ат, туйыр-туймаҫ тамаҡ, ябылыр-ябылмаҫ өҫ-баш. Өҫтәүенә, бер тумалаҡ һыйырҙың ағына ҡарап торалар. Мал-тыуарҙы күберәк аҫрарға Луттың һаулыҡҡынаһы самалы булыу ҡамасаулағандыр инде, ни өсөн тигәндә, Муса уның ваҡыт-ваҡыт өҙлөгөп, ятып тороп ауырып киткән саҡтарында: "Эй-й, хәйерсе!.. Һаулыҡҡынаң булмағас..." - тип әсенеп ҡуйғандарын яҡшы хәтерләй.

Бер көндө шулай, киске сәй эсеп ултырғанда Лут тәрән мәғәнәле итеп: "Кәзә ҡойроғон ҡалҡыта тип..." - тигән хәбәрҙе әйтеп ҡуйҙы. Дөрөҫөрәге, ярты хәбәрҙе, сөнки уның тулыһы былай булырға тейеш: "Кәзә ҡойроғон ҡалҡыта тип, һарыҡ та ҡалҡытып ҡарай". Тик был өйҙә шулай ҡабул ителгән: хужаның сәйерлегенә барыһы ла күнегеп бөткән. Әгәр, киреһенсә, Лут үҙенең хәбәрҙәрен тулы итеп һөйләһә, уны аңлай алмай йөҙәрҙәр ине һымаҡ. Мәҫәлән, өй хужаһы йәмәғәтенә: "Йә Хоҙай, көн аяҙға тартты, әллә иртәгә..." - тиһә, Орҡоя бының дауамын ошолай тип аңғара: "...бесәнгә төшәйекме?" Миҙгеленә ҡарап. Әгәр теге һөйләм көҙгә табаныраҡ әйтелһә, ул: "...ураҡҡа төшөргәме икән?" - тигәнде аңлата. Йәки, әйтәйек, Лут үҙенең малайҙарын ороша: "Ниңә атты тышамай ебәргәнһегеҙ, шунан иртәгә..." Аталарының үҙенсәлекле телен ятлап бөткән уландар уға шундуҡ төшөнә: "...ат эҙләп көндө үткәрергә итәһегеҙме?"

Сәй эскәндә әйтелгән хәбәрҙең үҙ айышы бар ине - ваҡ-төйәктән һүҙ сығарһа, уның исеме Лут булмаҫ. Әлеге һүҙ уға яҡын ғына ағай тейеш булған Мөхәррәмгә төбәлгәйне. Лут менән бер туған Әбделфауаристың күп һанлы уландарының береһе Мөхәррәм һуңғы бер-ике йылда тамам ҡаңғыртты бит. Лут шулай аңлай: Айса менән Мусаның иншалла үҫеп ҡул араһына кереүен күреп, уларҙы үҙенә ялсы итә алмай йонсой ул.

Әбделфауарис заманына күрә хәлле генә кеше булып, унан таралған уландар бөтәһе лә тип әйтерлек яҡынтирәлә ярайһы уҡ күренекле әҙәмдәр ине. Дәүер арбаһынан төшөп ҡалмаҫ өсөн белем алырға кәрәк икәнлеген яҡшы аңлаған аталары уларҙы бар хәленсә уҡытырға тырышты. Әбделфауарис үҙе лә заманында Ырымбурҙа кадет корпусында уҡый биреп ҡуйған кеше булараҡ, аңғара: уҡығандың абруй башҡа, тормош та башҡа. Уҡый биреп тип әйтеү шул: күп тырышлыҡ һалып, хәтһеҙ мал тотоноп, ҡат-ҡат юллап малайҙы уҡырға урынлаштырыу бушҡа булып сыға - Моратша ҡарт кеше һүҙенә төшөп улын корпустан кире ала ла ҡайта. Таныштарынан кемдер Ырымбурҙа, имеш, Әбделфауаристы күрә лә әллә ысын, әллә буш хәбәрҙе Моратшаға килеп әйтә: "Улың баштан-аяҡ урыҫҡа әйләнгән - сәсе поптыҡы һымаҡ етек, өҫтәүенә, торған килеш тәһәрәт ала".

Үҙе уҡый алмағанға күрә, Әбделфауаристан тыуған балалар белем алып, ҡайһыһы староста, ҡайһыһы старшина вазифаһын үтәп, бер-береһенә арҡаланып көйлө генә тормош көтөп яталар ине. Улар араһынан Лутҡа тәҙрәләш кенә йәшәгән әлеге Мөхәррәм, бөлгәнде бөлдөрәйем тигәндәй, яҙлыкөҙлө теңкәгә тейә ине:

- Ҡустым, уландарың ерҙе тырматып ташлаһа, ҡалай яҡшы булыр ине, буш ителенмәҫ.

- Лут, Айса менән Муса бер-ике көн игендә урышмаҫ микән?

Эйе, әйтерһең, Луттың хужалығы юҡ. Үҙе һаулығы юҡлығына эсе бошоп, баҫыу эштәре осоронда ҡалайтайым икән тип торғанда, эшкә кереп килгән ярҙамсыларынды икенсе кеше ҡарамағына бир ҙә ебәр, имеш. Сәй эскәндәге һүҙ Мөхәррәмдең үҙ яғын ғына ҡайырыуына, тирә-яҡ ауылдарҙағы байҙарға ҡарап нисек кенә булһа ла шулар рәтенә инергә маташып ятыуына кинәйәләп әйтелгәйне.

Икенсе көндө уландары менән аулаҡта ҡалғас, Мөхәррәмдең сираттағы "йомошон" онота алмаған Лут бер һөйләм менән уға үҙ мөнәсәбәтен белдерҙе: "Иркенде һатҡансы, бүркеңде һат, тигән". Мәҡәлде тәүге тапҡыр әйткәнгә күрә, ул был юлы тулы ине. Бынан ары, әлбиттә, атай кеше уның тәүге өлөшөн генә әйтһә лә уландары аңлаясаҡ. Бер генә һөйләм, әммә ниндәй! Башҡалар өсөн әйтә алмай, мәгәр Муса ғүмерлеккә зиһененә уйып ҡуйҙы: донъялағы иң ҡәҙерле, иң изге нәмә - ирек.

Мусаның хәтерендә яҡшы һаҡланған: ул инәһе менән Байрамғол мәҙрәсәһендә икенсе йыл һабаҡ алып ятҡан Айсаның хәлен белешергә килгән. Лут, ғилемде ихлас күңелдән ихтирам итеүсе кеше, әллә ни теләге булмаһа ла баш бала тигән булып Айсаны яҡынтирәлә үҙенең ғилемлелеге менән дан тотҡан Латиф хәҙрәт ҡарамағына тапшырғайны.

Латиф хәҙрәт дин әһеле булыуҙан тыш, ғәләмәт һынсы ла ине. Ул инәһенә эйәреп килгән буйсан, теремек, аҡыллы ҡарашлы Мусаға бер күҙ һалыу менән Орҡояға:

- Иншалла, ошоға тиклем яңылышҡаным юҡ, әйтмәһәм, гонаһ булыр. Был балала бер ғилләә бар, иманым камил. Уҡытырға кәрәк. Собханалла, маңлайы ниндәй! - тине.

- Эй, хәҙрәт, бәләкәй бит әле ул...

Ошо ерҙә Муса инәһен бүлдереп:

- Ә мин уҡый беләм инде! - тип һалмаһынмы.

- Ҡара һин уны! Кемдән өйрәндең һуң?

- Айса ағайымдан отоп алдым.

- Ошо китаптанмы? - Хәҙрәт "Әфтиәк"те күрһәтте.

- Эйе, эйе, шул.

- Йә әле, уҡып күрһәт.

Муса китаптың тәүге битен асып, шатырлатып уҡырға тотондо.

- Бәрәкалла, бәрәкалла! - тип һоҡланыуын белдерҙе Латиф хәҙрәт. - Әйттем бит мин! Был баланы уҡытмай ҡалдырыу - ҙур яҙыҡ. Бөгөн үк ҡалдырып кит үҙен, шундуҡ икенсе синыфҡа ултыртырмын. Ағаһына ла ярҙам итер, бергәбергә уҡырҙар.

Шулай көтмәгәндә хәҙрәттең үҙенең ныҡышмалылығы арҡаһында уның шәкерте булып киткән Муса мәҙрәсәлә ике йыл ғына уҡып ҡалды. Өсөнсө йылына көҙгө ямғырҙар йышайып китеү сәбәпле малайҙарҙың мәҙрәсәгә йыйыныр ваҡыты ураҡтың ҡыҙған сағына тура килде. Крәҫтиән тормошо шунан ғибәрәт бит ул: йәй салғыға, көҙ ураҡҡа йығыла яҙып йөрөп ғүмере үтә. Шулайтмайынса ла булмай: әҙ генә йоҡомһорап йөрөнөңмө - ямғыр яуа ла әллә нисә көнлөк эшеңде тотҡарлай, эш билдәһеҙ ваҡытҡа һуҙыла ла һуҙыла. Ул йылды, кешенең рәхәтләнеп иген урыр мәлендә өҙлөкһөҙ ямғырҙар яуҙы, тирәяҡтағы ҙур һәм кескәй йылғалар ярҙарынан ашып сыҡты, тауҙарҙа өр-яңынан ҡурпы йәшәрҙе. Көн, ниһәйәт, аяҙығанда иген баҫыуҙарындағы тулышҡан башаҡтар өлгөрөүҙән үтеп, ҡойола башлағайны инде.

Ураҡ дәррәү башланды. Оҙайлы ямғырҙың ҡабатланыуынан ҡурҡҡан халыҡ бер генә сәғәтте, хатта бер генә минутты ла әрәм итмәҫкә тырышып ураҡҡа ябырылды. Ямғыр башҡаса яуманы яуыуын, әммә ураҡ оҙаҡҡа һуҙылды: уңышты йыйып, көлтәләрҙе һуғып, эште урын-еренә еткергәнсе көҙ үтеп, ҡыш булғайны инде. "Бесән сабыуҙары дәүер эш, ураҡ урыуҙары ауыр эш", - тип йырлаған ата-олатайҙар, моғайын, уның шулай ялҡытҡыс булыуына зарланғандарҙыр.

Яңғыҙ аты менән уландарының көсөнә ҡарап торған Лут ҡарт һуңғы көлтәһен һуғып бөтөп билен турайтҡанда ҡыш уртаһы ингәйне инде. Маңлайҙан аҡҡан тир әсе, ләкин ярлы крәҫтиән тормошоноң хәҡиҡәте тағы ла әсерәк ине. Айса менән Мусаның уҡыуы тураһында ҡабаттан һүҙ ҡуҙғатманылар - Мортазиндар йортонда хәҡиҡәттең күҙенә тура ҡарап өйрәнгәйнеләр.

Был йыл Лут ҡарт өсөн һуңғыһы булыр, тип берәүҙең дә башына инеп сыҡмағандыр, моғайын. Яҙ үтеп, тәбиғәтте йәй үҙенең хозурлығына сорнап та өлгөрмәне - донъянан үтеп тә ҡуйҙы бабай. Үлеме бик кинәт, күптәр өсөн серле булды, сөнки унда-бында сырхап китә торған холҡо булһа ла, вафаты шулай уҡ кинәт етер тип һис кем уйламағайны.

Мортазиндар нәҫеленә ҡараған Зөлхиә әбейҙең баш балаһы Ғәйнисафа кейәүгә Ғәлиәхмәр ауылы Ғәләүетдингә төшкәйне. Ғәләүетдин иһә тирә-яҡҡа даны таралған балыҡсы, унан бигерәк тә оҫта һунарсы ине. Улар өҫтөнә был йүнсел, алсаҡ кеше һуңғы осорҙа алтын йыуыу кәсебенә тотоноп китеп, арыу ғына үҙләштергәйне ошо һөнәрҙе. Ғәләүетдин ҡәйнә йортон да онотмай, ишек тотҡаһын бик һыуытмай ғына Көсөккә килеп йөрөй ине. Бер ҡунаҡлағанында ул Мусаны мәрәкәләп былай тине:

- Нимә, ҡәйнеш, улай бик бөтөнөп киткәнһең әле, өҫ-башың да хөрт кенә күренә.

Муса уға үҙе һымаҡ шаяртыбыраҡ яуап бирҙе:

- Минең ҡулым һинеке шикелле алтын саңына буялмаған даһа.

- Һи-и, - тип көлдө Ғәләүетдин, - бөтә ҡайғың шул ғына икән! Алтын ни ул, һинекенә лә йоғор, әйҙә миңә ярҙамсы булып кил.

- Ҡуй, еҙнә, - тигән булды Муса, - йә ат башындайы табылыр ҙа, бүлешә алмай ҡаңғырырбыҙ.

- Ат башындай алтын әкиәттә генә була ул. Ысын әйтәм, әйҙә минең менән. Әгәр ки, бәхетеңдән самородка табылһа, үҙеңә алырһың. Мин барыбер уны килештерә алмам, холҡомдо ишетә беләһеңдер әле.

Ә Ғәләүетдиндең холҡо, үҙе ишаралағанса, бик үҙенсәлекле: тапҡан-таянғанын кеше менән бүлешмәһә, йәшәй алмай ине. Күңеленең киңлегенә сыҙай алмайынса, элек тә һунар табышын ауылдаштарына өләшеп бөтә лә ҡуя торғайны, ғәҙәт китмәй, тигәндәре раҫ икән - әлеге кәсебендә лә айҙар буйы ыҙалап йыуған алтынының хаҡҡынаһын күңеле килгән кешеләрен һыйлауға исраф итә, имеш, тигән хәбәр таралғайны.

- Ысын әйтһәң, барыр инем, - тине Муса дәртләнеп китеп. Алтын табылмаҫ шул, әгәр табыла ҡалһа, нисегерәк тотонорға белерҙәр ине лә ул: тәүҙә ҙур итеп өй һалдырырҙар ине, ҡалғанын - уҡыуға, сөнки өйлө булыу атаһының күптәнге хыялы булһа, үҙенең яҡты хыялы - уҡыу бит.

- Һе, әллә мин мәрәкәләп һөйләшкәс тә, алдаҡсы тип уйлайһыңмы? - тине Ғәләүетдин. - Шаяртмаған еҙнә - еҙнә буламы? Йә, бараһыңмы?

- Барам, - тине Муса кинәт тоҡанып китеп, - ятып ҡалғансы, атып ҡалыр кәрәк...

Ана шулай көтмәгәндә старатель булып китте ул. Старатель тип, Ғәләүетдин егетте был кәсепкә йүнләп өйрәтергә лә өлгөрмәй ҡалды, Мусаның шаяртып ҡына юрағаны юш килде лә ҡуйҙы. Әйтмәҫ ереңдән: "Хоҙайҙың хикмәте", - тиерһең. Ул көндө лә, ғәҙәт буйынса, Ғәләүетдин соҡорҙан алтын ҡомон өҫкә ырғыта, ә Муса ҙур ике күнәк менән уны йыуа торған урынға - Табылғашты йылғаһының ярына ташый ине. Иртәнсәктән бирле байтаҡ эшләп, тәүге тирҙәре сыға башлағайны инде. Ғәләүетдин сираттағы бер көрәк ҡомдо өҫкә ташланы. Шул саҡ буш күнәккә тейеп нимәнеңдер "сыңҡ" итеп ҡалғанын ишетеп, Муса уның тирәһендәге ҡомдо ҡаҙғылап ҡарайһы итте. Еүеш ҡом араһынан үҙе бармаҡ дәүмәле генә булһа ла сағыштырмаса ауыр бер киҫәкте соҡоп сығарғас, егеттең тәндәре эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ғәләүетдин еҙнәнең самородка тигәне шулмы әллә? Булмаҫ!

Була икән шул. Донъя мөғжизәнән яҙмаған икән. Муса әлеге киҫәкте кейеменә һөрткөләп, ҡомдан таҙартҡайны, усындағы алтын ҡояш нурынан гөлтләп тоҡанғандай, ялтырап китте. Уның тоноҡ яҡтыһынан тирә-яҡ сихри төҫ алды. Әйтерһең, был һис тә ысынбарлыҡ түгел, ә бала саҡта әҙәһе тасуирлаған әкиәт донъяһы. Ян-яҡтағы сауҡаларҙың олондары саф көмөштән, имеш, ә япраҡтары - талир тәңкә. Ҡыуаҡлыҡта бер ҙә ябай һандуғастар түгел - ожмах ҡоштары сутылдаша, имеш. Ҡолаҡҡа салынған бынау сылтырауҙа Табылғаштының ағышы түгел, ә гүзәл әкиәт ҡыҙҙарының йырлаған тауыштары икән дәһә...

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# АТЛАП ЙӨРӨШӨҢ...

## холҡоңдо күрһәтә

■ Киҫкен респираторлы вируслы инфекция эләктереү хәүефе кешенең физик әүҙемлеге артҡан һайын кәмей бара. Дания ғалимдары үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, был бактериаль инфекцияларға ла ҡағыла. Ғалимдар 3 йыл дауамында 18 мең кешенең йәшәү рәүешен тикшергән. Хатта түбән физик әүҙемлек тә бөтөнләй хәрәкәтһеҙ йәшәүгә ҡарағанда бактериаль инфекция эләктереү ҡурҡынысын 10 процентҡа кәметә. Был бигерәк тә гүзәл затҡа ҡағыла.

■ Әсә менән бала араһындағы бәйләнеш уларҙың беренсе тапҡыр бер-береһен күргәс түгел, ә ауырға ҡалғас та ныҡына. Ошо мәлдә әсә менән бала араһындағы эмоциональ контакт ни тиклем ныҡ булыуынан баланың физик һәм аҡыл үҫеше тора. Квинсленд университеты ғалимдары пренаталь бәйләнеш мәсьәләләренә ҡағылған тикшеренеүҙәр үткәргәндән һуң ошондай һығымтаға килгән. Буласаҡ әсәнең тыуасаҡ сабыйына эҫенеү процесы боҙолһа, бала аҙаҡтан насар һөйләшеүе, насар атлап китеүе бар, психик үҫеше лә аҡһауы ихтимал.

■ "Быуындар һыҙлай, көн боҙолор, ахыры", тигәндә ишеткәнегеҙ барҙыр. Ғалимдар хроник ауырыу менән һауа шарттары араһындағы бәйләнеште тикшереп ҡараған. "Болотло, ауырытыуы ихтимал" тип аталған уникаль проект идеяһы Манчестер университеты ғалимдарыныҡы, улар ук уны тормошҡа ашырған. Ғалимдар смартфон өсөн махсус аппликация булдырған, уның ярҙамында һәр кем ауырыуы хаҡында көндәлек алып бара ала, ә программа яҙмаларҙы һауа шарттары менән сағыштырып барған. Проектта 9 мең кеше ҡатнашҡан. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, һауа боҙолоуы менән хроник ауырыуҙар араһында бәйләнеш бар. Был асыш табиптарға ауырыуҙарҙы яҡшыраҡ аңларға ярҙам итәсәк. Проект әлеге көндә лә эшләй.

■ Иҙәнгә төшөп киткән ризыҡты тиҙ генә алһаң, бер нәмә лә булмай, уны ашарға ла ярай, тип иҫәпләйбеҙ беҙ. Быны Рутгерс-Нью-Брансуик университеты ғалимдары ла тикшереп ҡараған. Улар ҡарбуз, икмәк, майлы икмәк, йәбешкәк конфит алған һәм балаҫҡа, керамик плитаға, ағас һәм керамик иҙәнгә төшөрөп ҡараған. Иҙән дә, балаҫ та алдан сальмонеллаға ойошаҡ бер бактерия менән "эшкәртелгән". Ризыҡ бысраҡта 1 секундтан 5 минутҡа тиклем ятҡан. Лаборатор тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ысынлап та, ризыҡты төшөп киткәс уҡ алһаң, ул бактериялар менән зарарланып өлгөрмәй икән. Шулай уҡ уның ҡайҙа төшөүе лә мөһим икән. Иң хәүефһеҙе булып балаҫ торған. Ризыҡтың еүешлек кимәлен дә иҫәпкә алырға кәрәк, мәҫәлән, ҡарбуз тиҙ бысранған, бактериялар унда шунда уҡ "йәҙәп" киткән. Ғалимдар шуға ла "5 секунд ҡағиҙәһе"нең өлөшләтә эшләүен дәлилләгән, ҡайһы бер бактерияларға ризыҡҡа күсеү өсөн секунд та етә.

■ Кешенең нисек атлап йөрөүе уның "эске донъяһы" тураһында ла "һөйләй". Портсмут университеты ғалимдары 29 кешенең психоэмоциональ портретын тикшереп ҡараған һәм һуңынан уларҙың барыһын да атлатып ҡараған. Тәндең өҫкө һәм аҫҡы өлөшөнә махсус датчиктар беркетелгән. Уларҙы тикшереп ҡарағандан һуң, шул асыҡланған: агрессив кешеләр ҡулдарын ныҡ һелтәп, ныҡ хәрәкәтләнеп атлай икән.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ТЕ ЯҠҠАМЫ? БЫ ЯҠҠАМЫ?

(Башы 1-се биттә).

### Танышыу

Мостай Кәрим ижады академик совет мәктәбендә башҡорт әҙәбиәтен һәм шиғриәтен уҡыған һәр балаға таныш. Яңы уҡырға өйрәнгән сағымда, 1960 йылдар башында, уның "Те яҡкамы, бы яҡкамы?" тигән китабы беҙҙең өйҙә лә булды. Ҙур китап тышына эре хәрефтәр менән яҙылған хикәйә исеме минең хәтеремә ғүмергә уйылды, яҙмыштың һәр боролошо һайын тып итеп алдыма баҫа торған мәңгелек һорау булып ҡалды: "Те яҡкамы, бы яҡкамы?" Мостай Кәримдең үҙен дә донъяның ошо һорауы төрлө яҡҡа тартҡыланы, ахырыһы, ләкин Шағирҙың йәшәмеш умыртҡаһы, йәғни илаһи сынүҙәге тотороҡло булды, былдай сайҡауҙарға бирешмәне. Шағир астрология буйынса Үлсәү йондоҙлого аҫтында тыуған, йыһан бизмәне - уның күңеләндә. Мин дә шул уҡ Үлсәү йондоҙо нурына ҡарап донъяға килгәнмен, шуға шағирҙы аңлайымдыр кеүек тойола.

Хәйерниса ҡәрсәйем ғәжәп оҫта әкиәтсе булды, бөтә ауылға һәм беҙгә, балаларына, "Буҙегет", "Таһир-Зөһрә", "Йософ бәйгәмбәр" ҡиссаларын көйләп илата торғайны, ә атайым унан батырҙар тураһында бик күп әкиәттәр отоп алып, беҙҙе "Аҡъял батыр", "Аҡшан батыр" мажараларын һөйләп рәхәтләндерә ине. Ләкин минә туған әҙәбиәттең тәмен татыҡкан тәүге әҫәрҙәр - Зәйнәб Биишеваның "Ел-ел арбам" әкиәттәре менән Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙең йәме" повесы. Ғөмүмән, әсәйем үҙе күп китап уҡыны, ҡалын-ҡалын романдар алып ҡайтты, почта аша журналдар яҙҙырып, уларҙың эстәлеген кис һайын, сериал кеүек, беҙгә лә һөйләр ине. Һуң ул Мостай Кәримдең китабын ҡулымдан төшөрмәй ятлап бөткәнемде лә күрҙе, әлбиттә.

### 1969 йыл. Беренсе сирҡаныс

Өсөнсө класта уҡығанда, ун бер йәшемдә мин беренсе тапҡыр хикәйә яҙырға баҙнат иттем. Һуғыштан алда Үҙбәкстанға Ырымбур педтехникумын тамамлаған Орҡоя инәйем рус теле уҡытыусыһы итеп ебәрелә, ул шунда ҡалды, йәй һайын балаларын эйәртеп, илға ҡайтты. Туғандар ишле, төрлө ауылда йәшәйбеҙ, ә ул барыбыҙҙы барлап, кемдәлер нисәшәр көн ҡунаҡ булып, беҙҙе аралаштырып йөрөгән бер аҡыл эйәһе булды. Уның бәләкәй ҡыҙы Наилә апайым беҙгә матур йырҙар, бейеүҙәр, уйындар өйрәтте. Ул ҡайтып киткәс, бик болоҡһоп йөрөгәндә, һеңлеһенән айырылып ҡалған Йәмилдең хәлен төшөндөм. "Беҙҙең өйҙең йәме - ул минең апайым", тип уйланым да, уның менән бергә үткән көндәрҙе тасуирлап яҙҙым. Ярты дәфтәр самаһы яҙмамды әсәйем алып уҡыған: "Нишләп кешенекен күсереп яҙаһың, кешенекен урлап, яҙыусы булмайҙар!" Башыма күҫәк менән тондорған кеүек булды, яҙмамды йыып ятҡан мейескә ырғыттым. Күрәһең, ятлап бөтөлгән әҫәрҙең ҡайһы бер һүҙҙәре, хатта һөйләмдәре минең тәүге хикәйәмдә ярылып күренеп торғандыр. Нисек һурәтләргә белмәгәнмендер инде мин һағыныу-юҡһыныу хистәрен... Ләкин әсәйемдең һүҙҙәре ғүмер буйы ҡолағымда ғына тора. Кешенән бер-ике һүҙ ҙә ала алмайым, алырға тура килһә, авторын күрһәтә һалам...

Әммә ҡайсаҡ бер һорауҙы бирәләр: "Яҙырға кем өйрәтте һине, остазың кем?" Минең күҙ алдымда баяғы картина: дөрләп янған ут эсендә юҡҡа сыҡҡан йәшел тышлы дәфтәрем, унда көйрәп ҡыҙыл көлгә әйләнгән тәүге һөйләмдәр артында һағыныуҙан һығылып илап торған Йәмилдең йөҙө... Ә шулай ҙа "Те яҡкамы? Бы яҡкамы?" тигән был ғамлетса ғәжәп серле һорау минең артымдан ҡалманы.

### 1971 йыл. "Айгөл иле"

Мин Өфөләге 1-се мәктәп-интернатта 7-се кластан уҡый башланым... Бөтә класс менән барып, Башҡорт академия драма театрында "Айгөл иле" спектаклен ҡарағандан һуң минең өсөн Мостай Кәрим ижады икегә бүленде. Береһе - хыялый Айгөл (Хәнә Минһажева башҡарҙы) һәм икенсеһе - үкенес һәм хәсрәт эйәһе Ябағаев. Айгөлдөң нурҙан торған донъяһын уратып ғазап утында көйрәгән кешеләр өйөрөлә: яуаптың мөхәббәттән сәмләнгән Ричард Галин, яһалма һөйөүҙән биҙгән Илдар, тыуған иленән ситтә сарсаған Зөлхәбирә, япа-яңғыҙ ҡалыуҙан ҡурҡҡан Йәғәфәр, үҙ ғәйебен танып алйыған Ябағаев... Класташым Альмира Ҡыуатова ятаҡта ла, мәктәптә лә көнөтөнө Айгөл булып уйнаны, ә мин һатлыҡ йән Ябағаевты ғәфү итмәгән Йәғәфәр ҡартты (уны бөйөк Арыҫлан Мөбәрәков уйнаны!) уйланым да уйланым. Ғәфү итеүсе бер Алла, ти торғайны ҡәрсәйем. Әҙәм балаһы ғәфү итә алмай икән, тимәк, шул арҡала ул бәхетлә лә була алмай. Альмира Айгөлдә һайланы. Ә мин Ябағаевты. "Донъяның аҡ яғына ҡарап, күҙең сағылмаһын, һәм ҡараңғы яғын күреп, күҙең йомолмаһын", - тигән кеүек булды минә Шағир.

### 1979 йыл. Интервью

"Те яҡкамы, бы яҡкамы?" Мостай Кәримдең был һорауы мине Башҡорт дәүләт университетында уҡығанда тағы килеп тотто. Тәнәфестән һуң дәрескә йүгереп китеп барабыҙ, деканаттан секретарҙың телефонға ҡысҡырған тауышы яңғырай: "Бишме, дуртме?" Мин йәнфарман уҙып барышлай башымды ишеккә тығып: "Биш! Биш!" - теймсе. Шаяртып ҡына. Ә ул минә баш ҡаҡты ла: "Ярай, биш булһын!" - тип тороп ҡалды. Кафедраға инеп ултырышып бөткәйнек, ул беҙҙең аудиторияға килеп инде лә: "Барығыҙ, телевидениеға интервью бирегеҙ. Бишенсе курс, тип һеҙҙе һайланыҡ", - ти. Уҡытыусы Тимерғәли ағай Килмөхәмәтов биш-алты кешене лекциянан бушатты. Мин дә эләктем. Ағай эште аңлата: "Мостай Кәрим ижады буйынса фекерҙәрегеҙҙе һорарҙар. Университет алдында оператор көтә. Кемдәрегеҙ әҙер, хәҙер үк барығыҙ". Егеттәр йүгерешеп оператор янына төшөп китте. Мин китапханаға йүнәлдем. Шағирҙың томлыҡтары уҡыу залында асыҡ кәштәлә торғанын беләм. Алдым да йомолоп шиғырҙарын уҡый башланым. Донъямды онотҡанмын. Бер мәл иптәштәрем мине эҙләп килгән, тиҙ бул, һин генә ҡалдың, тиҙәр. Университет алдындағы колонналар янына сыҡһам, оҙон-оҙон ике егет тора. Береһе камера артында, икенсеһе блокнот-ручкалы. "Московское телевидение", тиҙәр! Үҙҙәре өшөгән, көҙгө әсе ел кәрәктәрен биргән. "Ваше мнение о творчестве Мустая Карима?" Мин нишләптер тел осомда ғына торған бер шиғырын һөйләй башланым: "Тәү һүҙемде әсәйемә әйттем, икенсеһен ергә өндәштем..." Быларҙың күҙҙәре түңәрәкләнде. Мин шиғырҙы руссаға тәржемә итеп ҡабатланым да үҙемсә анализ яһайым: "Шағир юлы әсәйҙән һәм тыуған ерҙән башлана, һәм мине уның ижадында иң ышандырғаны шул: әсәйҙе һәм тыуған ерҙе алдап булмай. Улар - ике ос, береһе тыуҙыра, икенсеһе - ҡуйынына ала. Ошо ике арауыҡтағы юл - кеше яҙмышы, ә шағир өсөн ул һорауҙар, ғазаптар, асыштар юлы". Кинәт оператор: "Стоп! Кассета кончилась", - ти. Мәйтәм, әллә нәмә һөйләп торамдыр ҙа былар юрый туктатты; уф, тип оялып ситкә ташландым. Юҡ, блокнот тотҡаны артымдан баҫтыра: "Не уходите, повторите сначала!" "Ни за что! Не умею повторять!" - ҡасырға итәм. Беләгемдән ҡымтып тотоп алды теге, һәм операторы шатыр-шотор килтереп кассета алыштырғансы, ебәрмәй торҙо ла һорауын ҡабатланы. Тағы баш тартырға ҡыйынһындым. Янынан баяғы шиғырҙы башҡортса һөйләнем, руссаға тәржемә иттем, фекеремде әйтеп ҡуйҙым. Аҙаҡ ишетәм, Мостай Кәримдең 60 йәшлек юбилейы уңайынан Мәскәү телевидениеһы төшөргән документаль фильмға минең генә сығышымды алғандар... Үҙем күрмәнем, әйттеләр. Бер кеше хатта һуҡранып әйтте...

### 1980 йыл. Министрҙың таянысы

Мин Башҡортостан телевидениеһында редактор булып эшләй башланым. 1956-1971 йылдарҙа мәғариф министры булып эшләгән Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафинаны телетапшырыуға саҡырҙым, аҙаҡ ул минең менән махсус һөйләшеп ултырҙы, тырышып эшләргә, күп өйрәнергә, күп уҡырға, тип кәңәштәр бирҙе. Мин уны оҙата сыҡтым. Ғафури урамы осонда беҙгә бер төркөм яҙыусылар осраны, араларында Динис Бүләков менән Мостай Кәрим дә бар. Салауат һәйкәле яғына китеп баралар. Ағайҙар Фатима инәйҙе уратып алды, ҡул биреп күрештеләр. Мин ситкә китеп көтөп торам. Иң аҙаҡтан Мостай Кәрим инәйгә ниҙер әйтте лә, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Инәй уға ҡул һелтәне лә минең янға килде. Мин шағирҙың инәйгә нимә тип әйтеп көлгәнен белгем килә, ә Фатима инәй шунда бер генә һөйләм менән яуап бирҙе: "Мин Мостай Кәримдең бөтә шаяртыуҙарына ла түҙәмен, сөнки ул заманында бөтә башҡорт мәктәптәрен һәм бөтә башҡорт теле уҡытыусыларын ҡотҡарҙы..." Үҙенең был һүҙҙәрен асыҡлап, һуңғараҡ биргән интервьюһында Фатима Хәмит ҡыҙы 1960 йылдарҙа булған ауыр һәм сетерекле хәлдәр хаҡында бәйән итте: "Хрущев беҙгә, бәләкәйерәк милләттәргә, бик ауыр ғәйеп ташланы: рус телен белмәгән кеше совет кешеһе була алмай, тине. Мәскәүҙән шундуҡ ҡарарҙар килеп төштө, тиҙ арала башҡорт мәктәптәрен рус мәктәптәренә әйләндерергә ҡушылды. Беҙҙәге йәмәғәтселек, ғалимдар (Әкрәм Бейеш), шағирҙар (Рәми Ғарипов), уҡытыусылар күтәрелеп сыҡты, конференция үткәрергә булдыҡ. Мәскәү министерствоһынан килгән кеше мәсьәләне шул хәтле ҡаты ҡуя, хәҙер үк ҡарарҙы үтәгеҙ, тип япап-ҡурҡытып сығыш яһай. Шунан кешеләр ҡаршы шаулаша башлағас, үҙе лә ҡурҡып, урамға сығып китте. Уның артынан мин дә сыҡтым, беҙгә Мостай Кәрим эйәрҙе. Ҡалғандар беҙҙән ҡалмай - арттараҡ

килә. Бөтә зал урынынан ҡупты тиерлек. Мин нишләргә лә белмәйем, тегене туҡтатып һөйләшергә итәм, мине иштергә лә теләмәй. Шунан Мостай Кәрим баяғы чиновникты ҡамап туҡтатты ла былай тине: "Башкирского министра Вы можете не слушать, а меня, башкирского поэта, Вы обязаны выслушать. Я пишу на башкирском языке, меня читают на башкирском языке. Если вы закроете башкирские школы, кто будет меня читать? Для кого мне писать? Ответьте на этот вопрос: для кого мне писать?" Теге чиновник ни әйтергә белмәй, ыҡ-мыҡ итә. Мостай Кәрим һаман нығыша, артынан ҡалмай баҫтыра бара, баяғы һорауын ҡабат-ҡабат бирә, яуап бирегеҙ, тип талап итә. Теге бәндә ҡул һелтәп ҡайтып китте. Беҙ башҡорт мәктәптәрен ябырға, тигән ҡарарҙы ҡабул итмәнек. Шулай булһа ла, ҡайһы бер ялағайҙар урындарҙа башҡорт мәктәптәрен бөтөрҙө, мәскәүҙәргә арҡаланып, район үҙәктәрендә байтаҡ мәктәпте руслаштырып өлгөрҙө..."

Фатима инәй минән бер нәмә лә йәшермәй һөйләй торғайны. Ул үҙе ҡатмарлы заман вәкиле, мөғжизә менән иҫән ҡалған башҡорт балаһы, "Сталин кешеһе" тигән ҡырын ҡараштарҙы ла йырып сыҡты. Һәм башҡорт халыҡ шағиры Мостай Кәримгә лә ул оло хөрмәт һәм ышаныс менән ҡараны.

## 1989 йыл. Мостай Кәримгә 70 йәш

Шағирҙың етмеш йәшлек юбилейын киң билдәләү бурысы беҙҙең телевидениеның бөтә бүлектәренә лә ҡағылды. Телевизион тапшырыуҙар дәүләт комитеты М. Кәрим ижадына бағышлап концерттар, спектаклдәр, документаль таҫмалар әҙерләне. Мин балалар һәм үҫмерҙәр өсөн телевизион тапшырыуҙар редакцияһында эшләй инем. Мостай Кәрим менән уҡыусыларҙың осрашыу кисәһенән репортаж әҙерләмәк булдым. Ҡайһы уҡыусылар менән осрашасаҡ? Әлбиттә, 1-се башҡорт мәктәп-интернатының актовый залы ПТС (передвижная телевизионная станция) камераларын ҡуйыу өсөн яйлыраҡ ине. Унан да бигерәк, тап ошо мәктәптә рәхәтләнеп башҡортса кисәләр үткәрергә мөмкин. Мин егермеләп һорау әҙерләп, балаларға тараттым, улар залдан шағирға һорау бирәсәк. Кисә бик йәнле барҙы, Мостай ағай бала-саға алдында тағы ла алсағыраҡ, ябайыраҡ, хатта бер ҡатлыраҡ булып китә, берсә шаярта, берсә етдиләнә...

Иң ҡыҙығы телестудияға ҡайтҡас башланды. Ағай иртәгәһенә иртүк үҙе килеп етте һәм кисәнең тулы яҙмаһын тотош ҡарап сыҡты. Шунан бергәләп ике-өс көн монтажда ултырҙыҡ. Мин мөхәррир булараҡ, һәр һөйләм-һүҙҙе, сценарийҙы тикшерәм. Ә шағир ағай үҙенең видеотаҫмаға төшкән һәр һүҙен, һәр ҡарашын күҙҙән үткәрә. Уңышлы урындарында бала кеүек шатлана, хатта осоноп китә, әгәр оҡшамаһа, кисекмәҫтән алып ташларға ҡуша. Мин уны күҙәтәм, ә ул кадрҙы ҡарай. Шулайтып бергә эшләнек. Нисәмә шағир һәм яҙыусы тураһында тапшырыуҙар әҙерләп тә, мин был хәтле яуаплылыҡ менән мөхәррир эшенә ҡыҫылған башҡа бер кемде лә күрмәнем. Был бит әле балалар менән осрашыу ғына кисәһе! Мостай Кәрим тигән кеше үҙ дәрәжәһе өсөн ни хәтле борсола, үҙ эшенә ни тиклем яуаплы ҡарай, үҙ баһаһын һәм ижадын ни хәтле ҡәҙерләй! Шунда үҙемә бер асыш яһаным: Мостай Кәрим үҙенең һәр ҡыҙыҡлы образын, һәр тәрән фекерен Хоҙай биргән бүләк, тип иҫәпләй, ул һәр бер шиғырына һөйөнөп, еренә еткереп эшләй һәм тиҙерәк, күберәк кешеләргә еткерә. Осрашыуҙа тағы бер нәмәне аңланым: Мостай Кәрим үҙенең ижадын бик ярата, үҙенең шиғырҙарын ярата. Үткер яңғыраған образдарына һөйөнә: "Шәп бит, ә!" - тип ҡысҡырып ебәрә. Белмәйем, башҡа мөхәррирҙәр менән бергә ултырып эшләнеме-юҡмы, ләкин монтаж аҙағында ул миңә бер һорау бирҙе: "Балалар минә сетерекле һорауҙар бирҙе, ә уларға кем яҙып бирҙе?" Мин дөрөҫөн әйттем. Ағай миңә һынап ҡарап торҙо ла өндәшмәне. Мин дә аңланым: "Һеҙ үҙегеҙҙе башҡортмон тип әйтергә ҡурҡмайһығыҙмы?" - һүҙ ошо һорау тураһында ине. Ағай уға бик шыма яуап биргәйне бит: "Мин бер ҡасан да, башҡортмон, тип ҡысҡырманым. Ләкин башҡортса уйланым, башҡортса яҙҙым, Башҡортостан тигән республиканың шағиры булдым, һәм бер ҡасан да үҙгәрергә йыйынмайым..."

Мин был һүҙҙәрҙе көндәлегемә теркәп ҡуйғанмын.

## 2000 йыл. Фатима инәй тураһында фильм

Фатима инәй Мостафина 1998 йылда декабрҙең сатлама һыуығында вафат булды. Ҡорос ихтыярлы, академик белемле ҙур йөрәкле башҡорт мәғрифәтсеһе 86 йыл йәшәне. Ғүмере гел көрәштән торҙо, һуңғы осоронда ла ауыр һынауҙар көткән: берҙән-бер улы Әнүәр Абдулла улы Закиров 42 йәшендә үлеп ҡалды. Инәйҙе Хәлит исемле туғанының ғаиләһе ҡараны, бигерәк тә килене Гүзәл Сафиуллина сабырлыҡ һәм хөрмәт менән баҡты.

Инәй тураһында фильм төшөргән саҡта күп кеше уның хаҡында йылы һүҙ әйтте. Мин Мостай Кәримгә лә мөрәжәғәт иттем, ул да бер һүҙһеҙ риза булды. "Фатима тураһында әйтергә була", - тине.

Мостай Кәрим менән интервьюны телецентрҙағы махсус президент бүлмәһендә алырға булдыҡ, видеооператор Ринат Әмирханов тура килде. Һөйләшелгән сәғәткә шағир студияға килеп етте, грим бүлмәһен үтеү, ут ҡуйыу һәм башҡа әҙерлек шыма ғына барҙы. Башта ул шаян, еңел генә һөйләшһә лә, камера тоҡанғас, етдиләнде. Фатима Хәмит ҡыҙы тураһында төплө һәм дәлилле яуап бирергә әҙерләнгәне күренде.

"Фатиманы мин йәш саҡтан уҡ яҡшы белдем. Фатима ҡайһы бер ирҙәргә ҡарағанда ла егет булды. Уның теләнән дә, ҡулынан да килде. Түрәләр алдында тәрилкә тотманы, үҙ дәрәжәһе өсөн ҡурҡып ҡалтырап төшмәне. Ул ир ҡыҙ ине. Белемле - меңде йығыр, тип, тап уның кеүек ғалим етәкселәрҙе әйтәләр..."

Инәйҙе һикһән йәшлек юбилейы уңайынан "Нефтселәр" мәҙәниәт йортонда ҡотлап, Мортаза Рәхимов, Заһир Исмәғилев сығыш яһаны. Ил аҙаматтарының хөрмәтен күрҙе инәйем, башы күккә тейҙе. Мостай Кәримдең дә шундай оло баһаһын Фатима Хәмит ҡыҙы үҙе иҫән ваҡытында ишетһә, бик тә ғорурланыр ине.

## 2004 йыл. М. Кәримдең 85 йәшлек юбилейы

Мостай Кәримгә 85 йәш тулыуҙы тотош республика йәмәғәтселеге байрам итергә йыйынды. Таңсулпан Бабичева менән Азат Нәҙерғолов миңә йыл уртаһында уҡ әйтеп ҡуйҙы: "Һин сценарий яҙаһын, дәүләт кимәлендәге тантаналы кисә опера һәм балет театрында үтәсәк". Ул йылды Салауат Юлаевтың тыуыуына 250 йыл тулыу айҡанлы "Салауат йыйыны"ның театрлаштырылған тамашаһы өсөн сценарий яҙғайным (йәнә 2005 йылда Салауат районында, 2008 йылда Салауат ҡалаһы янында, 2009 йылда Өфө ҡалаһында үткән "Салауат йыйындары" сценарийын яҙыу насип булды).

Шулай итеп, Мостай Кәримдең юбилей кисәһенә әҙерлек башланды. Уның бөтә әҫәрҙәре менән электән танышмын. Шағирҙың күп томлы йыйынтығын алып уҡырға тотондом, ике ай буйы уҡыным, уйландым, был оло шиғри һәм фәлсәфәүи донъя эсендә йәшәнем. Иң ҡыҙығы: Мостай ағайҙың үҙе менән осрашырға ынтылманым, миңә уның ижады ҡиммәтерәк ине. Сценарий яҙыр өсөн башта үҙ ҡарашымды асыҡларға, үҙ һүҙемде табырға теләнем. Бер тапҡыр телефон аша әҫәрҙәрен тотош уҡып сығыуымды әйттем. "Ярай, зыян итмәҫ", - тине ул. Зыян итмәне. Кисә бик юғары кимәлдә үтте. Рәсүл Ғамзатов килде. Уның килеүе үҙе бер мәртәбә, үҙе бер бүләк бит инде. Тантананың телевизион версияһын әҙерләүселәр кисәнең сценарий авторын күрһәтергә онотто, ләкин мин барыбер риза ҡалдым, сөнки Мостай ағайҙың йәнә бер феноменаль яғын астым: ул донъя менән хушлаша белә. Ул үҙенең һәр шиғри юлы, һәр образы һайын кешегә йәшәү тәмен тәмләтә торған шәхес. Устағы ваҡ ташҡа ҡарап, донъя яралтылған мәлде уйлау, алыҫ йондоҙға ҡарап, янында ғына ваҡыт арғымағы елкенеүен тойоу, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик һирәк осрай.

## 2009 йыл. Шағирҙың Хәтер кисәһе

Мостай ағай донъянан үтте. Республикала болоҡһоу, һағыныу, үкенеү хистәре ҡайнаны... Тыуыуына 90 йыл тулыу хөрмәтенә Хәтер кисәһенә халыҡ йәнә опера һәм балет театрына йыйылды. Миңә йәнә сценарий яҙыу йөкмәтелде. Барыһы ла һәйбәт, элеккесә кеүек, ләкин арала Шағир үҙе генә юҡ. Башлыса моңһоу йырҙар, уйсан шиғырҙар... Улар тағы ла уйсаныраҡ һәм моңлораҡ яңғырай. Кемдәрҙер таяныcһыҙ ҡалған кеүек асырғана, кемдер нимәлер эшләп өлгөрмәгән кеүек әсенеп сығыш яһай. Ләкин Шағир үҙе барыһына ла өлгөргәндер һәм бер нимә өсөн дә үкенмәйҙер кеүек тойола. Был хаҡта уның һуңғы шиғырҙары асыҡ һөйләй.

## 2018 йыл. Мәңгеләштереү

Мостай Кәрим ижады бөгөн башҡорт шиғриәте, әҙәбиәте, сәнғәте ҡаҙанышы ғына түгел, ә үҙе бер айырым мәҙәни утрау һәм... сәйәси сукмар. Уның исемен мәңгеләштереү Өфөләге башҡорт гимназияһы, урам, Милли йәштәр театры, мемориаль һәйкәл, фестивалдәр генә түгел. Мостай Кәрим ижады бөгөн иң алдынғы мәғрифәти һәм сәнғәти аҙымдар менән бәйле. Шағир исемендәге фонд ярҙамы менән махсус музей-кабинет асылды, уның эсендә виртуаль стенд өсөн ил башлығының гранты бүленде. Был эш 100 йыллыҡ юбилейы уңайынан уникаль яңы заман күренеше булырға тейеш. Мине тағы сценарий яҙырға саҡырҙылар: шағир ижадын бөгөнгө уҡыусыға яҡынайтырға кәрәк!.. Оҙаҡ яҙҙым, ярты йылға яҡын тырыштым. Ниһайәт, өсөнсө вариант ҡабул ителде. Был күләмле картинаның - 3D экспозицияһының артабанғы яҙмышы оператор-рәссам-режиссерҙарҙан тора. Ләкин шуныһы ҡиммәт: мин йәнә Мостай Кәрим ижады менән йәшәнем, уны тотош күңелемдән кисерҙем. Үҙем уйлайым: нинә тағы миңә тура килә был эш, инде был юлы нисек йырып сығырмын? Шунан һығымта яһайым: Хоҙайыма мең шөкер, йәнә шундай ҡыҙыҡлы эш насип булды миңә - шағирға эйәреп, үҙемсә ижад итеү бит был!..

## 2019 йыл. 100 йыллыҡ сират күпере

Һәр кемдең - үҙ шағиры. Күңеле менән, тормошҡа ҡарашы менән яҡын һәм аңлайышлы дуҫы була. Мостай Кәрим бик күптәрҙең шиғранә дуҫы, бөтә Рәсәй, хатта Ер шары буйлап һибелгән уның рухи дуҫтары, тип уйлайым. Сөнки уның ихласлығы һәм фиҙакәрлеге, йәшәүҙе яратыуы һәм үлемдән ҡурҡмауы кешеләргә лә күсә. Шағир йәшәү менән үлем уртаһындағы сират күпере өҫтөндә йәшәгән: унан ялған һәм хәҡиҡәт бер юлы атлай; унда артҡа юл юҡ; унда яңылышырға ярамай; унда тоғролоҡ һәм мөхәббәт кенә алға барырлыҡ көс бирә.

"Те яҡҡамы? Бы яҡҡамы?" Был гамлетса сәйер, ауыһыҙ һәм серле һорау Башҡортостандың халыҡ шағирын юҡҡа ғына яфаламағандыр ул...

Сәрүәр СУРИНА.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## "Башты бороу"

Арҡала ятҡан килеш башығыҙҙы һулға бороғоҙ, бер үк ваҡытта шаулы, ҡыҫҡа итеп тын алығыҙ, уңға борғанда тағы ла шулай тын алығыҙ. Тынды башты ике яҡҡа борған арала тура ҡарағанда сығарығыҙ. Тынды туҡтатмағыҙ һәм көсләп сығармағыҙ, барыһы ла тәбиғи булырға тейеш. Башығыҙҙы ҡапыл бормағыҙ, муйынығыҙҙы көсәндермәгеҙ.

Әгәр башығыҙ йәки умыртҡа һөйәгегеҙ йәрәхәтләнгән икән, башығыҙҙы уңға-һулға бормағыҙ, ә бары тик уны еңелсә генә шул яҡҡа ҡыйырлатығыҙ.

Норма: 24 тапҡыр 4 тын алыу-тын сығарыу+хәрәкәт күнегеүе (барлығы 96 тапҡыр).

## "Селәүсен"

Уң яғығыҙҙа ятығыҙ, кәүҙәгеҙ тура, аяҡтар тура, һул аяҡ уңының өҫтөндә ята. "Бер" тигәндә тын алығыҙ һәм аяҡтарығыҙҙы тубыҡтан бөгөп эйәгегеҙгә тартығыҙ, бер үк ваҡытта башығыҙҙы эйегеҙ. Арҡағыҙ ҙа бөгөлә. Тынды сығарғанда ашыҡмай ғына тәү торошҡа ҡайтығыҙ. "Ике" тигәндә күнегеүҙе ҡабатлағыҙ.

Тын алғанда арҡа түңәрәкләнә, баш алға эйелә һәм тубыҡтарға тартыла, тубыҡтар эскә тартылып, эйәккә яҡынлаштырыла (эмбрион позаһы). Тын алыу - шаулы һәм ҡыҫҡа. Тын сығарыу - тыныс, ашыҡмай ғына. Шулай уҡ ашыҡмай ғына турайығыҙ. Ҡулдар ирекле һәм көсөргәнештән азат, ҡамасауламай. Тын алғанда уларҙы эсегеҙгә йәки күкрәгегеҙгә ҡыҫырға мөмкин.

8 хәрәкәт эшләгәс туҡтап 3-5 секунд ял итегеҙ һәм тағы ла 8 тапҡыр ҡабатлағыҙ. Барлығы 12 тапҡыр "һигеҙ" эшләгеҙ (96 тапҡыр). Уң яҡ ҡабырғала 96 тапҡыр эшләгәс, һул яҡҡа боролоп, шул уҡ күләмде башҡарығыҙ. Бер яҡта 96 тапҡыр эшләү ялҡыта тиһәгеҙ, 32 тапҡыр бер яҡта, 32 тапҡыр икенсе яҡта эшләп, сиратлаштырырға мөмкин.

Әгәр һәр хәрәкәт нығ ауыртыу тыуҙыра икән, тулыһынса бөгөлмәгеҙ. Тын алғанда аяҡтарҙы бер ни тиклем тартып, башты саҡ ҡына эйеп, тын сығарғанда кәүҙәгеҙҙе саҡ ҡына турайтырға тырышығыҙ. Әгәр туҡтамайынса 8 тын алыу-тын сығарыу+хәрәкәт эшләүе ауыр булһа, 4 йәки 2 тапҡыр эшләү менән сикләнегеҙ һәм ял итеүҙе 10 секундҡа тиклем оҙайтығыҙ.

Башығыҙҙы эйеү, тубыҡтарығыҙҙы күтәреү ауыр икән, тәүҙә тын алғанда аяҡтарығыҙҙы ғына күтәрегеҙ, унда ла нығ түгел. Ә инде тын сығарғанда - төшөрөгөҙ. Шулай итеп, тура аяҡтарҙы тубыҡтан бөгөп эйәккә табан тартабыҙ - бер үк ваҡытта шаулы, ҡыҫҡа итеп тын алабыҙ. Ашыҡмай, тыныс ҡына итеп тубыҡтарҙы турайтабыҙ, тәү торошҡа ҡайтабыҙ - шул ваҡытта тынды ашыҡмай, шым ғына сығарабыҙ.

"Селәүсен" - түшәктә ятҡан сирлеләрҙең тәне ятып сейләнмәһен өсөн бик һөҙөмтәле күнегеү.

С. КУЗИНА.

(Дауамы бар).



## 21 ОКТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Мосгаз". Новое дело майора Черкасова". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Екатерина. Самозванцы". [12+]
23.00 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Следователь Тихонов". [12+]
03.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Спектакль "Неужели меня нет". [6+]**
**18.00 Ради добра. [6+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**21.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 5.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Т/с "Адъютант его превосходительства". Новости (на баш. яз.). [6+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Похищение девушки". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 22 ОКТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Мосгаз". Новое дело майора Черкасова". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
23.55 Премьера. "Право на справедливость". [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Екатерина. Самозванцы". [12+]
23.00 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Следователь Тихонов". [12+]
03.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.15 Республика Live. #Дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Спектакль "Как Настя чуть кикиморой не стала". [6+]**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск).**
**22.00 По сути дела... [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Адъютант его превосходительства". Новости (на баш. яз.). [6+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 23 ОКТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Мосгаз". Новое дело майора Черкасова". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф Премьера. "МГИМО. На всех языках мира". К юбилею легендарного института. [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Екатерина. Самозванцы". [12+]
23.00 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Следователь Тихонов". [12+]
03.55 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ты можешь! [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Честно говоря. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Спектакль "Остров 13". [6+]**
**1.15 Т/с "Адъютант его превосходительства". [6+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Резной трон". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 24 ОКТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.00, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Мосгаз". Новое дело майора Черкасова". [16+]
23.25 Вечерний Ургант. [16+]
0.00 Д/ф "Прыжок Льва". К 90-летию Л. Яшина. [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Екатерина. Самозванцы". [12+]
23.00 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Следователь Тихонов". [12+]
03.45 Т/с "Семейный детектив". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00 Т/с "Орлова и Александров". [16+]**
**11.15 Честно говоря. [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45 Интервью. [12+]**
**15.15 Берешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Спектакль "Алые паруса". [6+]**
**18.00 Д/ф "Прощенные километры". [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Витязь" (Московская область).**
**22.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Т/с "Адъютант его превосходительства". Новости (на баш. яз.). [6+]**
**1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**4.30 Д/ф "Инсан". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 25 ОКТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 "На самом деле". [16+]
1.25 Наедине со всеми. [16+]
2.25 Фигурное катание. Гран-при-2019. Прямой эфир из Канады.

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45, 03.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 "Юморина". [16+]
23.45 "Сто причин для смеха". Семён Альтов.
00.15 Х/ф "Васильки". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 5.30 Д/ф "Узел вечности". [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 22.00 Точка Z. [12+]**
**12.30, 21.00 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Весело живем. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью. [12+]**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Спектакль "Проданный смех". [6+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Т/с "Адъютант его превосходительства". Новости (на баш. яз.). [6+]**
**1.45 Спектакль "Бәндәбикә һәм Ерәнсә Сәсән". [6+]**
**3.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**3.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**4.45 Ете егет. [12+]**

## 26 ОКТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.30, 6.10 Х/ф "Старший сын". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
8.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.10 Д/ф Премьера. "Я тебя никогда не увижу..." К юбилею Николая Караченцова. [12+]
11.10 Д/с "Теория заговора". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 Д/ф "Николай Караченцов. "Любви не названа цена". [16+]
14.00 Х/ф "Белые росы". [12+]
15.50 Футбол. "Барселона" - "Реал Мадрид". Чемпионат Испании. Прямой эфир.
17.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.30 Х/ф "Дьявол носит Prada". [16+]
1.35 Фигурное катание. Гран-при-2019. Прямой эфир из Канады.
2.50 Наедине со всеми. [16+]
4.20 На самом деле. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
08.15 По секрету всему свету. [12+]
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
09.20 Пятеро на одного. [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
13.50 Х/ф "На обрыве". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Совсем чужие". [12+]
01.00 Х/ф "Сила Веры". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Ты можешь! [12+]**
**9.15 Посмотрим... [12+]**
**10.00, 14.00 Реальный футбол. [12+]**
**13.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Реальный футбол. Финальный матч. [12+]**
**17.00 Спектакль "Тайна серого замка, или Каникулы с приведениями". [6+]**
**17.45 Бизнес-обзор. [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00 Х/ф "Открытие". [16+]**
**2.45 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**6.00 Д/ф "Мы - одна семья". [12+]**

## 27 ОКТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Выстрел". [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.10 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Фигурное катание. Гран-при-2019. [16+]
16.00 Премьера. "Звезды "Русского радио". [12+]
18.10 Премьера. "Щас спою!" [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Большая игра. [16+]
23.45 Х/ф Премьера. "Уилсон". [16+]
1.30 На самом деле. [16+]
2.35 Про любовь. [16+]
3.30 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

04.40 Сам себе режиссёр. [12+]
05.20 Х/ф "Арифметика подлости". [12+]
07.20 Семейные каникулы. [12+]
07.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна. [12+]
08.00 Утренняя почта. [12+]
08.40 Местное время. Воскресенье.
09.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым. [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 "Смеяться разрешается". [12+]
13.40 Х/ф "Училка". [12+]
17.50 "Удивительные люди-4". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Д/ф "Хватит травить народ. Кино про вино". [12+]
23.50 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.30 Т/с "Следователь Тихонов". [12+]
04.10 Т/с "Гражданин начальник". [16+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15, 5.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТек?!" [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Берешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Деловой Башкортостан. [12+]**
**17.15 Полезные новости. [12+]**
**17.30 Лидеры региона. [12+]**
**18.00 Ты можешь! [12+]**
**18.30 Республика Live. #Дома. [12+]**
**19.00 Хоккей. КХЛ. "Динамо" (Минск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.15 "Гадкий утёнок". [6+]**
**1.30 Х/ф "Адель". [16+]**
**3.15 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Октябрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (22) дүшәмбе | 6:28 | 7:58 | 13:30 | 16:33 | 18:03 | 19:33 |
| 22 (23) шишәмбе | 6:30 | 8:00 | 13:30 | 16:30 | 18:00 | 19:30 |
| 23 (24) шаршамбы | 6:32 | 8:02 | 13:30 | 16:28 | 17:58 | 19:28 |
| 24 (25) кесе йома | 6:34 | 8:04 | 13:30 | 16:26 | 17:56 | 19:26 |
| 25 (26) йома | 6:36 | 8:06 | 13:30 | 16:23 | 17:53 | 19:23 |
| 26 (27) шәмбе | 6:38 | 8:08 | 13:30 | 16:21 | 17:51 | 19:21 |
| 27 (28) йәкшәмбе | 6:40 | 8:10 | 13:30 | 16:19 | 17:49 | 19:19 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ ***Бер һүҙ менән әйткәндә, "Бабич" фильмы минең икеләнеүҙәрҙе юйҙы, актер икәнлегемә инандырҙы, ысын сәнғәткә алып ҡайтты. Төптә йәшеренеп ятҡан осҡон тоҡанып китте.***



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# МОСТАЙ ИЛЕ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**41-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ябаға. Һағыҙаҡ. Ғилемдар. Ҡаурый. Бутка. Крем. Баобаб. Унау. Сэлинджер. Эрих. Тоба. Цирк. Тәбиғи. Канди. Бюро. Яшыҡ. Зифа. Шарт. Ваба. Сыра.

**Вертикаль буйынса:** Бирсәткә. Ғатауллин. Амуниция. Һике. Шитова. Мөкө. Бағдад. Ҡош. Урт. Ағас. Роман. Юмор. Абаға. Тибр. Ҡазбулатова. Эзбиз. Ромб. Йәнбухтина.

*ХУЖАБИКӘГӘ*

# АШ СОДАҺЫ...

♦ Ваннала йыуыныу алдынан эҫе һыуға 100 грамм сода һалыу һыуҙы йомшартырға ярҙам итә.

♦ Аяҡ тирләһә, аяҡ кейеменә бер аҙ сода һалырға кәрәк. Һуңынан аяҡ кейемен сисеп, ҡағып таҙартыу ҙа етә.

♦ Айырыуса тәмле сәй йәки ҡәһүә әҙерләү өсөн һыуға бер семтем сода һалып йомшартығыҙ.

♦ Кәбеҫтә бешергән һыуға бер балғалаҡ сода һалһаң, ул тиҙерәк тә бешә, витаминдары ла яҡшыраҡ һаҡлана.

♦ Йәшелсә-емеш, салат япраҡтары йыуғанда яҡшыраҡ таҙарһын өсөн бер литр һыуға 1-2 балғалаҡ сода һалып эшләргә була.

♦ Һыуытҡыстан сыҡҡан яман еҫте бөтөрөү өсөн сынаяҡ аҫтына 50 грамм сода һалып ҡуйығыҙ. Бер нисә көндән был соданы аш бүлмәһендәге раковинаға түгеп, унын да яман еҫен таҙартып ҡуйырға була.

♦ Емеш-еләктең тәмһеҙ әселеген бөтөрөү өсөн бер килограмына семтем сода һалырға. Ошо рәүешле бәлеш йәки ҡайнатма эшләгәндә шәкәрҙе аҙ ҡулланырға була.

♦ Келәмдән сыҡҡан насар еҫте бөтөрөү өсөн сода һибергә, бер нисә сәғәттән саң һурҙыртҡыс менән таҙартып алырға.

♦ Ашағандан һуң бер стакан һыуға бер балғалаҡ соданы иҙеп, ауыҙҙы сайҡатырға була. Был кариесты иҫкәртә.

♦ Бер семтем еүеш соданы серәкәй, бал ҡорто һ.б. тешләгән урынға һылау яраның һыҙлауын баҫа.

♦ Бит тиреһе ҡоро булғанда йылы һыуға ярты балғалаҡ сода иҙеп, ошо һыу менән битте йыуырға була.

♦ Фасоль һәм башҡа борсаҡтар тиҙерәк бешеп сыҡһын өсөн бер литр һыуға бер балғалаҡ сода ҡушып ҡайнатырға.

♦ Көн дауамында аяҡ өҫтө йөрөргә тура килһә, ун литр һыуға өс балғалаҡ сода һалып, аяҡты кисеп ултырыу еңеллек килтерер.

♦ Ҡултыҡ аҫтын сода менән пудралау тир еҫен баҫыр.

*АФАРИН!*



# "БАБИЧ"ТАР...

## Бабичлы булды!

**Халҡыбыҙҙың аҫыл тарихын булдырыусы шәхестәр кинофильмдарҙа, яҙыусылар әҫәрҙәрендә урын ала - был ҡыуаныслы хәл. 2017 йылда режиссер Булат Йосоповтоң танылған башҡорт шағиры, ижтимағи һәм сәйәси эшмәкәр Шәйехзада Бабичҡа бағышланған "Бабич" исемле тарихи картинаһы сығыуға һөйөнөс кисерҙек. Бабич үҙе беҙгә әйләнеп ҡайтҡандай булды. Әле бына был фильмға ҡағылышлы тағы шатлыҡлы мәл кисерәбеҙ: унда төп ролдәрҙе башҡарыусы артистар Илгиз Таһиров (Шәйехзада Бабич), Рәмзил Сәлмәнов (Әхмәтзәки Вәлиди) һәм Радмир Абдуллиндарҙың (Ғабдулхай Иркәбаев) ижади төркөмө Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаты исемен алды!**

- 2015 йылдарҙа Таңсулпан Бабичеваның "Әлмисаҡтан һин шағирһың" тип аталған проектында ҡатнашып, Шағир образын кәүҙәләндергәйнем. Тормошта бер нәмә лә буштан-буш булмай, тиҙәр бит, ошо ролгә әҙерлек ине ул. Бабичтың ижадын, тормошон өйрәндем, эҙләнеүҙәргә юлыҡтым. Театрҙан китеп йөрөгән сағымда был ролде тәкдим итеүҙәре, үҙем өсөн һығымталар яһап, тормошомдағы билдәләнешемде асырға ла ярҙам итте. Бер һүҙ менән әйткәндә, "Бабич" фильмы минең икеләнеүҙәрҙе юйҙы, актер икәнлегемә инандырҙы, ысын сәнғәткә алып ҡайтты. Төптә йәшеренеп ятҡан осҡон тоҡанып китте, - тип серҙәре менән бүлеште төп геройҙы башҡарған Илгиз Таһиров.

Уйсан ҡарашлы, ҡайһы саҡта үтә етди Рәмзил Сәлмәнов та сер бирмәҫкә тырыша: "Әхмәтзәки Вәлидиҙең халҡыбыҙ өсөн эшләгән эштәрен, уның хеҙмәттәрен ентекле өйрәнеп сығарған ролем. Маҡсатлы, аҡыллы шәхесте кәүҙәләндереү - ҙур яуаплылыҡ. Ҡанатланып, талпынып көттөм был премияны. Үҙемдең генә түгел, Илгиз, Радмирҙың ошо премияны алыуын теләүемдәндер. Премияны киләсәктә үҙ ижадым менән яҡлап йөрөтөрмөн. Сөнки был һөнәргә мин уйламағанда килеп ингән кеше түгел. Ул - минең тормошомдоң мәғәнәһе. Яратҡан театрыма хеҙмәт итеп, саҡыралар икән, киноларҙа төшөп йәшәү - үҙе бер ғүмер", - ти ул.

Тарихыбыҙға һағайыбыраҡ ҡараған осорҙа "Бабич" кинофильмының килеп сығыуы күбебеҙ өсөн яңылыҡ, хатта яңы мәғлүмәттәр асты. Башҡортостан йәштәренең "Тулҡын" ойошмаһына нигеҙ һалыусы, башҡорт милли хәрәкәтен ойоштороусыларҙың береһе, шағир Ғәбделхай Иркәбаев хаҡында ла һөйләй фильм. Белеүебеҙсә, ул да Шәйехзаданың көрәштәше, 1919 йылдың 28 мартында 1-се Смоленск уҡсы полк ҡыҙылармеецтары тарафынан Йылайырҙа язалап үлтерелә. Фильмда был образды шулай уҡ Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артисы Радмир Абдуллин кәүҙәләндерҙе. "Геройым тормошона байҡау яһап ҡына ҡалманым, уның кисерештәрен аңлап уйнаным. Халыҡ тейешенсә ҡабул итә алды икән, мин бик шатмын. Сөнки тарихи шәхестәрҙе сәхнәгә сығарыу - сауаплы эштер тип уйлайым. Уларҙы онотորға беҙҙең хаҡыбыҙ юҡ", - ти Радмир.

Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуға 100 йыл тулыу көндәрен байрам иткәндә йәштәребеҙҙең дәрәжәле исемгә лайыҡ булыу шатлығын театр коллективы, тамашасылар ҙа уртаҡлаша. Алда уйнайһы ролдәр, күтәреләһе бейеклектәр иҫәпһеҙ булһын!

**Рәзилә ЫРЫҪҠУЖИНА,**
**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының әҙәбиәт бүлеге мөхәррире.**

✓ *Этте иркәләтһәң, ирен ялар; түрәне иркәләтһәң, илен талар.*

*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӨФӨ БАЛАЛАРЫ ЛА...

## "Башҡорт әлифбаһы"н яҡшы белә

**Балаларыбыҙҙы туған телебеҙҙең моңон тойорға өйрәткән, башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен һәм тарихын күңелдәренә һеңдергән, милләттең киләсәген хәстәрләгән "Тамыр" балалар һәм үсмерҙәр телеканалы ошо көндәрҙә сираттағы үҙенсәлекле сараһын - "Башҡорт әлифбаһы" медиапроектының исем туйын үткәрҙе.**




"Башҡорт әлифбаһы" медиапроектын "Тамыр"ҙар Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына арнаған. Телеканал директоры Гөлназ Ҡолһарина әйтеүенсә, балаларға аңлайышлы һәм уларға яҡын булған әлифба форматында республиканың тарихын күрһәтеү теләге һәм идеяһы Сочи ҡалаһында үткән XXII Ҡышҡы Олимпия уйындары ваҡытында барлыҡҡа килгән. Ниһайәт, был матур ниәт видеороликы, китапсығы, дискыһы, линейкаһы һәм хатта кәнфите булған медиапроект рәүешендә тормошҡа ашырылды. Кемеһе атай-әсәйен етәкләп, кемеһе олатай-өләсәйенә эйәреп, бәғзеләре хатта коляскала мыш-мыш килеп йоҡлап килеп еткән балалар "Родина" кинотеатрының тамаша залына шығырым тулып урынлашып бөткәс, ошо үҙенсәлекле әлифбаны ҙур экрандарҙа ҡараны. "Башҡорт әлифбаһы"нда туған телебеҙҙең 42 хәрефенә ярашлы республиканың күренекле шәхестәре, башҡорт халҡының булмышын сағылдырған ҡәҙерле әйберҙәрҙең төшөнсәләре индерелгән. Мәҫәлән, "А" хәрефе мәғрифәтсе-шағир Аҡмулла, "Б" хәрефе - башҡорт балы, "В" - Ватан, "Г" - Советтар союзы Геройы осоусы Муса Гәрәев, "Ғ" - мәшһүр хореограф Фәйзи Ғәскәров исемдәре менән бәйләп бирелә. Һәр шәхес эргәһенә ҡыҫҡа, ләкин йөкмәткеле мәғлүмәт тә, сағыу фотоһүрәттәр ҙә ҡуйырға онотмаған авторҙар.

Әйткәндәй, был проекттың ижади төркөмөндә режиссер Ләйсән Солтанғолова, мөхәррир Гөлназ Ишемғолова, рәссам Айгөл Бикбаева, комьютерҙа эшләү оҫтаһы Айрат Арыҫланов, ҡораусы Данир Сәғитов һәм "Тамыр" студияһы балалары бар. "Һәр хәреф буйынса беҙ шул хәтлем оҙаҡ уйлаштыҡ, сөнки бер шәхесте алһаҡ, икенсеһе ҡалған кеүек. Әммә 42 хәрефкә Башҡортостанды кәүҙәләндергән шәхестәрҙе һәм шулай уҡ беҙҙең күңелебеҙҙә, рухыбыҙҙа йәшәгән төшөнсәләрҙе һалырға тырыштыҡ. Бәлки, кемдәрҙер индерелмәй ҡалғандыр, быныһы инде икенсе йыр, икенсе уйын, икенсе формат буласаҡ. Бөгөн "Башҡорт әлифбаһы"нда беҙ балаларға Башҡортостандың тарихын һөйләп бирәбеҙ", - тине "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина.

Байрам сараһын "Тамыр" вокал ансамбленең моңло йырсылары һәм М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы "Дуҫлыҡ" халыҡ бейеүҙәре ансамбленең дәртле сығыштары биҙәне. Башҡорт моң-көйөнә сорналып, сараны алып барыусылар ойошторған уйын-ярыштарҙа ихлас ҡатнашып, башҡортса һөйләшеп, бүләктәр отоп кинәнде кескәй тамашасылар. Әйткәндәй, балаларҙың зирәклеге һәм башҡортса яғымлы өндәшеү һүҙҙәрен, хайуандарға хас өндәрҙең нәҡ башҡортса яңғырашын, һирәк ҡулланылған һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен яҡшы белеүе күңелгә май булып яғылды. Бал ҡортоноң "бҙҙҙ" тип осоуон, ҡаҙҙың "ыҫҫҫ" тип ыҫылдауын, һыйырҙың "мөөө" тип мөңрәүен белеү әллә ни әһәмиәтле һөнәр ҙә түгел һымаҡтыр, ләкин бына шунан башлана ла инде баланың туған телен үҙ итеүе һәм һөйөүе. Баш ҡала балаларының был белемдәренә саҡырылған ҡунаҡтар - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты президиумы рәйесе Эльвира Айыткулова, БР Йәмәғәт палатаһы рәйесе урынбаҫары Ғәлиә Мөхәмәтйәнова, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы депутаты Римма Үтәшева, "Юлдаш" радиоһының баш мөхәррире Тәнзилә Үлмәҫбаева, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды директоры Гөлназ Йосопова, Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Артур Әлибәков та бик ҙур баһа бирҙе.

Ә бына байрам тураһында кескәй тамашасылар үҙҙәре һөйләне. "Башҡорт алфавитын күптән белһәм дә, ҡайһы бер өлкән ағай-апайҙарҙы белмәйем икән. Шуға өйҙә яңынан ҡарап, Мостай Кәрим, Муса Гәрәев, Фәйзи Ғәскәров тураһында уҡыясаҡмын", - тине сараны оҡшатып ҡабул иткән 102-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Рәсүл Ҡамбулатов.

Байрамдан алған тәьҫораттарын Өфө ҡалаһынан Мәликә Батыршина тәмле бүләккәнфитте ашаған арала "оҡшаны" һүҙе менән генә белдерһә, Шамонино ауылынан Фатима Туҡаева ихлас һөйләште: "Бында миңә бөтә нәмәһе оҡшаны, үҙем дә иртәгә йырлайым, - тине ҡыҙыҡай. - Әле уҡый белмәйем, хәрефтәрҙе ҙур үҫкәс өйрәнәм. Балалар баҡсаһында әле исемемде һәм фамилиямды ғына яҙырға өйрәндем. Ә бөгөн әлифбалағы "Ватан" һәм "Ҡымыҙ"ҙы иҫләп ҡалдым, минең ҡымыҙ һәм бесәй тураһында шиғырым бар. Миңә байрамдар нык оҡшай, уларҙы нык яратам һәм киләм"...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Башҡорт әлифбаһы"ның видеоролигы 4 минутлыҡ тирәһе генә булып, китапсығы ла ҙур булмаһа ла, ул башҡорт халҡының тел байлығын, шаңлы һәм данлы тарихын, үткәне һәм киләсәген үҙ эсенә һыйҙырған ифрат йөкмәткеле медиапроект булып сыҡты. Иң мөһиме, тәүге тапҡыр күргән һәр кемдең - кесеһенең дә, олоһоноң да күңеленә ятты.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**













АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИЛ ИРЕКҺЕҘ БУЛҺА,

## ир күркһеҙ булыр

Этте иркәләтһәң, ирен ялар; түрәне иркәләтһәң, илен талар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тауышланып ҡына бер ни ҙә иҫбатлап булмай. Ҡарағыҙ: йомортҡа һалған тауыҡ бөтөн Ер шарын барлыҡҡа килтергән кеүек тауышлана.

**(Марк Твен).**

Белем яҡшы кешене яҡшыраҡ, насар кешене насарыраҡ итә.

**(Томас Фуллер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер батша үҙенең баҡсалары буйлап йөрөп килергә ниәтләп, һарайынан сыҡһа, ҡапҡа алдында бер хәйерсене тап итә. Хәйерсе унан хәйер һораясаҡ тип уйлап, батша уға: "Ни теләйһең?" - тип мөрәжәғәт итә. Ерҙә ултырған хәйерсе батшаға аҫтан өҫкә табан ҡарап, былай ти: "Һин минең теләгемде ҡәнәғәтләндерә алған кеше кеүек һорау бирҙең бит әле..." "Әлбиттә, мин һинең теләгеңде ҡәнәғәтләндерә алам, әйт!" - ти батша. Әммә хәйерсе үҙенекен ныҡый: "Ниҙер вәғәҙә итер алдынан ике тапҡыр уйларға кәрәк, батшам..." Батша ҡыҙа башлай: "Мин һин һорағандың барыһын да бирәм. Мин бик баймын һәм ҡеүәтлемен. Мин бирә алмаған нимә һорайһың һуң һин?" "Минең һорауым бик ябай. Бына минең ҡулымдағы ҡапсыҡты күрәһеңме? Мин уны һәр ваҡыт үҙем менән алып йөрөйөм. Шуны ниндәйҙер ҡиммәтле берәй нәмә менән тултыра алырһыңмы икән?" - тигән хәйерсе. "Әлбиттә!" - тигән батша һәм үҙенең ҡаҙнасыһын саҡырып алып, хәйерсенең ҡапсығын аҡса менән тултырырға бойорған. Тик ни ғәжәп: ҡаҙнасы ҡапсыҡҡа аҡса төшөрөп тора, аҡсалар ҡайҙалыр юҡҡа сығып тора, ти. Был хәл бик оҙаҡ дауам иткән, әммә ҡапсыҡ буш ҡалған. Был бәхәс тураһында ишетеп, тирә-яҡтан халыҡ йыйылып киткән: барыһының да батшаның үҙ вәғәҙәһендә тороу-тормауын күргеһе килгән. Батшаның намыҫы һынау алдында ҡалған. Быны аңлап торған батша барлыҡ ҡаҙнасыларын саҡырып алып, батшалыҡта булған бар аҡсаны хәйерсенең ҡапсығына һалырға бойорған. Аҡса ғына түгел, барлыҡ алтын, көмөш, ынйылар ҙа хәйерсенең ҡапсығына киткән. Ә ҡапсыҡ барыбер буш ҡалған. Сират батшаның үҙе менән йөрөткән алтын-көмөштәренә барып еткән. Шунда батша барлыҡ аҫыл әйберҙәрен сисеп, хәйерсенең аяҡ аҫтына ташлаған һәм былай тигән: "Һин еңдең. Ләкин бынан китер алдынан ҡапсығыңдың серен ас, зинһар". Хәйерсе былай тигән: "Сереме? Уның сере ябай: миндәге ҡапсыҡ кешенең теләктәренән яһалған..."**

**Бына шулай, беҙ йыш ҡына бер теләктән икенсеһенә күсәбеҙ, шул уҡ ваҡытта һәр теләкте ҡандырған һайын бер ваҡытта ла тултыра алмай торған буш ҡапсыҡҡа әйләнгәнебеҙҙе лә һиҙмәйбеҙ..."**


1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | | |
|---|---|---|
| **Баш мөхәррир** | | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99,** | **246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
18 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 2068/10